*Бәндәне ризыҡ тиғән ҡыймылдатыр,*
*Сәселгән ризығы булһа, йөрөп татыр.*
*Һәр бәндә күрәһене күрмәй ҡалмаҫ,*
*Кәрәк солтан булһын, кәрәк император.*

*Мифтахетдин АҠМУЛЛА.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

9 - 15 АПРЕЛЬ (АЛАҒАРАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№15 (433)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Башланды!**




4

**Туйындырыусы ла - ер,**
һыйындырыусы ла - ер...



6-7

**"Ни мәғәнә дөрөҫ һүҙ әйтеүҙән,**



10 дөрөҫ һүҙең әгәр һуңлаһа?"

**Ура! Юлаевсылар финалда!**



15

14 ТВ-программа


## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Йәмғиәтебеҙҙә шағир һүҙенә, яҙыусы һүҙенә ихтыяж бармы, һәм ул ихтыяж нисегерәк ҡәнәғәтләндерелә?

*Хәсән НАЗАР, шағир, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты:* Рух һүнмәһә, ил йәшәр, рухлы халыҡ - ырыҫлы халыҡ. Рух асылын билдәләгән юғары аңыбыҙҙы, асылыбыҙҙы, моңобоҙҙо, телмәребеҙ ынйыларын шағирҙар һәм яҙыусылар еткерә халҡыбыҙға. Тормош һәм замандың ғибрәттәренән аҡыл һәм йөрәк көсө менән улар ҙа аралай. Тап шул көс йәшәтә лә, йәшнәтә лә телебеҙҙе, әҙәбиәтебеҙҙе. Тимәк, яҙыусының рухы һәм һүҙе кәрәк булыуҙан туҡтағаны юҡ. Бөгөнгө көн ижадсыһының төп бурысы ла ошо - халҡына кәрәкле һүҙ әйтеү. Әлбиттә, ижадсының төрлөһө бар: йөктө төпкә егелеп тартыусылар ҙа, мисәүҙә генә юртыусылар ҙа. Данға иҫе китмәүселәр ҙә, сәпәкәй көҫәүселәр ҙә осрай. Иҫәпкә бар, һанға юҡ булып йөрөүсе ризаһыҙҙар ҙа, көнсөлдәр ҙә бар арала. Ләкин ҡый-һайҙан ғына ерҙең ҡото китмәй бит.

*Һөйөндөк АҪЫЛОВ, журналист:* Халыҡ төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәт ала: интернет, телевидение, радио, ваҡытлы матбуғат баҫмалары... Шул уҡ ваҡытта ундағы мәғлүмәттәр хәҡиҡәткә, ысынбарлыҡҡа тап килеп бөтмәүе лә бар, шунлыҡтан халыҡҡа ялған мәғлүмәттәр килеп етә, башы ҡаңғыра. Бына шундай ваҡыттарҙа алдынғы ҡарашлы яҙыусыларыбыҙ халыҡҡа хәҡиҡәтте еткереп, әйтеп бирергә тейеш. Теге йәки был сәйәси ваҡиғаларға объектив аңлатма биреү, халыҡҡа дөрөҫ юл күрһәтеү ижадсының бурысы тип иҫәпләйем. Үкенескә ҡаршы, илебеҙҙә хәҡиҡәт ҡанундары өҫтөнлөк итә тип әйтеп булмай. Беҙ ярым хәҡиҡәт менән йәшәүгә мәжбүр ителгәнбеҙ. Әлеге ваҡытта беҙ демократик дәүләт төҙөлөшөнөң тәүге баҫҡысында ғына торабыҙ. Был осраҡта дөрөҫ һүҙ әйтеү ниндәйҙер бәләгә лә әүерелеүе мөмкин ижадсы өсөн. Мәғлүм булыуынса, хәҡиҡәтте әйтеп биргән ижадсы, ғәҙәттә, власть, сәйәси партия тарафынан эҙәрлекләүгә дусар ителә. Халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың яҙмышы быға асыҡ миҫал булып тора. Ваҡытында ул дөрөҫлөктөң күҙенә тура ҡарауҙан ҡурҡманы. Бөгөн иһә күптәр федераль үҙәк менән республика араһындағы бәйләнештәрҙең, республика менән район етәкселеге мөнәсәбәттәренең ысын айышына төшөнә алмай. Ошо даирәләрҙәге ысынбарлыҡ, хәҡиҡәт бер кем тарафынан да тура ярып әйтелгәне юҡ әле. Ошо тәңгәлдә лә халыҡ яҙыусы һүҙен көтә лә, әммә Рәми Ғариповтар, Ғәзим Шафиҡовтар юҡ.

*Фәүзиә ЯХИНА, пенсионер:* Яңыраҡ шундай бер мәғлүмәткә тап булдым: йәмғиәтебеҙҙә халыҡтың 90 проценты яҙыусы һүҙенә мохтаж, имеш. Мин быға ышанам.. Уйлап ҡараһаң, һәр замандың үҙ "һөрәнсеһе" (глашатай), хәҡиҡәт яҡлаусыһы, сәсәндәре, шағирҙары булған. Мәҫәлән, үҙебеҙҙең шәхестәрҙән Шәйехзада Бабичты ғына алып ҡарайыҡ. Ирекле, хозур Башҡортостан өсөн ҡыҫҡа ғына ғүмерендә янып, ялҡынланып ижад иткән шағир! Дөрөҫөн әйткәндә, мәленә күрә унын йөрәген, үткер һүҙен азатлыҡ байрағы менән сағыштырырға булыр ине. Ғөмүмән, йәмғиәтебеҙ ижадсы һүҙенә һәр саҡ мохтажлыҡ кисереп тора. Бабичтан һуңғыраҡ осорҙарҙа ла Башҡортостаныбыҙ өсөн һынау, һынылыш ваҡиғалары аҙ булманы. Шул мәлдәрҙә беҙгә Рәми Ғариповтың, Ғәзим Шафиҡовтың, Мостай Кәримдең аҡыллы һүҙҙәре нисегерәк кәрәк ине! Әле лә йоҡомһорарға ирек бирмәй беҙгә уларҙың үткер һүҙҙәре, сөнки Башҡортостаныбыҙға әленән әле бысраҡ ҡул менән ағыныуҙар, ҡара мәкер һәм баҫымсаҡлау факттары килеп сығып ҡына тора. Республикабыҙ йөҙөндә тотош халыҡҡа кәмһетеүле ҡараш ташлай, унын телен, исемен бысратырға, данлы шәхестәренә "ревизия" үткәрергә маташа ҡайһы бер ҡара эсле сәйәсмән ишараттары. Ах, нисегерәк кәрәк әле бөгөн дә беҙгә Бабич һәм Рәмиҙең ялҡынлы үткер һүҙҙәре! Үкенескә күрә, бөгөн беҙҙең яҙыусылар битараф, ситтән күҙәтеүсегә әйләнде, тип әйтер инем. Әлбиттә, шағир, яҙыусы һүҙе мотлаҡ һынылыш мәлдәрендә генә кәрәк икән, тип уйларға ярамай. Беҙгә уларҙың ижад өлгөләре көн дә кәрәк. Ҡәҙимге көндәлек тормошта беҙ китапһыҙ йәшәй алыр инекме ни? Хәҙер китап уҡыусылар һирәк, тиерһегеҙ. Бәлки, талантлы әҫәр яҙыусылар һирәктер?..

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## РУХИӘТЕБЕҘ

# УҠЫТЫУСЫЛАРҘЫҢ ИҢ-ИҢДӘРЕ...

## ошо бәйгелә лә асыла

**Ошо көндәрҙә баш ҡалала "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы-2011" конкурсына йомғаҡ яһалды. Быйылғы конкурста бөтәһе 57 уҡытыусы: республика ҡалаларынан - 21, райондарҙан -34, шулай уҡ Силәбе өлкәһе Арғаяш һәм Ҡоншаҡ райондарынан ике уҡытыусы көс һынашты. Биш уҡытыусы - Эльза Толомбаева (Өфө ҡалаһының Ленин районы), Юлай Мәүлетҡолов (Ғафури районы), Гөлсинә Мөъминова (Балтас районы), Наилә Буранғолова (Өфө ҡалаһы Дим районы) һәм Диниә Ғәлләмова (Әбйәлил районы) бәйге лауреаттары тип билдәләнде. Гран-при был юлы Өфөнөң 35-се урта мәктәбе уҡытыусыһы Эльза Толомбаеваға бирелде. Уға үҙенең тынғыһыҙ эшмәкәрлеге, уҡытыусылар бәйгеһе, үҙе эшләгән коллектив тураһында һөйләүен һорап мөрәжәғәт иттек.**



(Дауамы 5-се биттә).

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ҮҘЕҢДӘН БАШҠАНЫ...

## әүлиә тип бел

**Был әйтемдең синонимдары, варианттары ла бик күп кенә. Әйтәйек, "Бүтәгәнән дә түбән бул", "Олоға оло, кесегә кесе була бел", "Таш менән атҡанға аш менән ат" һ.б. Шулай ҙа "Үҙендән башҡаны әүлиә тип бел" тигәне уларҙың араһынан тағы ла тәрәнерәк мәғәнәгә эйә кеүек. Шул хаҡта фекер йөрөтәйек.**

Ғәжәйеп ҡарма-ҡаршылыҡлы мәғәнәгә, ябай логикаға һыймаҫлыҡ йөкмәткегә эйә был әйтем. Ни өсөн тигәндә, әхлаҡи яҡтан түбән, яуыз, яһил, хәшәрәт, әшәке, ҡара эсле, ике йөҙлө, йыртҡыс йәнле, кеше үлтереүсе кеше һиңә әүлиә була аламы? Ә бит әйтемдә "үҙендән башҡаны", тиелгән. Үҙендән башҡаға барыһы ла инә: яҡшыһы ла, яманы ла. Улайға китһә, беҙ шул уҡ Гитлерҙы ла, Тәфтиләүҙе лә әүлиә тип атарға тейеш булабыҙ бит.

Бар яҡтан да камил булған, изге, саф күңелле, ярҙамсыл, эскерһеҙ, ихлас, сумарт, юғары әхлаҡлы, ололарға ололо҇ло, кеселәргә кеселекле самими затты беҙ, ысынлап та, үҙебеҙ оҡшарға тырышҡан, яҡын күргән Аллаһ затына - әүлиәгә тиңләйбеҙ. Тәрбиәнең, кемгәлер оҡшарға тырышыуҙың был алымы, ысынлап та, тәбиғи. Ә ни өсөн беҙ ошондай сифаттарҙың киреләренә эйә булған кешене лә әүлиә тип белергә тейеш һуң? Дөрөҫ, тап өҫтөнә баҫтығыҙ: Иблес сифаттарына эйә бындай заттар ҙа беҙҙең тәрбиәсе һәм уларҙың да шәхес тәрбиәләүҙәге әһәмиәте әүлиәләрҙән һис тә ҡалышмай. Эйе, беҙ ундай заттарға сирҡанып, ғибрәт итеп ҡарайбыҙ, ундай заттарға оҡшамаҫҡа тырышабыҙ, балаларыбыҙҙы ла уларҙан алыҫыраҡ торорға ынтылабыҙ. Әҙәм балаһы йылының ҡәҙерен һыуыҡты татығас ҡына белә, көн яҡтылығының ҡәҙерен төн ҡараңғылығынан ҡурҡҡас ҡына аңлай, яҡшыны яманды барлығына инанғас ҡына ҡәҙер итергә өйрәнә. Шулай булмаһа, эйе, яҡшылыҡтың, изгелектең ҡәҙере булмай.

Башҡорт халҡының бөйөк эпик ҡомартҡыһы "Урал батыр" эпосы ла ошондай дилеммаға ҡоролған. Унда изгелектең образы булған Урал батыр менән яуызлыҡты кәүҙәләндереүсе Шүлгән - икеһе бер туған, бер әсәнән, бер атанан тыуған. Шүлгән үҙенең яуызлыҡтарын эшләгәндән һуң бер нисә тапҡыр Уралдың ҡулына эләгә, әммә Урал уны үлтермәй. Сөнки, беренсенән, Шүлгән уның ҡан туғаны, икенсенән, ул Шүлгәндең йәнен ҡыйһа, үҙе лә шул уҡ яуызлыҡ юлына баҫыр ине. Шул уҡ ваҡытта Шүлгән Урал туғаны өсөн әүлиә кимәлендәге кеше лә. Сөнки Урал ағаһы Шүлгәндең үҙ халҡына ҡарата яһаған яуызлыҡтарынан ғибрәт алып, изгелеккә тоғро булып ҡалыуға өлгәшә. Йәғни изгелек яуызлыҡ менән көрәшеп кенә үҙенең төп сифаттарын һаҡлай ала. Кем белә, бәлки, был әйтемдең "Таш менән атҡанға аш менән ат", тигән формаһы ла ошо эпосҡа бәйле тыуғандыр.

Был әйтемдәр араһындағы "Бүтәгәнән дә түбән бул" тигәне салғы менән дә сабып булмаҫлыҡ иң тәпәш үләнгә - бүтәгәгә бәйле. Ә бит был әйтемдә һауаланыуҙан, эреләнеүҙән, күңел кирелегенән (русса - гордыня) иҫкәртеүгә бәйле ишаранан тыш, милләттең үҙ-үҙен һаҡлау инстинктына бәйле хәләте лә ята. Һәр хәлдә, был әйтемдәрҙә милләтебеҙ өсөн милли идеяға торош аҡыл һәм тәжрибә тупланған.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ИШАРА

# РЕЙТИНГТЫ КҮТӘРӘЛЕР ҘӘ...

## ә рухты күтәрәме, зауыҡты ҡандырамы?

**Был хатымды яҙырға ултырҙым да, уйға ҡалдым. Хатты БР Мәҙәниәт министрлығына һалырғамы, әллә БСТ каналы етәкселегенә өндәшергәме? Шулай ҙа "Киске Өфө" гәзитендә баҫылып сыҡһа, халыҡ күберәк уҡыр, тигән һығымтаға килдем. Яуап итеп халыҡ үҙ фекерен дә еткерер, тинем.**

Әлбиттә, бер саҡ түҙемлегем тамам бөтөп, "Һораған өсөн башҡа һуҡмаҫтар" тип, БСТ каналы журналистарына шылтыраттым. "Ниңә беҙҙең каналда туҡтауһыҙ туп тибеү, шайба ҡыуыуҙы күрһәтәһегеҙ? Ул тапшырыуҙар өсөн "Спорт" каналы бар бит", - тип һорау биргәйнем, "Был тапшырыуҙар каналдың рейтингын күтәрә", - тигән яуап алдым. Эйе, бөтә һөйләшеүҙәр ҙә бөгөн шул "рейтинг" тигән һүҙ менән аҡлана. Минән, минең ғаиләмдән бер кем дә, бер ҡасан да фекеребеҙҙе һорашҡаны булмағас, ул "рейтинг"ты нисек асыҡлайҙар икән, тип уйланам. Әлбиттә, мин спортҡа ҡаршы түгелмен. Йәштәр йүгерһендәр, һикерһендәр. Бер саҡ танылған киноактер Валентин Гафттан: "Һеҙ спортты яратаһығыҙмы?" - тип һоранылар. Ул: "Эй, яратам, телевизор аша күрһәтелгән бөтә тапшырыуҙарҙы ла ҡарайым", - тип яуап бирепкөлдөрҙө. Эйе, беҙҙә лә ирҙәр һыра эсеп, диванда ҡырын ятып хоккей ҡарай. Программала яҙылған мәҙәни тапшырыуҙар урынына көн аралаш хоккей күрһәтеүҙе мин арттырып ебәреү тип ҡабул итәм. Улайһа, "Спорт" каналында нимә күрһәтәләр икән, тип, ул каналды асып ҡараһам, унда ла шул уҡ уйын бара. Берәү йырлағанса: "Ник алай, Николай?" - тип мин дә йырлап ҡуйҙым.

Борон Спарта тигән дәүләт булған. Унда физик яҡтан көслө кешеләр культы алға һөрөлгән. Хатта сибек тыуған балаларҙы ла юҡ итә барғандар, имеш. Шулай итеп һуғышсы, спортсы быуын үҫтергәндәр. Әммә Спартаның тарихта ҡалған бер генә шағиры, йә йырсыһы ла билдәле түгел. Көн һайын бөтә республикаға хоккей күрһәтеүҙе беҙгә физик көс культын тағыу тип тә ҡабул итәм. Был күренеш элек тә, телевизорһыҙ илдә лә бар ине. Уҡыуымды тамамлап ҡайтып, эшкә урынлашып, бер әбейгә фатирға индем. Оло йәштәрҙәге инәй, ҡулына бәйләмен алып, радио янына яҡыныраҡ ултырып, йырҙар тыңларға ярата ине. Тик ҡайһы саҡта матур йыр урынына радионан хоккей репортажы тапшыралар. Әбекәйҙең күңеле кителеп: "Эх, шул бөтмәҫ коххей, коххей..." тип, радиоһын һүндереп ҡуйыр ине.

Беҙ әле, әлбиттә, бүтән каналдарға күсә алабыҙ. Тик башҡорт мәҙәниәте нисек үҫешер, йәштәр шиғыр, йыр яҙырмы, милли рух шинерме, тип борсолам. Бүтән каналдарҙа футбол, хоккей ярыштарын киске үк берҙән һуң ҡуйлар. Эйәрәйексе. Бөтә ҡатын-ҡыҙҙарҙың үҙегенә үткәндер был хоккей һәм футбол, волейбол репортаждары, тик ниңәлер береһе лә өндәшмәй. Ижади тапшырыуҙарға күберәк юл бирәйексе, йөмәғәт!

**Фәүзиә ЯХИНА.**

КЕМ АЛЫҠ!



Мишкә районының башҡорт теле уҡытыусылары.

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2011 йылдың икенсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу дауам итә. Вәғәҙә итеүебеҙсә, апрелдә лә гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәргә "Бүләгебеҙҙе кем алыҡ!" тип әйтмәксебеҙ. Сираттағы бағыусыбыҙ был юлы кеҫә телефоны тәҡдим итә.**

**Әйткәндәй,** кемде был бүләк ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы **тыуған көнө** менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Шулай итеп,** 2011 йылдың икенсе ярты йыллығына яҙылыу өсөн яңы хаҡтарҙы хәбәр итәбеҙ: 50665 индексылыһына **340 һум 92 тиңгә**, 50673 индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) **370 һум 92 тиңгә** яҙыла алаһығыҙ.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Республикаһында социаль-гуманитар фәндәрҙе үҫтереү маҡсатында "IV төрки телле илдәр социологтары конгресын үткәреү тураһында"ғы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Бойороҡҡа ярашлы, конгресс 2011 йылдың октябрендә Өфө ҡалаһында үткәреләсәк, уға әҙерлек һәм үткәреү буйынса ойоштороу комитеты составы раҫланды.

✓Ошо көндәрҙә Башҡортостан Республикаһы менән РФ Һөтсөлөк милли союзы араһында үҙ-ара хеҙмәттәшлек тураһында ваҡыты сикләнмәгән килешеү төҙөлдө. Килешеү Башҡортостан етештереүселәре алдында ҙур мөмкинлектәр асмаҡсы. Яңы мөнәсәбәттәр һыйыр малын үстереүҙән башлап, унан алынған продукцияны һатыуға тиклемге сылбырҙы адреслыраҡ, маҡсатлыраҡ, һөҙөмтәлерәк итәсәк. Шул арҡала һөт етештереү артасаҡ, ә уның үҙкиммәте кәмейәсәк.

✓Өфөгә РФ Сит ил эштәре министрлығы ҡарамағындағы ЮНЕСКО эштәре буйынса РФ Комиссияһының яуаплы секретары Григорий Орджоникидзе етәкселегендәге делегация килде. Билдәле булыуынса, Башҡортостанда ЮНЕСКО-ның ассоциацияланған мәктәптәре, бер нисә уҡыу йортонда ЮНЕСКО кафедралары уңышлы эшләп килә. Эшлекле сәфәр сиктәрендә Башҡорт дәүләт университетында РФ ЮНЕСКО кафедраларының координация комитеты ултырышы үтте, ҡунаҡтар шулай уҡ БР Милли музейында, Археология һәм этнография музейында, Башҡортостан социаль технологиялар инситутында, Башҡорт дәүләт педагогия университетында булды.

✓Ҡырмыҫҡалы районы муниципаль район Советы ултырышында Ирек Сафин, үҙ теләге менән отставкаға китеү сәбәпле, хакимиәт башлығы вазифаһынан бушатылды. Совет депутаттары Ҡырмыҫҡалы районы муниципаль районы хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыуҙы Әмир Булатовҡа йөкмәтте.

✓Сибай ҡала округы Советы ултырышында Фәим Айҙарбәков, үҙ теләге менән отставкаға китеү сәбәпле, хакимиәт башлығы вазифаһынан бушатылды. Совет депутаттары Сибай ҡала округы хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыуҙы Хәлит Сөләймәновҡа йөкмәтте.

ГӘЗИТТӘН КҮСЕРЕП...

Литературная газета

### Был диалектика, ахмаҡ!

Лениндың СССР-ҙағы милли сәйәсәте халыҡтарҙың яңы тарихи йәмғиәте - "совет халҡы"ның триумфаль формалашыуы тураһында белдерҙе. Хатта 10-сы синыфта уҡығанда мин ошо темаға реферат яҙҙым һәм бер нәмәне аңлай алманым: **нисек итеп бер үк ваҡытта бер- береһенә ҡапма-ҡаршы ике йүнәлеш уңышлы тормошҡа ашырыла - милли мәҙәниәттәр сәскә ата һәм милләтара сиктәр юйыла. Юйылған ваҡытта ниндәй сәскә атыу булыуы мөмкин?** Үҙ уйҙарыма буталып, ярҙам һорап, уҡытыусыма мөрәжәғәт иттем. Ул минең яурынымдан һөйөп алды ла күңелле генә итеп: "Был диалектика, ахмаҡ!" - тине. Ә күҙҙәре шундай моңһоу ине...

Халыҡтарҙың һәм милләттәрҙең яңы тарихи йәмғиәткә әйләнгеһе килмәгәненә мин 1976 йылда әрме хеҙмәтендә инандым. Беҙҙә, 9-сы үҙйөрөшлө батареяла, 70 һалдатҡа 15 милләт тура килде. Күптәр, бигерәк тә Урта Азиянан, Көнбайыш Украинанан, Балтика буйы илдәренән килеүселәр, урыҫса саҡ-саҡ һөйләшеүселәр, офицерҙарҙың нимә теләгәнен аңламай, шул ваҡытта уҡ полкта үҙ "тейп"тарын ойошторған чечендар һәм ингуштар менән низағҡа инмәскә тырышалар ине. Шуны ла билдәләп үтмәй булмай: хеҙмәт аҙағында бөтөн һалдаттар ҙа "бөйөк һәм ҡеүәтле" телдә һөйләшә, казарманың ҙур калибрлы идиомаларына өҫтәнлек бирәләр ине. Минең "Бойороҡҡа тиклем 100 көн" тигән повесымда былар ентекле сағылыш тапты һәм цензураның ҡаты тәнҡитенә дусар булды. Хатта мөхәррир Андрей Дементьевтың тырышлығына ҡарамаҫтан, 1992 йылда "Юность" журналында баҫылманы.

Әҙәбиәткә аяҡ баҫҡас, мин унда Лениндың милли сәйәсәте тантана итеүен күрҙем. Йәш яҙыусыларҙың VII Бөтә Союз кәңәшмәһендә (1979 йыл) күҙгә шул ташланды: союздаш республикаларҙан (һирәк кенә -автономияларҙан) килгән йәш көстәр үҫмер саҡтарында уҡ туған телдәрендә китаптарын сығарған. Совет осороноң башлап яҙыусы әҙәбиәтселәре өсөн тәүге китап хәҙерге эшҡыуар өсөн беренсе миллион (әлбиттә, доллар) кеүек ине. Бик күп һәләтле урыҫ шағирҙары үҙҙәренең тәүге китабын - 30, ҡайһы берҙә 40 йәшкә тиклем көттө. Үҙәктең талабы шундай ине: тәү сиратта милли авторҙарҙы үткәрергә. Ә урыҫ әҙәбиәте былай ҙа бөйөк - көтөп торор! Үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, әүәләнгән милли талантҭар халыҡ фронттарының тәүге рәттәренә баҫты... Ҡайһы бер милли яҙыусылар (ҡағиҙә булараҡ, ҡатнаш ғаиләләрҙән) урыҫса ижад итә башланы, әммә һуңынан, бер аҙ этләнгәс, титуллы телдәренә күсеп, шунда уҡ китаптарын нәшер итте.

Совет тарихсылары батша осоронон төп енәйәттәрен һанағанда урыҫлаштырыу сәйәсәтен мотлаҡ иҫкә ала ине. Ә совет власы ваҡытында урыҫлаштырыу булғанмы? Әлбиттә, булған, сөнки революцияға тиклем үк дөйөм административ, мәғлүмәт, фән киңлеге нигеҙҙә урыҫ телендә булған - был йоғонтонан, бигерәк тә ҡалаларҙа, ҡасыу мөмкин түгел. Быға тыныс ҡына ҡарағандар тип әйтеп булмай. Һәр этнос, организм кеүек үк, һуңғы һулышына тиклем йәшәү өсөн көрәшә. 80-се йылдар һуңында мине, РСФСР Яҙыусылар берлеге идараһының йәш сәркәтибен, Йошкар-Олаға, мари яҙыусыларының съезына ебәрҙеләр. Беҙ урындағы яҙыусылар етәксеһе, бер үк ваҡытта мари АССР-ы Юғары Советы рәйесе Николай Федорович Рыбаков менән ныҡ ҡына төшөрөп алғас, ул асылып китеп, йөрәкһеп минә: "Юра, аңла, беҙ, мариҙар, былай ҙа телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе юғалтабыҙ. Ҡайғырмағыҙ, юғалтырбыҙ, барыһы ла шуға табан бара. Әммә беҙҙе ашыҡтырырға кәрәкмәй! Баҫым яһамағыҙ!" - тине. Бына шулай, бер яҡтан - сәскә ата, ә икенсе яҡтан... Диалектика, ахмаҡ!

Хатта күҙгә салынып бармаған ғына ҡатын-ҡыҙ ҙа бал батшабикәһе булырға теләгән кеүек, һәр халыҡ, хатта иң бәләкәйе лә, үҙенең суверенлы державаһы хаҡында хыяллана. Большевиктар ҙа "бүленеүгә еткәнсе үҙбилдәләнеш" вәғәҙә итеп, ошо хистә уйнаны. Әгәр халыҡ тарихында хатта уңышһыҙ дәүләтселек тәжрибәһе булһа ла, ул үҙенең геосәйәси төштәрендә үҙен "диңгеҙҙән диңгеҙгә тиклем" итеп күрә. Был нормаль күренеш һәм эротик фантазиялар кеүек үк, бик һирәк кенә осраҡта тормошҡа аша. Хәйер, төрлөсә булыуы мөмкин: Косовоны ғына алайыҡ! Әммә шуны аңларға кәрәк: этностар ни тиклем ҙурыраҡ һәм ҡеүәтлерәк, уларҙың империя ояһынан осоп сығыу мөмкинлеге шул тиклем ҙурыраҡ. Бигерәк тә йәйрсы Газмановҡа бик ҡәҙерле булған "үҙгәрештәрҙең саф еле" туҙҙырып һәм бөлгөнлөккә төшөрөп торһа. Совет ояһынан осоп сыҡҡан ҡошсоҡтарҙың таралыуын беҙ 1991 йыл аҙағында күҙәттек. Дөрөҫ, еңел ҡанатлы Балтика буйы алатубаларынан тыш башҡаларҙы көслә осороуҙары тураһында етерлек дәлилле версия бар. Әммә быны, әйҙә, тарихсылар тикшерһен.

Бында Сахаров хыялланған бәләкәй генә уңайлы бойондороҡһоҙ державаларҙа түгел, ә ҙур Рәсәй Федерацияһында йәшәгән өсөн тағы бер совет "гонаһ"ын иҫкә төшөрергә кәрәк. СССР-ҙа беренсе сортлылар - союздаш республикаларҙа йәшәүсе, икенсе сортлылар - автономияларҙа йәшәүсе милләттәр булды. Беренселәр "айырылып сығыу", икенселәр "айырылмау" мөмкинлегенә эйә ине. Шул һына ҡотҡарҙы. "Айырылмау"сылар Ельциндың саҡырыуына эйәреп, суверенитет йотҡанда, дәүләт яйлап ҡына геосәйәси аҡылһыҙлыҡтан арынды. Әлбиттә, совет осоронда берәү ҙә сорттар тураһында ҡысҡырып әйтмәне, әммә етәксе органдарға йәлеп ителеү, бюджеттан бүленгән өлөш, мәғлүмәт риторикаһында ҡатнашыу күрһәткесе буйынса былай ҙа яҡшы аңлашыла ине. Мин йәш татар йәки яҡут яҙыусыларының "утлы һыу" артында әйтеп ысҡындырған, беҙ молдавандарҙан күберәк, ә бына һеҙ... тиеүен яҡшы иҫләйем. Һәм был "автономиялы" үпкә онотолмаған, хатта артҡан да.

Нимә эшләргә һуң? Сығыу юлы бер генә: **беҙҙең дөйөм Рәсәй федератив ояһыҙ уңайлы, ышаныслы, бай булырға тейеш һәм берәүҙең дә унан икенсе этнофеодализмға йәки башҡа "емереклек"кә айырылып сыҡҡыһы килмәһен.** Шул да бик мөһим: ояла йәшәүсе һәр кем бында унан бер ҡасан да ата-олатайҙарының һайрауын онотоуҙы, "яуаплы фатир ҡуртымсыһы" кеүек һайрай башлауҙы талап итмәҫтәрен ныҡлы белергә, бер ваҡытта ла төрлө төҫлө йоморҡаларҙан бер төрлө ике башлы сәмреғош сығарыуҙы бойормаҫҡа тейеш. Был ындай коммуналь оя телә һә ниндәй тарих ғәрәсәттәренә лә бирешмәҫ.

### Сит эфир

**Һеҙ Рәсәй телевидениеһының үҙәк каналдарында Татарстан, Яҡутстан, Тыва, Дағстан, Адыгея, Коми, Осетия республикалары, Башҡортостан шағирҙарын, прозаиктарын, публицистарын күптән күрҙегеҙме?** Мин бөтөнләй күрмәнем. Ғәҙеллек өсөн әйтергә кәрәк, эфирҙа нормаль урыҫ яҙыусылары ла юҡ. "Канал йөҙҙәре"нең бер төрлөлөгө ҡайһы саҡта төпкөл ауылдағы сельпоның ярлы ассортиментын хәтерләтә.

Гипотетик Эрнстан һорағыҙ, ул: "Ниндәй яҙыусылар тағы? Улар кемгә кәрәк! Рейтинг мөмкинлек бирмәй. Ә рейтинг - ул аҡса!" - тип аңлатасаҡ. Бары тик белгестәр генә аңлаған банк баш ҡатырғыстарына комментарийҙар, котировкаларҙың ҡорошҡағына бер ваҡытта ла эфир йәлләмәйҙәр һәм рейтинг тураһында ла уйламайҙар. Әммә мәҙәниәт, шул иҫәптән милли мәҙәниәт менән ҡыҙыҡһыныусы телевизор ҡараусылар валюта һатыу мәғлүмәттәре менән шаңҡытылыусыларға ҡарағанда күберәк. Өҫтәүенә, был мәғлүмәттәр артынан күҙәттең ни ҙә, күҙәтмәнең ни, дефолт барыбер мәҙәниәтле баш ҡаланың таҙартылмаған ҡыйығынан аҫылынып торған ярты тонна боҙбармаҡ кеүек көтмәгәндә генә башыңа төшәсәк. Тураһын әйтәм: мин, граждан буларак, телевидениела эшләүселәрҙең рейтингына ла, эш хаҡына ла төкөрҙөм, минә ныҡлы күп милләтле дәүләт кәрәк.

1987 йылда мин тәүге тапҡыр АҠШ-ҡа, Чикагоға барҙым һәм беҙҙе шул саҡтағы "халыҡ дипломатияһы" сиктәрендә ғаиләләргә урынлаштырҙылар. Бер ваҡыт хужа телевизорҙа япон ҡиәфәтле дикторҙы күргәс, йәнләнеп китте һәм уларҙа шундай тәртип булыуын аңлата башланы: ниндәйҙер милләт вәкилдәренең һаны, мәҫәлән, 100 000 кешегә етә икән, дискриминация тойғоһо тыумаһын өсөн эфирҙа шунда уҡ уларҙың кәрәҙәше пәйҙә була. Был Америкала - эмигранттар илендә, негр-ҡолдарҙы иҫәпләмәгәндә, яҡшы тормош эҙләп тыуған илен аңлы рәүештә ташлап китеүселәр илендә шулай. Һәм уларҙың үҙлелеге тураһында шундай хәстәрлек! Әйткәндәй, АҠШ-та эмигрант массаһынан берҙәм америка халҡы булдырырға тейешле "тигл теорияһын"ан күптән баш тартып, уны һәр этнос үҙенсә, уның ҡарауы барыһы ла ҡатнаш, тигән "компот" концепцияһы менән алмаштырғандар. Бары тик океан арьяғындағыларға "компот"тарының әсеп китмәүен генә теләргә ҡала...

(Дауамы 15-се биттә).

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, байрам көндәре менән бәйле Башҡортостанда 30 апрель,1,2 һәм 7,8,9 май ял көндәре булып тора.

✔2010 йылдың 12 майында Анкарала ҡул ҡуйылған Рәсәй Хөкүмәте менән Төркиә Республикаһы Хөкүмәте араһындағы килешеүгә ярашлы, быйыл 16 апрелдән Рәсәй граждандары Төркиәгә визаһыҙ йөрөй башлаясаҡ. Йәгни 30 көнгә тиклемге ваҡытҡа граждандыҡ паспорттары хужалары Төркиәгә визаһыҙ бара ала. Шул уҡ мәлдә рәсәйҙәр өсөн дә, төрөктәр өсөн дә икенсе дәүләт территорияһында визаһыҙ йәшәү ваҡыты 180 көн эсендә 90 көндән ашмаҫҡа тейеш.

✔20 апрелдән Берҙәм дәүләт имтихандарын алдан тапшырыу этабы башлана. Республикала ундайҙар туғыҙ кеше: Бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара ярыштарҙа ҡатнашыусылар, һаулыҡ торошо буйынса алдан имтихан бирергә теләк белдереүселәр, шулай уҡ сит илгә даими йәшәү урынына күсеп китеүселәр. БР Мәғариф министрлығы мәғлүмәттәре буйынса быйыл Башҡортостанда 29 меңдән ашыу бала Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырасаҡ.

✔Баш ҡаланың Орджоникидзе районында Шәжәрә байрамдары инде алтынсы йыл рәттән үткәрелә. Йылдан йыл ҡатнашыусыларҙың әҙерлек кимәле лә үҫә бара. Байрамда Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтынан филология фәндәре докторы Миңлеғәли Нәҙерғолов, Башҡорт дәүләт университеты доценты Марат Зөлҡәрнәев, республиканың Үҙәк дәүләт тарихи архивының методик бүлек начальнигы Зөлифә Буранғолова, БР Мәғариф министрлығы вәкилдәре ҡатнашты һәм сығыш яһаны, һорауҙарға яуап бирҙе.

✔Автомобилдәрҙе теркәүгә ҡағылған яңылыҡ: 3 апрелдән автомобиль хужаһы бер төбәктән икенсеһенә күскән саҡта машинаһын иҫәптән төшөрөп тормайынса яңы урында теркәй ала, ә элеккеһенән ул автоматик рәүештә төшөрөлә. Тотонолған автомобиль һатып алғанда ла дәүләт номерын һаҡлап ҡалырға мөмкин. Һәм тағы. Хәҙер техник тикшереү үткәндә йәки иҫәпкә ҡуйғанда инспектор техпаспортта һәм моторҙа күрһәтелгән номерҙарҙың тап килеү-килмәүенә иғтибар итмәйәсәк. Быныан һандарҙың коррозияға бирешеүе арҡаһында юйылыуы мөмкин булғандан баш тартҡандар.

**✔ Башҡорт телендәге күп томлыҡ энциклопедия, 1812 йылғы Ватан һуғышының 200 йыллығына арналған "Военная история башкир", "Мустай Карим" энциклопедиялары буйынса эш алып барыла.**



"АЙЫҠ АУЫЛ" КОНКУРСЫ

# БАШЛАНДЫ!

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, "Айыҡ Башҡортостан" төбәк ижтимаҒи хәрәкәте инициативаһы менән башланған "Айыҡ ауыл" конкурсы ҡатнашыусыларҙан ғаризалар йыйыуҙы тамамланы. Алда - еңел булмаған көрәш, үҙ-үҙеңде, үҙ ғаиләңде, үҙ ауылыңды айыҡлыҡ менән һынау, тормошоҡа тамыр йәйергә өлгөргән яуызлыҡтан балаларыбыҙҙы, йәштәребеҙҙе һаҡлау саралары. Ул саралар нисегерәк ойошторолорға тейеш? Был шәмбелә Өфөлә Нефтселәр мәҙәниәт һарайында үтәсәк семинар-кәңәшмәлә ошо һорауға яуап эҙләнәсәк. Унда конкурста ҡатнашасаҡ райондарҙан һәм ауылдарҙан вәкилдәр саҡырылған. Башлана иртәнге 10.00 сәғәттә. Түбәндә конкурста ҡатнашыуға ғариза биргән ауылдарҙың исемлеге. Айыҡлыҡҡа юл башлаусыларға - афарин!**

1. Архангел районы Мулдаҡай, Уҡалар ауылдары
2. Асҡын районы Төлгөҙбаш, Йәнкисәк, Гөмбә, Үршәҙе, Башҡортостан ауылдары
3. Ауырғазы районы Мораҙым, Сулпан ауылдары
4. Баҡалы районы Таҡтағол ауылы
5. Баймаҡ районы Буранбай, Гәҙелбай, Йәрмөхәмәт, Темәс ауылдары
6. Балтас районы Асау ауылы
7. Белорет районы Мөхәмәт ауылы
8. Бишбүләк районы Ҡунаҡкол ауылы
9. Благовар районы Иҫке Усман ауылы
10. Благовещен районы Богородское ауылы
11. Бөрйән районы Әтек, Ҡолғона, Иҫке Монасип ауылдары
12. Бүздәк районы Ҡаңлы -Төркәй ауылы
13. Бәләбәй районы Пахарь ауылы
14. Ғафури районы Сәйетбаба ауылы
15. Дүртөйлә районы Иҫке Байыш, Тамаҡ ауылдары
16. Дәүләкән районы Яңы Аҡколай ауылы
17. Ейәнсура районы Сәғит ауылы
18. Илеш районы Ҡыҙыл Октябрь ауылы
19. Ишембай районы Аҙнай, Әткол, Яңы Һайет, Иҫке Һайет ауылдары
20. Йылайыр районы Ишбулды, Ҡаҙырша ауылдары
21. Йәрмәкәй районы Күпсәнәй, Ҡолбай, Рәтамаҡ, Спартак, Йәрмәкәй, Усман-Ташлы ауылдары
22. Краснокама районы Яңы Нуғай, Яңы Ҡайынлыҡ, Никольское ауылдары
23. Күгәрсен районы Түбәнге Һаҙ, Побоище, Тәүәкән ауылдары
24. Көйөргәҙе районы Яҡшембәт ауылы
25. Ҡалтасы районы Туҡран, Түбәнге Ҡасмаш, Козлояр, Ҙур Ҡасаҡ, Силәбей, Татар Бикшик, Бабай, Ваныш, Иҫке Өрйәбаш, Иҫке Йәш ауылдары
26. Ҡыйғы районы Сирбай, Ҡурғаш ауылдары
27. Ҡырмыҫҡалы районы Яңы Бишауыл ауылы
28. Мәләүез районы Арыҫлан, Әбет, Түбәнге таш, Мотай, Һыртлан ауылдары
29. Мәсетле районы Һәләймән, Аҙанғол, Түбәнге Баба ауылдары
30. Нуриман районы Ишморат ауылы
31. Саҡмағош районы Зимей ауылы
32. Салауат районы Сыбаркүл, Көсәпәй ауылдары
33. Сибай ҡала округы Төйәләҫ ауылы
34. Стәрлебаш районы Ҡабыҡҡыуыш, Аллағыуат, Ҡуғанакбаш ауылдары
35. Туймазы районы Кәкребаш, Айтамаҡ, Иҫке Туймазы, Тимер ауылдары
36. Учалы районы Һәләймән, Туңғатар ауылдары
37. Хәйбулла районы Йәнтеш ауылы
38. Шаран районы Дүртөйлә, Ерекле, Мичуринск ауылдары
39. Шишмә районы Йәрми ауылы
40. Әбйәлил районы Ҡырҙас, Әхмәт ауылдары
41. Әлшәй районы Сурай, Баязит, Никифар ауылдары
42. Яңауыл районы Яңы Уртауыл, Ямъяҙы, Асауҙыбаш ауылдары.

ТӨРЛӨҺӨНӨН

## ТАҒЫ БӘЙГЕ

**Өфөлә "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы - 2011" конкурсы башланды. Быйыл унда республиканың төрлө райондары һәм ҡалаларынан килгән иң һәләтле 60 уҡытыусы ҡатнаша.**

Конкурс ике турҙан тора. Тәүге турҙа уҡытыусылар педагогик проект яҡларға, таныш булмаған синыфта дәрес бирергә һәм уға анализ яһарға тейеш. Был һынауҙарҙы уңышлы үткән 15 конкурсант икенсе турға үтә. Гран-приҙан тыш, иң яҡшы рус теле һәм әҙәбиәте, татар теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары ла билдәләнәсәк. Тел уҡытыусыларының иң яҡшыһы Бөтөн Рәсәй конкурсында республика данын яҡлаясаҡ.

БР Мәғариф министры Әлфис Ғаязов билдәләүенсә, был конкурс педагогик оҫталыҡ күргәҙмәһе булып тора һәм ул уҡытыусыларға үҙҙәренең хеҙмәттәштәренең тәжрибәһе, идеяһы, уҡытыу методикаһы менән таныша алыу мөмкинлеге бирә. Еңеүселәр 12 апрелдә билдәле буласаҡ.

## "КИТАП" НӘШРИӘТЕ МӘСКӘҮҘӘ

**Зәйнәб Бииишева исемендәге "Китап" нәшриәте хеҙмәткәрҙәре өсөн үткән ай бик уңышлы булды: улар Мәскәүҙә уҙғарылған өс сарала ҡатнашты.**

XIV "Рәсәй китаптары" милли китап күргәҙмәйәрминкәһе илдең эшлекле һәм мәҙәни тормошонда иң эре сараларҙың береһе һанала. Тармаҡтың был һөнәри форумында китап индустрияһының иң алдынғы ҡарашлы белгестәре - нәшер итеүселәр, полиграфистар, яҙыусылар, китапханасылар ҡатнаша. Был форумда "Китап" нәшриәтенең тарихи, крайҙы өйрәнеү йүнәлешендәге китаптары, шул иҫәптән Руденконың "Башҡорттар", "Башҡорт кухняһы" фотоальбомы, балалар өсөн музыка буйынса пособие ҙур һорау менән файҙаланған. "Китап" нәшриәте Мәскәүҙә Башҡортостандың һәм Татарстандың халыҡ артисы Фәриҙә Ҡудашеваның хәтер кисәһен дә уҙғарған. Өсөнсө сарала ла - РФ Дәүләт Думаһында Башҡортостан көндәрендә лә нәшриәт уңышлы сығыш яһай. Рәсәй сәйәсмәндәре һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре, ҡайһы бер сит илдәрҙең илселектәре хеҙмәткәрҙәре башҡорт балы, милли аш-һыу, үҙенсәлекле трикотаж әйберҙәр менән бер рәттән, башҡорт китаптарын да ихлас ҡабул итә.

## "ШАЯН УЙЫН" САҠЫРА

**14 апрелдә 19 сәғәттә "Конгресс-холл" бинаһында "Шаян уйын - 2011" Республика юмор һәм көлкө фестиваленең Гала-концерты була. Унда республиканың башҡорт һәм татар КВН командалары ҡатнашасаҡ.**

Башҡортостан республикаһының йәштәр, студенттар КВН командалары араһында бәйләнеште нығытыу маҡсатында уҙғарылған был фестивалдең йәш ижади коллективтарҙы һәм айырым башҡарыусыларҙы үҫтереү, башҡорт һәм татар телдәрен популярлаштырыу йәһәтенән дә роле ҙур. Быйыл ул Башҡортостанда иғлан ителгән Милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылына арнала. Репертуарҙы ҡатнашыусылар үҙҙәре билдәләй. Жюри командаларҙы түбәндәге критерийҙар буйынса баһалаясаҡ: темаһы асыу, иң яҡшы текст, художестволы башҡарыу, юмор һәм сатираның сифаты.

## АЛТЫНСЫ ТОМЫ СЫҠТЫ

**2011 йылдың март аҙағында "Башҡорт энциклопедияһы" ғилми нәшриәтендә "Башкирская энциклопедия"ның 6-сы томы донъя күрҙе.**

6-сы томға (Советы народного хозяйства - У) 2400-ҙән ашыу мәҡәлә (шуларҙың 530-ы биографик) һәм яҡынса 640 иллюстрация ингән. Том мәҡәләләрен әҙерләүҙә яҡынса 700 автор - республиканың күренекле ғалимдары - ҡатнашҡан. Ә 2011 йылдың аҙағына нәшриәт "Башкирская энциклопедия"ның 7-се томын баҫмаға әҙерләүҙе тамамларға уйлай. Шул уҡ ваҡытта, башҡорт телендәге күп томлыҡ энциклопедия, 1812 йылғы Ватан һуғышының 200 йыллығына арналған "Военная история башкир", "Мустай Карим" энциклопедиялары буйынса эш алып барыла. Күп томлыҡ энциклопедия нигеҙендә "Краткая башкирская энциклопедия", "Народы Башкортостана" энциклопедияһы проекттары әҙерләнә.

## ЭШҠЫУАРҘАР КҮПМЕ ИКӘН?

**Әле Рәсәйҙә бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡтың, крәстиән (фермер) хужалыҡтарының һәм шәхси эшҡыуарҙарҙың иҡтисади иҫәбен алыу бара. Иҫәп алыу барышында һатыуҙан һәм хеҙмәтләндереүҙән алынған килем, эшҡыуарлыҡ тармағында эшләүселәр һаны, сәнәғәт һәм ауыл хужалығы продукцияһын етештереү кимәле, эшмәкәрлектәге айырым төр сығымдар һәм башҡа күрһәткестәр буйынса мәғлүмәт йыйыла.**

Алынған мәғлүмәт эшҡыуарлыҡ өлкәһендәге хәлде баһаларға мөмкинлек бирәсәк һәм эшҡыуарлыҡта әлегә файҙаланылмаған тармаҡтарҙы асыҡлау өсөн дә файҙалы буласаҡ. Эшҡыуарлыҡты комплекслы һәм ентекле өйрәнеү, баһалама һәм анализ биреү өсөн тупланған уникаль мәғлүмәти ресурс менән дәүләт органдары, фән һәм йәмәғәт ойошмалары ҡуллана аласаҡ. Республикала барлығы 140 меңдән ашыу эшҡыуарлыҡ субъекттары иҫәпләнә. 1 апрелгә иҫәп алыуҙың беренсе этабы тамамланды. Башҡортостан Республикаһы буйынса Дәүләт статистика хеҙмәте мәғлүмәте буйынса ауылдарҙа эшләүсе эшҡыуарҙар тулыһынса тиерлек отчет биреүҙе тамамланы. Айырыуса Тәтешле, Архангел, Бишбүләк, Саҡмағош, Баҡалы, Ҡалтасы һәм Шаран районы эшҡыуарҙары әүҙемлек күрһәтә. Шул уҡ ваҡытта ҡалаларҙа эшләүсе эшҡыуарҙар һәм бәләкәй ойошма етәкселәре әллә ни ҡабаланмай. Белгестәр белдереүенсә, иҫәптән аңлы рәүештә ҡасыусы эшҡыуарҙарға 3 меңдән алып 5 меңгәсә штраф янай, сөнки был өлкәләге иҫәп алыу Федераль законға ярашлы, халыҡ иҫәбен алыуҙан айырмалы рәүештә, мәжбүри булып тора. Иҫәп алыу буйынса барлыҡ мәғлүмәтте Өфөлә (347) 273-26-63 телефоны буйынса һәм Росстат сайтында (www.bashstat.ru) алып була.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔8-13 апрелдә Өфө трикотаж фабрикаһы үҙенең яңы яҙғы-көҙгө кейем коллекцияларын күрһәтә. Һатып алыусыларға барлығы 100-гә яҡын яңы модель тәҡдим ителәсәк. Сарала Башҡортостандың "Ағиҙел" предприятиеһы ла ҡатнаша. Предприятие мосолман кейеменең эксклюзив коллекцияһын да күрһәтмәксе.

✔Өфө ҡала округы хакимиәтенең "Кайнар пейджеры"на мартта 170 кеше мөрәжәғәт иткән. Иң күп мөрәжәғәттәр Октябрь районынан. Мөрәжәғәттәрҙең төп темаһы, элеккесә, торлаҡ йортта- рҙы ремонтлау, ҡайнар һәм һалҡын һыу менән тәьмин итеүҙәге өҙөклөктәр, йорттарҙы йылытыу, ихаталарҙы төҙөкләндереү һәм транспорт хеҙмәте мәсьәләләре.

✔Башҡортостан Республикаһы Президенты ҡушыуы буйынса республика мәктәптәре уҡытыусылары өйҙә интернет ресурстарын льготалы шартарҙа файҙаланыу мөмкинлеген аласаҡ. Был механизм эшләнгән һәм интернет-провайдерҙар менән яраштырылған. "Башинформсвязь" асыҡ акционерҙар йәмғиәте уҡытыусылар өсөн тарифтарҙы айына 450 һумдан 300 һумға тиклем, "Уфанет" асыҡ акционерҙар йәмғиәте 305 һумдан 145 һумға тиклем түбәнәйтте.

✔Башҡортостандан 135 студент һәм уҡыусы "Байконур" космодромына экскурсияға барып ҡайтты. Сәфәр ваҡытында йәштәр космонавтика музейында булған, һәләк булған ракетчиктар мемориалдарына, Королев һәм Гагарин һәйкәлдәренә сәскәләр һалған, легендар "Буран"ды күргән.

✔15 апрелдә 19 сәғәттә Нефтселәр мәҙәниәт һарайында режиссер Айгиз Ғабдуллиндың "Алмабикә" тигән нәфис фильмы күрһәтелә. Ул былтыр Әбйәлил районында Радик Өмөткужин сценарийы буйынса төшөрөлгән.

✔М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында Рәсәйҙең иң көслө кешеһе, пауэрлифтинг һәм армрестлинг буйынса спорт мастеры, Гиннес рекордын ҡуйыусы Эльбрус Ниғмәтуллин менән осрашыу булды.

✔13-14 апрелдә "Евро-Өфө-Азия" мода форумы башлана. Гала-шоу Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле бинаһында үтәсәк.

*РУХИӘТЕБЕҘ*

# УҠЫТЫУСЫЛАРҘЫҢ ИҢ-ИҢДӘРЕ...

## ошо бәйгелә лә асыла

(Башы 1-се биттә).

### Мәктәп директорынан ундым

Башҡорт дәүләт педагогия институтының филология факультетын тамамлаған йәйҙә Өфө ҡала мәктәптәре буйлап эш эҙләйем. Иғлан буйынса 35-се мәктәпкә килдем. Бер аҙ һөйләшеп ултырғандан һуң директор Г. Розенблюм "Һеҙҙе эшкә алабыҙ",- тип ҡыуандырҙы. Шәп коллективҡа эләгеүемде уҡыта башлауымдың тәүге көндәрендә үк аңланым. 47 йыл мәктәптә эшләгән директор эште бик яҡшы ойошторған. Башҡорт теленә ыңғай ҡарашта булыуы, рус мәктәбендә башҡорт кластары булдырыуы, ниндәй генә мәсьәлә килеп тыуһа ла ярҙам итергә әҙер тороуы был кешегә тәрән ихтирам тойғоһо уятты. Белоруссияла йәшәп, ул телде "һыу һымаҡ эскән" тарих уҡытыусыһының белорус телендә шиғырҙар һөйләп ишеттереп, коллективҡа: "Мин әллә күпме тел беләм, бынан мин кәмемәгәнмен, ә үҫкәнмен генә. Башҡорт телен дә беҙҙең мәктәптә уҡыясаҡтар, өйрәнәсәктәр", - тип әйтеүе оло егетлек ул.

Бер хәл хәтерҙә айырыуса ныҡ уйылып ҡалған: башҡорт теле буйынса бер дәреслек һатып алырға кәрәк ине. Ул ваҡытта халыҡтың аҡсаһы юҡ - балаларҙан китап алдырыу түгел, ғөмүмән, ата-әсәләрҙән аҙ ғына аҡса йыйып алыу ҙа ҡыйынға тура килгән, уҡытыусыларға ла, башҡа хеҙмәткәрҙәргә лә эш хаҡы түләнмәгән ауыр заман. Директорға инеп, хәлде аңлатып, матди ярҙам булмаҫмы, тип мөрәжәғәт иткәс, ул иртәгәһе көндә үк балалар менән макулатура йыйыу акцияһы ойоштороп, йыйылғандарын ҡайҙалыр һатып, унан килгән аҡсаға миңә кәрәк булған 60 китапты алдырҙы. Минең өсөн тик ыңғай шарттар тыуҙырып торған коллектив йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәҫ өсөн, артабан да тырышып эшләйәсәкмен тигән маҡсат ҡуйҙым үҙемә.

### Башҡорт теле ниңә кәрәкме?

"Башҡорт теле ни өсөн кәрәк?" тигән һорауҙы биргән ҡайһы бер уҡыусыларымдың йөҙөндә башҡорт телен генә өйрәнергә теләмәү түгел, ғөмүмән, бер предметты ла яҡшылап уҡырға теләмәү ярылып ята. Ҡыҙғаныска ҡаршы, мәктәп ундай балаларҙан бер ваҡытта ла азат булманы. Уҡырға теләгән бала программа ҡушҡанды ғына түгел, ә үҙаллы ла уҡый, ә теләмәгәне - программа буйынса бирелгән ғилемгә лә шик, дәғүә белдерә, башҡаларҙы ла шикләндерә. Әлбиттә, ниндәй генә һорау булмаһын, уның барлыҡҡа килеүендә объектив йә субъектив сәбәптәр ҙә була. Был сәбәптәр - уҡытыусы өсөн йүнәлеш бирер маяҡ ролен үтәй. "Башҡорт теле ни өсөн кәрәк?" Был һорауға яуап биргәндә, миҫал итеп тормошта үҙебеҙ күҙәткән хәл-ваҡиғаларҙы һөйләп бирҙем: барыһына ла таныш бер актерҙың бала сағында туған телен яҡшылап өйрәнмәүе, һуңынан, мәктәпте тамамлап, эшләй башлағандан һуң башҡорт телен махсус курстарға йөрөп өйрәнеүен һөйләп киттем. Хәҙер барыһы ла Төркиәгә ял итергә йөрөй, ә төрөк теле башҡорт теленә ҡәрҙәш тел һәм башҡорттар улар менән еңел аңлаша. Ғөмүмән, башҡорт телен белгән кеше 40-тан ашыу төрки телле халыҡтар менән аралашыу мөмкинлегенә эйә була ала. "Һеҙ бит үҙегеҙҙең ҡайһы ҡалаға уҡырға барасағығыҙҙы әлегә белмәйһегеҙ. Әгәр Ҡаҙан йә Астана, йә Ташкент ҡалаларына, йә ғәрәп илдәренә уҡырға китһәгеҙ, башҡорт телен белеү һеҙгә ярҙам ғына итәсәк. Унан һуң, инглиз телендә акцентһыҙ дөрөҫ һөйләшеүгә лә ярҙам итә бит башҡорт теле өндәре",- тип аңлаттым. Шулай итеп, минең уҡыусыларым был һорауға яуап тапты. Шунан һуң инде үҙемә шундай маҡсат ҡуйҙым: бынан һуң дәресемдә бер генә баланың башына ла "Башҡорт телен белеү ниңә кәрәк?" тигән икеле уй инеп сыҡмаҫлыҡ итеп ойоштораcаҡмын!

### Шынаны шына менән һуғып сығаралар

Академик, яҙыусы, тарихсы Ғайса Хөсәйенов үҙенең "Фәһемле фекерҙәр"ендә аҡыллы итеп былай тип яҙған: "Шынаны шына менән һуғып сығаралар, тип әйтәләр. Был улай түгел - иҫке шынаға яңыһын ҡуйып ҡаҡһаң, шул ваҡытта иҫкеһе лә ҡала, яңыһы ла кереп ултыра". Бер дәрес ваҡытында диктант яҙырға кәрәк. 11-се синыфтан бер егет дәғүәһен белдерә: "Һеҙ миңә башҡорт теленән инша яҙҙырмаҡсы итәһегеҙме? Мин башҡорт теленән түгел, рус теленән яҙмайым әле, рус теленән БДИ бирергә кәрәк буласағын белһәм дә..." - ти эре генә. Шул ваҡыт күҙ алдына "шына" идеяһы килеп баҫты: балаларҙы үҙ яғыма ауҙарыр өсөн эште компьютер технологияларын ҡулланыуҙан башланым.

Балаларға: "Бөгөндән башлап иншаларығыҙҙы, яҙыусыларҙың биографияларын һәм бөтә эштәрҙе лә компьютерҙа ғына башҡарабыҙ", - тинем. Был идея барыһына ла оҡшаны һәм беҙҙең араларҙы яҡынайтты.

Ҡайһылыр класта өйҙә компьютер ҡулланып, ниндәй ҙә булһа бер шиғырҙың тексын күсереп яҙып, ундағы ҡайһы бер һүҙҙәрҙе һүрәттәр менән алмаштырыу эше ҡушылһа, уҡыусылар быны бик теләп башҡара. Һәр уҡыусы берәр текст әҙерләп килтереп, ҡалғандарға күрһәтә. Өй эшен тикшереү балаларҙың үҙҙәре өсөн үҙенсәлекле бер йомаҡ сисеүгә әйләнә. Бер класс уҡыусыһы башҡарған уңышлы эште икенсе параллель синыф уҡыусыларына ла күрһәтәм. Әгәр ҡайһы бер һүҙҙәрҙе сисә алмаһалар, уларға: "Тимәк, күрше класс уҡыусылары башҡортса һеҙгә ҡарағанда яҡшыраҡ һөйләшә, күберәк һүҙҙәр белә", - тим. Бер синыфҡа "Катюша" йырының башҡортса вариантын өйрәткәйнем. Тәнәфестә йырлап йөрөйҙәр икән тегеләр. Быны күреп сәмләнгән күршеләре йырҙың һүҙҙәрен уларға ла өйрәтеүҙе һораны. Балаларҙы сәмләндерһәң, улар үҙҙәре үк белемгә ынтылып тора ул.

Балаларың сәмле булһын өсөн иң тәүҙә үҙең энтузиаст уҡытыусы булырға тейешһең. Ҡайһы бер уҡытыусыларҙан: "Шул дәреслек бигерәк күңелһеҙ төҙөлгән",- тигән һүҙҙәр ишетергә тура килгеләй. Минеңсә, дәреслектәр күңелһеҙ булмай, дәресен етерлек кимәлдә ҡыҙыҡлы итә алмаған уҡытыусылар ғына була.



### Башҡорт теле уҡытыусыһы - милләт йөҙө

Башҡорт балаларының менталитеты икенсе төрлөрәк: улар күтәрелеп һөйләргә лә тартынырға мөмкин. Ә башҡалар уҡытыусыһын үҙҙәре менән типәтиң күрә. Шуға күрә бындай уҡыусыларҙың ихтирамын яулау бик еңел эш түгел. Башҡорт теле уҡытыусыһына толерант та, шул уҡ ваҡытта кәрәк һүҙҙе әйтә алырлыҡ үткер ҙә булыу талап ителә. Быныӊ өсөн күп уҡырға, үҙең өҫтөндә күп эшләргә, педагогик һәләтеңде генә түгел, интеллектуаль кимәленде лә бер туҡтауһыҙ үҫтерергә кәрәк.

Ҡайһы бер коллегаларым араһында ла башҡорттар тураһында төрлө хата ҡараш йәшәгән булған икән. Быны улар минең менән яҡындан аралашып, һөйләшкән саҡта әйтте. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен балаларҙың көтөп алыуы, тәнәфес буйына янымдан китмәүҙәрен күргән башҡа педагогтар заманға күрә алдынғы технологияларҙы әүҙем ҡулланыуымды, педагогик алымдарымды күреп, тотош халҡыбыҙ тураһында фекерҙәре үҙгәреүе тураһында әйттеләр.

Төрлө милләттәр гөлләмәһенән йыйылған уҡыусылар ҙа халҡыбыҙ тураһында бик аҙ белә. Уларға Рәсәй эстрада йондоҙҙарының үҙ концерттарында ҡурайсы Роберт Юлдашевты саҡырып тороуын һөйләүем генә лә ҡыҙыҡ. Бөгөнгө балалар яңылыҡтар менән танышып барыуҙы кәрәк тип һанамаһа ла, үҙҙәрен генә ҡыҙыҡһындырған йүнәлешкә бик тиҙ йөҙ бора. Уҡытыусы был йүнәлештәрҙе лә белергә, тойоп алырға һәм педагогик процеста ҡуллана белергә тейеш. Уҡыусыларымды ҡыҙыҡһындырған яңылыҡтар менән хәбәрҙар булыуым, улар тыңлаған музыкаға ҡолаҡ һалыуым, улар башланғыcын хуплауым эшемдә ярҙам итә.

Күп мәктәптәрҙә, гимназияларҙа булырға, асыҡ дәрестәр ҡарарға, үҙемә лә уларҙы күп күрһәтергә тура килде. Ниндәй генә мәктәптә булһам да, ҡайһы ғына синыфҡа инһәм дә, ҡояштай балҡып торған аҡыллы, матур, грамоталы балаларҙы осратам. Шундай балалар хаҡына мәктәптә кемдең генә тырышып эшләгеһе килмәһен...

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



### Һалҡын тейеп ауырығанда тирләп китер өсөн

Быныӊ өсөн берәр стакан йүкә сәскәһе менән ҡурай еләген алып болғатырға, йә 2 өлөш мәтрүшкә, 4 өлөш ҡурай еләге емешен, 2 өлөш үгәй инә үләне япрағын алып болғатып, 2 ҡалаҡ ҡатнашмаға 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 5-10 минут төнәтергә. Хәл яҡшырғансы эҫерәк көйө ярты стаканлап көнөнә 3-4 тапҡыр эсергә. Дауаланыуҙы 4-5 көн дауам итергә.

### Туҡ эсәк, нәҙек эсәктәр ялҡынһынғанда, хроник эс ҡатыу булғанда

Был осраҡта ике төрлө ҡатнашма эшләргә була: 3 өлөш эт муйылы ҡайырыһы, 1 өлөш кесерткән япрағы, 1 өлөш меңьяпраҡ үләне алып йәки 5 өлөш эт муйылы ҡайырыһы, 6 өлөш сенна япрағы, 5 өлөш жостер емеше, 2 өлөш әнис емеше, 2 өлөш татлы (ҡурйын) тамыры алып ҡатнаштырырға. 1 ҡалаҡ ҡатнашмаға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп төнәткәс, һөҙөргә һәм төнгөлөккә 1/4, 1/2 өлөш эсеп ятырға. Хәл яҡшырғансы дауам итергә. Кәрәк булһа, йылына бер нисә тапҡыр ике аҙналап дауаланыу курсы үтеп алырға.

### Эске һәм тышҡы геморрой булғанда

Меңьяпраҡ үләнен, кориандр емешен, сенна япрағын, эт муйылы ҡайырыһын, татлы (ҡурйын) үләнен 20-шәр грамм алып болғатырға, 1 ҡалаҡ ҡатнашманы 1 стакан һыу менән бешекләргә, төнәтергә. Һөҙөп, төнгөлөккә ярты йә бер стаканлап эсергә. Был эс ҡатыуға ла ҡаршы тора, эсәктәрҙең эшен яйлай. Хәлгә ҡарап, курсты дауам итергә. Ике аҙна ҡулланғас, ике аҙна ял итергә. Ауырыу көслө булһа, курсты 1 ай дауам итергә мөмкин.

### Һейҙек юлдары ялҡынһынып торғанда

2 өлөш эт еләге япрағы, 2 өлөш артыш емеше, 1 өлөш татлы тамыр (ҡурйын үләне) алып, ҡатнашма яһарға. Ошо 1 ҡалаҡ ҡатнашманы 1 стакан һыуға һалып төнәтергә. 5-7 көн дауамында көнөнә 3-4 тапҡыр эсергә. Был шулай уҡ һейҙек ҡыуҙырыу өсөн дә яҡшы.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

БӘХӘС ҠОРО

# ТУЙЫНДЫРЫУСЫ ЛА - ЕР,

## һыйындырыусы ла - ер...

**Үткән аҙнала Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Иҡтисад, эшҡыуарлыҡ һәм ер сәйәсәте буйынса комиссияһының киңәйтелгән ултырышында ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәрҙе бәрәкәтле файҙаланыу тураһында һөйләшеү булып үтте. Ултырышта Башҡортостан Республикаһының Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры урынбаҫары Илдар Әминев, Башҡортостандың Агросәнәғәтселәр союзы рәйесе Зифҡәт Сәйетгәлиев, Башҡортостан Президенты ҡарамағындағы Дәүләт хеҙмәте һәм идараһы академияһы профессоры Рәдил Мөхәмәтдинов, Башҡорт дәүләт аграр университеты профессоры Ҡадир Мәғәфүров, билдәле журналист Марсель Ҡотлоғәлләмов, Башҡарма комитет ағзаһы Сәғит Исмәғилев, Мәләүез, Көйөргәҙе, Стәрлебаш райондары эшҡыуарҙары һәм фермерҙары ҡатнашты һәм сығыш яһаны. Ултырышты Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Иҡтисад, эшҡыуарлыҡ һәм ер сәйәсәте буйынса комиссия рәйесе Иршат Аҫылғужин алып барҙы.**
**Һеҙҙең иғтибарға - киңәйтелгән ултырышта ҡатнашыусыларҙың ҡайһы берҙәренең сығыштарынан өҙөктәр тәҡдим итәбеҙ.**

**Иршат АҪЫЛҒУЖИН:** Кешелек йәмғиәтен ер мәсьәләһе элек-электән борсоп килгән. Ырыуҙар ғына түгел, хатта ҙур ҡәүемдәр ҙә ер тип үҙ-ара ыҙғышҡан. Ҡеүәтле илдәр ваҡ, көсһеҙ илдәрҙең ерҙәрен артыҡ көс ҡулланмайынса баҫып алған. Рәсәй ҙә ҡул ҡаушырып ултырмаған: үҙе лә яңы биләмәләр яулау сәйәсәтен алып барған, уның ерҙәренә лә яҫҡыныусылар етерлек булған.

Тарихҡа әйләнеп ҡарауҙың ғилләһе шунда: бөгөн дә донъяла шундай уҡ сәйәсәт алып барыла түгелме? Ә үҙ илебеҙҙә, Ер кодексына ярашлы, ергә шәхси милек индерелеүе күптәрҙе хафаға һалды. Республикабыҙҙың уңдырышлы ерҙәре, ер аҫты байлыҡтары, ғөмүмән, матур тәбиғәтебеҙ Мәскәү байҙарын күптән ымһындыра. Мәҫәлән, ҡалын кеҫәле Магнитогорск "ағайҙары" Әбйәлил районының Яҡтыгүл буйындағы ерҙәрендә зиннәтле һарайҙар һалып та ҡуйҙы. Ағиҙел йылғаһы башында, Бөрйән урмандарының бер аҡланында, сит-ят кешеләрҙең коттеджлар төҙөп ҡуйыуы ла беҙҙе борсоуға һала.

Бөгөнгө көндә беҙҙең халыҡҡа икенсе хәүеф янай. Ғүмер буйы колхозда тир түккән кешеләргә, федераль ҡануниәткә ярашлы, ер пайы бирелергә тейеш. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, урындағы власть органдарының әкрен ҡуҙғалыуы арҡаһында күп райондарҙа ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәр һаман хосусилаштырылмаған. Бөгөн иң мөһиме - ерҙәрҙе хосусилаштырыуҙың икенсе этабын атҡарыу, йәғни пай ерҙәрен ыҙанлап сығыу һәм артабан уларҙы файҙаланыу юлдарын билдәләү. Тик халыҡтың үҙ хоҡуҡтарын белеп еткермәүе был эште атҡарып сығыуҙа ҡатмарлылыҡтар тыуҙырырға мөмкин. Ситтән инвесторҙар килеп, нимәләрҙер вәғәҙә итеп, ер хужаларын төп башына ултыртып ҡуйыуы ла ихтимал. Заманында бит ата-бабаларыбыҙ, бер әсмүхә сәйгә алданып, күпме ерҙәрҙән ҡолаҡ ҡаҡҡан. Был тәңгәлдә беҙгә һис тә һиҙгерлекте юғалтырға ярамай. Халҡыбыҙ бөгөн шуны аңларға тейеш: колхоз системаһы дәүеренән айырмалы рәүештә, ер хәҙер дөйөм милектеке түгел, ә үҙенеке! Шуның өсөн һәр ғаилә, үҙенә эләккән ер пайына, ғәзиз ерем, тип ҡарап, уны күҙ ҡараһылай һаҡларға һәм үҙенең ер биләмәһен бәрәкәтле файҙаланыу юлын билдәләргә тейеш.

Был тәңгәлдә ер хужаларының төп таянысы -Рәсәйҙең Ер тураһындағы ҡануниәте. Шуны аңларға кәрәк: Закон халыҡты яҡлай. Бары тик ҡануниәттең талаптарын урындағы власть һәм район, ҡала гәзиттәре халыҡҡа төплө итеп аңлатһын ине. Айырыуса 2010 йылдың 29 декабрендә ғәмәлгә ингән "Ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәрҙең әйләнешен камиллаштырыуға ҡағылышлы Рәсәй Федерацияһының айырым ҡануниәт акттарына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы федераль законды яҡшы өйрәнергә кәрәк. Асылда ул халыҡтың мәнфәғәтен күҙәтә. Әйтәйек, ошо Законға ярашлы, ерҙе хосусилаштырыу, ыҙанлау һәм уны артабан файҙаланыу мәсьәләләрен дөйөм йыйылыш хәл итә ала. Шул уҡ ваҡытта кеше үҙенә тейешле ер өлөшөнән баш тартһа, дәүләт теркәүендә ергә хоҡуҡты туҡтатыу тураһында ҡарар ҡабул ителгәс, ер биләмәһе урындағы үҙидара органы ҡарамағына күсә. Шуның өсөн һәр кем тиҙ арала үҙ ерен "ҡағыҙҙа" түгел, ә натуралата алып, ер биләмәһенең ҡайһы баҫыуҙа йәки яланда икәнлеген асыҡларға тейеш. Закондың тағы бер талабы шунан ғибәрәт: әгәр ер майҙаны өс йылдан ашыу эшкәртелмәйенсә ята икән, ул хужаһынан суд аша мәжбүри тартып алынырға мөмкин. Хәйер, ер майҙандарын ыҙанлау, уларҙы ҡуртымға биреү тәртибе лә халыҡҡа бик аңлашылып етмәй.

Баймаҡ, Ғафури, Мәсетле райондарында, Күмертау ҡалаһында уҙғарылған Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының Иҡтисад, эшҡыуарлыҡ һәм ер сәйәсәте буйынса комиссияһы ултырыштарында ер мәсьәләһен күтәреүселәр күп булды. Халыҡ, ысынлап та, ер тураһындағы ҡануниәттең талаптарын, үҙ хоҡуҡтарын белмәй. Иң аяныслыһы - күптәр үҙҙәрен юл сатындағы кеүек хис итә: үҙ ерен ни эшләтергә икән тип баш вата. Беҙҙең бурыс - ошо хәл иткес ваҡытта халҡыбыҙға ярҙам ҡулы һуҙыу, дөрөҫ йүнәлеш биреү. Бына ни өсөн беҙ бөгөн Комиссиябыҙҙың киңәйтелгән ултырышында ошо ҡырҡыу мәсьәлә тураһында кәңәшләшеп алырға булдыҡ. Халҡыбыҙ үҙ еренән ҡолаҡ ҡаҡмаһын өсөн ниндәй саралар күрергә? Ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәрҙе нисек итеп халҡыбыҙ мәнфәғәтендә бәрәкәтле итеп файҙаланырға? Әйҙәгеҙ, ошо хаҡта асыҡтан-асыҡ һөйләшәйек!



**Зифҡәт СӘЙЕТҒӘЛИЕВ:** Ер мәсьәләһен иҡтисадтан айырып ҡарарға ярамай. Ни өсөн тигәндә, киләсәктә республикабыҙ һәм башҡорт милләте йәшәһен тиһәк, иҡтисадтың нигеҙе булған ерҙе һаҡлап ҡалыу фарыз. Беҙ барыһын да күреп-ишетеп торабыҙ, байлыҡтарыбыҙ яйлап-яйлап ҡулдан ысҡына бара. Милләт үҫеше өсөн шарт булырға тейешле 5 ҡиммәт хаҡында ла әйткем килә.

Беренсеһе - нефть, әммә беҙ уның килограмына ла хужа түгелбеҙ. Нефть торбалар буйлап бер йүнәлештә генә хәрәкәт итә. Икенсеһе - файҙалы ҡаҙылмалар. Яңыраҡ Сибайҙа һәм Хәйбулла районында булдым. Унда файҙалы ҡаҙылмалар табыла, әммә ситтә эшкәртелә: беҙгә өңөрәйгән соҡорҙар, бысраҡ һыу һәм радиациялы һауа ғына ҡала. Өсөнсө байлығыбыҙ - урман. Урман совет осоронда ла дәүләттеке булды, хәҙер уны башҡорттар киҫмәй. Дүртенсеһе - һыу, йылғалар, күлдәр. Баҡтиһәң, беҙ уларға ла хужа түгелбеҙ икән. Әбйәлил районын ғына алайыҡ, ундағы күлдәргә ситтәр хужа. Бына был байлыҡтарыбыҙ беҙҙеке түгел хәҙер, законлы рәүештә халыҡтан тартып алынды. Күҙ терәп ҡалған һуңғы бишенсе байлығыбыҙ булып еребеҙ ҡалды. Әгәр ҙә еребеҙҙән дә яҙһаҡ, милләтебеҙ һауала аҫылынып тороп ҡалыуы бар. Әгәр ҙә бөгөн ололар үҙҙәренең пай ерен алыуҙы кәрәкле тип тапмай икән, улар үҙҙәренең балаларын, ейән-ейәнсәрҙәрен өлөшһөҙ һәм киләсәкһеҙ ҡалдыра. Пай ерҙәрен халыҡҡа бүлеп биреү башланғас, беҙгә урындағы хужалыҡ етәкселәре, хакимиәт башлыҡтары ҡаршылыҡ күрһәтә башланы.

Үткән йылдың 21 декабрендә Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәр тураһындағы Федераль закондың айырым акттарына үҙгәрештәр индерҙе. Дөйөм алғанда, был үҙгәрештәр, асылда, ер һатып алырға теләүсе байҙарҙың ғына мәнфәғәтен яҡлауға ҡоролған һымаҡ. Хәҙерге ваҡытта ҡайһы бер район етәкселәре ауылдарға килеп, дөйөм йыйылыш үткәргәндә, сығыштарын "Нимәгә ул һеҙгә ер? Уны нимә менән эшкәртергә уйлайһығыҙ?" тигәнерәк һүҙҙәр менән башлап ебәрә. Ундай етәкселәр халыҡ тураһында ҡайғыртмай, киреһенсә, төрлө юлдар табып, нисек булһа ла халыҡты ерһеҙ ҡалдырырға тырыша. Йыйылыштарҙың протоколдары был осраҡта тегелмәй, биттәренә номерҙар ҡуйылмай. Әйтәйек, 120 кеше үҙенең ниндәйҙер мөнәсәбәтен белдереп, бер ҡағыҙға ҡул ҡуйһа, хәҙерге "шыма ҡуллы" юристар ул документты ҡул ҡуйыусыларға ҡаршы файҙаланырға ла мөмкин. Етәкселәр йыйылыштарға, ауыл сходтарына кешенең мөмкин тиклем аҙыраҡ килеүен теләй. Күп осраҡта бындай йыйылыштарға бер нисә пайсы ерҙәрен берләштереп, бер кешене йөрөтә. Әйтәйек, 30 пайсының яҙмышын бер кеше хәл итә был осраҡта. Шулай итеп, ошондай мөһим сарала халыҡтың тауышы ишетелмәй ҙә ҡала. Етәкселәр йә арендаторҙар пайсыларҙы күп осраҡта үҙҙәре ҡуйған шарттар менән ерҙәрен арендаға бирергә өгөтләй. Күп осраҡта улар үҙ маҡсатына ирешә лә. Һөҙөмтәлә күпселек халыҡ үҙенең табаны аҫтынан ере ысҡынғанын белмәй ҙә ҡала.

Тағы ла ерҙәрҙе арендаға биреү, алыу сроктары тураһында. Минеңсә, ерҙәрҙе 7-15-49 йылға арендалау практикаһын бөтөнләй юҡҡа сығарырға кәрәк. Әгәр ҙә ерҙе арендаға алыусы үҙенең йөкләмәһен үтәмәй, ер хужаһына түләмәй йә насар түләй икән, килешеүҙе бер йылдан һуң да өҙөргә була бит.

Законға тәүге тапҡыр быға тиклем булмаған үҙгәрештәр индерелгән. Әйтәйек, ер маҡсатҡа ярашлы файҙаланылмағанда йә бөтөнләй файҙаланылмағанда, уны хужаһынан тартып алыу бик еңелләштерелә. Ерҙе тартып алыу был осраҡта суд аша башҡарыла. Миңә был яңылыҡ бик аңлашылып бөтмәй. Ни өсөн тигәндә ерҙең маҡсатҡа ярашлы йә ярашһыҙ файҙаланылыуын иҫбат итеү өсөн суд эштәре оҙайлы йылдарға һуҙыласаҡ. Законға индерелгән был үҙгәрештәр ҙә нисек булһа ла халыҡты ерҙән баш сөйҙөрөү өсөн индерелгән һымаҡ. Ни өсөн тигәндә, беҙҙең халыҡ судтарға йөрөп өйрәнмәгән һәм бөгөнгө судтарҙа кемдәрҙең еңеп сығыры ла билдәле. Ауылдарҙа йәшәүселәрҙең бындай мөмкинлеге юҡ. Ошондай шарттарҙа беҙҙең төп бурысыбыҙ: халыҡты ерҙән файҙа алып булырына ышандырыу. Әгәр ҙә халыҡ ерҙән файҙа алып булырына, ысынлап та, ышанһа, ул үҙ еренә хужа булырға ынтыласаҡ, уны һаҡлау сараһын күрәсәк. Ергә хужа булыу тойғоһон башҡаса уятып булмайҙыр.

Һуңғы йөҙ йылға ғына күҙ һалайыҡ. Ошо ваҡыт эсендә башҡорт бер ваҡытта ла ерһеҙ булмаған. Кантон системаһы булһынмы, колхоз-совхоз системаһы булһынмы, уның йәшәрлек, мал көтөрлөк, иген үҫтерерлек ере барыбер булған. Әле килеп,

***✓ Барлыҡ сығыштарҙың да уртаҡ бер яғы - еребеҙ яҙмышы, уның киләсәге өсөн борсолоу. Зифҡәт Ислам улы дөрөҫ әйтә, ауылдарҙа ер эштәрен ойоштороусылар, юлбашсылар милли рухлы кешеләр булырға тейеш.***

мең йыл дәүерендә тәүге тапҡыр башҡорт бөтөнләй ерһеҙ, саңдауҙа тороп ҡалыу ҡурҡынысы алдына килеп баҫты. Әлеге законда ҡаралғанса, ер менән һатыу итеү был территорияла бөтөнләй булғаны юҡ ине. Хәҙерге заманда ерҙең ҡәҙерен белмәһәк тә, киләсәгебеҙ өсөн уны һаҡлап ҡалырға кәрәк.

Законда ерҙе межалау үткәреүҙе, йәғни аныҡ участкаларҙы пайсыларға беркетеү мәсьәләһе лә ҡуйыла. Был осраҡта ерҙең файҙалылыҡ коэффециенты иҫәпкә алынырға тейеш. Әйтәйек, ерҙәрҙең уңдырышлылыһы, уңдырышһыҙы, ташлыһы, юл ситтәрендәгеһе, һ.б. төрлөһө бар. Межалау башланһа, пайсылар араһында яҡшыраҡ ерҙәрҙе эләктереп ҡалыу өсөн ыҙғыш, талаш ҡубыуы бар. Шуның өсөн дә уңдырышлы ерҙең 7 гектары ташлы ерҙең 15 гектарына тигеҙ була, тигән дә шарттар ҡуйылырға һәм тормошҡа ашырылырға тейештер. Ерҙе бүлеүҙең ауыл принцибын да файҙаланырға була. Әйтәйек, элекке колхозға үҙ ерҙәре менән ингән бер ауыл халҡы шул ерен айырып ала ла, һәр пайсының шул ерҙәге иҫәбе менән ерен эшкәртә йә арендаға бирә, йәғни ауыл эсендә межалау үткәрелмәй. Ерҙе файҙаланған өсөн арендаторҙың пайсыға табыштың өстән бер өлөшөн түләүен дә ҡарарға кәрәк.

Беҙ Рәсәй Федерацияһы Законын республикаға ярашлы ҡабул иткән саҡта көтөүлектәрҙе һәм сабынлыҡтарҙы межалауҙы үткәрмәҫкә булдыҡ. Сөнки ауыл кешеһенең элек-электән ата-олатаһы сапҡан ерен башҡаларға бүлеү ҙә ыҙғыштар тыуҙырасаҡ, ә көтөүлеккә килгәндә, һәр хужа үҙ малын айырым көтмәй, мал ауыл көтөүендә йөрөй.

Бар кеше лә ерҙә эшләй алмай. Шуға күрә пай ерҙәре иртәме-һуңмы барыбер ҙә айырым кешеләр ҡулында ҡаласаҡ. Әгәр ҙә ер ситтән килеүселәрҙең ҡулына эләкмәһен тиһәк, һәр урында лидерҙар барлыҡҡа килеүе мотлаҡ. Ер халыҡтыҡы булып ҡалһын тиһәк, ул лидерҙарҙың милли рухлы булыуы мотлаҡ. Киләсәктә еребеҙ башҡорт милләтенеке булып ҡалһын өсөн был иң мөһим шарттарҙың береһе.

**Рәдил МӨХӘМӘТДИНОВ:** Зифҡәт Ислам улы дөрөҫ әйтә: беҙҙең күп кенә байлыҡтарыбыҙ үҙебеҙҙеке түгел. Уның әйткәндәренә мин алтынсы байлығыбыҙҙы өҫтәр инем. Уныһы - һауа. Ярай әле һауаға тейә алмайҙар, ә бысрата алалар. Ерҙәребеҙҙең дә 40 проценты федераль милеккә ҡарай, бына хәҙер ҡалған 60 процентын да тартып алырға итәләр. Республикабыҙ суверенитетының 20 йыллығына бына беҙ ошондай мираҫ менән тороп ҡалдыҡ. Был хәл беҙҙең республикала ғына түгел, бөтә Рәсәйҙә күҙәтелә.

Ярай, ерҙе бүлдек тә, ти, әммә был бар эштәрҙең башы ғына әле. Ул ерҙә нимә үҫәсәк һуң? Ҡайынмы? Бойҙаймы? Крәҫтиәнгә бөгөн ерҙән бигерәк унан алған табыш мөһимерәк, минеңсә. Нимә генә тиһәк тә, ер иң беренсе сиратта етештереү сараһы.

Ер тураһындағы законды һигеҙ йыл буйына тәгәрәтеп йөрөтөп, ниһайәт, ҡабул иттеләр. Күрәһең, Дәүләт Думаһында аҡыллы һәм намыҫлы депутаттар ҙа булғандыр инде. Рәсәй Федерацияһында бөгөн 120 миллион гектар һөрөнтө ер бар. Бөгөн шул ерҙең 50 миллион гектары ташландыҡ хәлдә. Илебеҙҙең 50 мең ауылы халҡы ерҙе эшкәртмәҫ өсөн ҡалаларға ҡасып китеп бөттө. Беҙ ҙә колхоз-совхоздар һылтауы менән был процесты һуҙып килдек, әммә халыҡтың күпләп ауылдан китеүе беҙҙең республикала ла күҙәтелә.

Ҡасандыр минең тыуған Салауат районында 47 мең гектарҙа иген сәселә ине. Бөгөн иһә унда 7 мең гектарҙа ғына иген сәселә. Унда ер пайҙары бүленгән, кемдер ерен теркәгән, әммә сәсеүсе юҡ. Салауаттар бойҙай, он һатып алырға Өфөгә килә. Бер районда мең гектар ерҙә ун йылдан ашыу бер нәмә лә сәселмәгәс, баҫыуҙы ҡайынлыҡ ҡаплап алғас, алдынғы ҡарашлы бер эшҡыуар урман араһына сусҡаларын ебәргән. Сусҡалар үрсеп киткән, ҡырағайлашҡан. Эшҡыуар урманды һунар биләмәһенә әүерелдереп ебәргән. Ҡаланан килеүсе һунарсылар урман араһында сусҡаларға һунар итә. Бер сусҡа атҡан өсөн ҙур ғына хаҡ ҡуйған һәм ошо юл менән элекке иген баҫыуында үҙенең "эшен" асып ебәргән.

Асылда, бөгөн ер пайҙары 70, ҡайһы бер районлдарҙа 80 йәшлек пенсионерҙарға бүленгән. Йәштәр бик аҙ уларҙың араһында. Пенсионерҙарҙан был эштә нимә өмөт итәһең инде?

**Азамат РЫҪКИЛДИН, Ҡаҙағстан башҡорттары ойошмаһы етәксеһе:** Хәҙерге ваҡытта бөтә урында ла легитим ойошма - ул Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы. Шул уҡ Мәләүез районында, башҡа урындарҙа башҡорт милләтенә ҡағылған проблемалар килеп тыуһа, кемдәр ул төбәктән ҡоролтайға делегат булып һайланып килгән, барлыҡ проблемалар улар аша хәл ителергә тейешле. Мин өс йүнәлештәге сараны тәҡдим итәм:

-Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты янында ер эштәре буйынса компания булдырыу. Урындарҙағы сигналдарҙы беҙ бынан барып тикшерергә тейешбеҙ.

-Ауыл хужалығында етештерелгән продукцияны һатыуға булышлыҡ итеү. Был эштә дәүләт гарант булып тора. Ни өсөн тигәндә, ҙур ҡалаларҙа натураль ауыл хужалығы продукцияһы конкурентлыҡҡа һәләтле түгел.

3.Ерҙе межалауҙы дәүләт иҫәбенә башҡарыу. Бер пайсының ерен межалау 35 меңгә төшә икән, беҙҙең шарттарҙа уны пайсылар иҫәбенә башҡарыу мөмкин түгел.

**Ҡадир МӘҒӘФҮРОВ:** Ергә инвестициялар йәлеп итергә кәрәк, тиҙәр. Дөрөҫ, ерҙе яҡшылап эшкәртер өсөн, сифатлы орлоҡтар һатып алыр өсөн, ашлар өсөн, үҫтерелгән уңышты юғалтыуһыҙ ваҡытында йыйып алыр өсөн күп сығым талап ителә. Әммә ситтән килгән инвесторҙарға ышаныс бармы? Юҡ. Әле бына бер Мәләүез районы миҫалында ғына быға инанырға була. Уларҙы ситтән килгән холдингтар түгел, үҙебеҙҙең егеттәр эшләгән МТС алдай. Ә ситтән килгән инвесторҙар беҙҙе тапап ҡына үтәсәк. Урындарҙағы хакимиәт башлыҡтары ни өсөн МТС-тарға, холдингтарға яҡты йөҙ күрһәтә? Сөнки улар ҙа ашарға теләй, ә МТС-тар менән холдингтарҙан ҡалъя эләгә. Мәсьәлә бында бик ябай ғына.

Нимә эшләргә һуң? Зифҡәт Ислам улы әйтмешләй, һәр ауылда үҫеп сығыр милли рухлы юлбашсыларҙың барлыҡҡа килеренә өмөт итеп буламы? Бына, мәҫәлән, мин тыуып үҫкән Әбйәлил районының элекке Шайморатов колхозына бөгөн 10 ауыл ҡарап, уның 7800 гектар һөрөнтө ере бар ине. Колхоз тарҡалды, әммә унда ер алырға, уны эшкәртергә теләүсе кешеләрҙе әле осратҡаным булманы.

Бына Рәдил Ҡыяметдин улы "Шул урында шунсама ерҙәр сәселмәй, әрәм булып ята, был урында шунсамаһы ята", тип һөйләне. Был, ысынлап та, шулай. Ә мин, беләһегеҙме, шул әрәм булып ятҡан ерҙәр өсөн ҡыуанам. Совет осоронда еребеҙ өҫтөндә төрлө тәжрибәләр үткәрелде, беҙ уға ял итергә ирек бирмәнек. Бөгөн шул ерҙәр ял итеп, уңдырышлылыҡ туплай.

Хәҙерге заманда илебеҙ сәйәсәте яйлап-яйлап ауыл хужалығын, мәғариф системаһын бөтөрөүгә йүнәлтелгән һымаҡ. Былай барһа, бер нисә йылдан бөтөн Рәсәй халҡы асарбаҡ хәлендә ҡаласаҡ. Ошо хәлгә юл ҡуймаҫ өсөн һәр төрлө киң мәғлүмәт саралары, радио һәм телевидение, Интернет аша беҙ "Башҡортостанда - натураль аҙыҡ-түлек", "Башҡорттар - натуралдар" тигәнде пропагандалай башларға тейешбеҙ. Ни өсөн тигәндә, беҙ баҙарға натураль аҙыҡ-түлегебеҙҙе сығарып, холдингтар менән ярыша алмайбыҙ. Сөнки унда беҙҙән шунда уҡ яраҡлылыҡ сертификаты таптырып, башҡа һылтау менән баш тартасаҡтар. Натураль продукттарҙа соя һәм башҡа төрлө канцерогендар юҡ. Ошо юл менән беҙ ауыл хужалығы продукцияһын оло баҙарға сығара алабыҙ. Ә инде оло баҙарға сығыу ауыл хужалығын үҫтереү өсөн өҫтәмә табыш килтерәсәк. Башҡа юлыбыҙ юҡ беҙҙең.

**Марсель ҠОТЛОҒӘЛЛӘМОВ:** Беҙ аныҡ эштәр башҡарыр урынына һаман да теория менән шөғөлләнәбеҙ. Бер туҡтауһыҙ зарланабыҙ. Хәҙер беҙгә ерҙә эшләгән, эш башларға йыйынған милләттәштәребеҙгә практик ярҙам итергә, һүҙҙән эшкә күсергә кәрәк. Был эште беҙ түгел, махсус юғары белемле менеджерҙар, юристар башҡарырға бурыслы.

Беҙ барыбыҙ ҙа ауылдан сыҡҡанбыҙ, йыш ҡына ҡайтып йөрөйбөҙ. Бына минең тыуған ауылым дүрт урамлы ауыл ине. Унда хәҙер ни бары 300 самаһы кеше ҡалды, урта мәктәптә уҡыусыларҙың һаны йөҙгә лә тулмай. Мин Ҡадир Барый улының ерҙең көс тупларға, ял итергә тейеш тигән фекере менән килешә алмайым. Ял иткәндә лә, ул ике тиҫтә йыл ял итергә тейешме? Минеңсә, ер эшләргә тейештер. Бына Әбйәлил районында өс санаторий, әллә күпме пансионат бар. Уларҙа ял итеүселәрҙең барыһын да Магнитогорскиҙан аҙыҡ-түлек ташып ашаталар. Ә уларҙың янында ерҙәр "ял итеп" ята. Бына беҙ, Өфөлә йәшәүселәр, супермаркеттарға йөрөйбөҙ. Унда йәшел һуғанды Экваторҙан килтерәләр, ә эргәбеҙҙә генә Иглин, Ҡырмыҫҡалы, Кушнаренко районлары ята. Килоһы 50 һум торған картуфты Төркиәнән килтерәләр. Шул уҡ ваҡытта эргәлә генә ятҡан Ҡара Яҡуп ауылында Наил Әһлиуллин тигән фермерҙың тонна-тонна картуфы сереп ята, бер кем дә алмай. Йөрәк әрнеп ҡайтты. Наилдың ҡанаты һынған. Фермер хужалыҡтарының инфраструктураһы булдырылмаған. Бына Мәләүез районы фермерҙары, ер бирмәйҙәр, тип, беҙҙең кәңәшмәгә үк килеп еткән. Улар был мәсьәлә менән беҙгә килеп йөрөргә тейешме ни? Уларҙың ер мәсьәләһе күптән хәл ителеп, бөгөн улар хужалыҡтарын нисек итеп үҫтереү хәстәре менән йөрөргә тейеш. Улар үҙ хужалығынан сыҡмай, бындай мәсьәләләре буйынса кәрәкле урынға Интернет аша сығып хәл итергә тейеш. Ә улар һаман да кеше тупһаһы төбөндә йөрөй, ошо ерҙең хужаһы була тороп.Йәшерен-батырыны юҡ: ауылдар үлеп бөтөп бара.

**Сәғит хажи ИСМӘҒИЛЕВ:** Беҙ пай ерҙәрен бүлеү мәсьәләләре буйынса Баймаҡта, Мәсетлелә, Ғафуриҙа, Көйөргәҙелә булдыҡ. Күп кенә урындарҙа хакимиәт башлыҡтары беҙгә күп кенә ҡаршылыҡтар яһаны. Алдағы аҙналарҙа Йылайыр, Хәйбулла районларына барырға иҫәп тотабыҙ. Әлеге ваҡытта күпселек халыҡ үҙҙәренең пай ерҙәренә документтарын алды, хәҙер инде дәррәү рәүештә икенсе этапҡа - ыҙанға бүлеүгә (межалау) тотоноу фарыз. Һәр кем үҙенең еренең ҡайҙалығын белергә тейеш. Әйтәйек, бына был йылға буйындағы 60 гектар ерҙең 6 гектары минеке, тип һәр кем үҙ ерен танырға тейеш. Ә инде ул ерҙе һәр кемгә кәртәләп бүлеп биреү артыҡ эштер, тием. Бына беҙҙең Таймаҫ ауылында революцияға тиклем дә, хәҙер ҙә мең кеше йәшәй. Элек тә, хәҙер ҙә ерҙәрҙе ара принцибы буйынса бүлгәндәр. Ерҙе бүлеүҙең был принцибын мин бик дөрөҫ юлдыр тип иҫәпләйем. Сөнки кеше туғандарын ташлап китә алмаған кеүек, үҙ ерен дә бүлеп, кемгәлер һата ла алмай. Был ерҙе контролдә тотоуҙың иң дөрөҫ, беҙҙең милләткә хас тәбиғи юлы. Ауыл бөтә, ти Марсель ағай, ауыл бөтмәй, урындағы хакимиәт ауылды бөтөрә. Минең Юлай мырҙам үҙенең тыуған ауылында өй һалырға ер алыр өсөн ярты йыл буйы бер ишектән икенсеһенә йөрөнө. Совет осоронда мин ауылда өй һалырға уйлаһам, ерҙе аяҡ менән үлсәп кенә ала ала инем. Хәҙер шул тиклем административ кәртәләр ҡуйғандар, хатта өс балаһы булған кеше лә тыуған ауылында йорт һалырға урын юллай алмай. Шуға күрә беҙ егеттәр менән һөйләшеп, "Бәхетле ғаилә" тигән программа буйынса эш башланыҡ. Был программа буйынса әсәлек капиталын файҙаланып, йорт төҙөргә мөмкинлеге булмаған ғаиләләргә йорттоң нигеҙен һалып, бураһын күтәреп, ҡыйығын ябып биреүҙе күҙ уңында тотабыҙ. Бынан тыш, өйҙөң ҡалған өлөшөн төҙөп бөтөрөр өсөн дә материал биреләсәк. Беҙ бит хәҙер хатта ауылға барып эшләйем тигән кешегә лә форсат бирмәйбеҙ. Шуға күрә күптәребеҙ Себергә сығып китә һәм ғаиләһе тарҡала.

***Ер эшләргә тейештер. Бына Әбйәлил районында өс санаторий, әллә күпме пансионат бар. Уларҙа ял итеүселәрҙең барыһын да Магнитогорскиҙан аҙыҡ-түлек ташып ашаталар. Ә уларҙың янында ерҙәр "ял итеп" ята. Бына беҙ, Өфөлә йәшәүселәр, супермаркеттарға йөрөйбөҙ. Унда йәшел һуғанды Экваторҙан килтерәләр, ә эргәбеҙҙә генә Иглин, Ҡырмыҫҡалы, Кушнаренко районлары ята. Килоһы 50 һум торған картуфты Төркиәнән килтерәләр. Шул уҡ ваҡытта эргәлә генә ятҡан Ҡара Яҡуп ауылында Наил Әһлиуллин тигән фермерҙың тонна-тонна картуфы сереп ята, бер кем дә алмай. Йөрәк әрнеп ҡайтты. Наилдың ҡанаты һынған. Фермер хужалыҡтарының инфраструктураһы булдырылмаған.***

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ултырышта тағы ла бик күптәр сығыш яһаны. Һуңынан күтәрелгән мәсьәләләр буйынса Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенә, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың Аграр мәсьәләләр, экология һәм тәбиғәтте файҙаланыу комитетына, урындағы үҙидара органдарына төрлө тәҡдимдәрҙе үҙ эсенә алған ҡарар ҡабул ителде. Барлыҡ сығыштарҙың да уртаҡ бер яғы - еребеҙ яҙмышы, уның киләсәге өсөн борсолоу. Зифҡәт Ислам улы дөрөҫ әйтә, ауылдарҙа ер эштәрен ойоштороусылар, юлбашсылар милли рухлы кешеләр булырға тейеш. Сөнки еребеҙ беҙҙе туйындырып ҡына ҡалмай, һыйындыра ла. Милләтебеҙ йәшәгән урын Ер шарындағы берҙән-бер еребеҙ ул.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**

✓ ***Образһыҙ яҙған шағир - шағир түгел. Образды үҙең уйлап тап, кешенән сәлдермә. Ул оғролоҡ була. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был алама күренеш әҙәбиәтебеҙҙә ҡурҡыныс, ҡот осҡос хәлгә әүерелеп бара.***

# АС, ШИҒРИӘТ,

## Хәйер, ул серҙәргә төшөнһәк,

**Үҙ ғүмеремдә тәүге тапҡыр күргән шағир Әсхәл Әхмәт-Хужа булды. Үткән быуаттың етмешенсе йылдарында шағирҙарға мөнәсәбәт бөтөнләй икенсе төрлө булғандыр, әлбиттә. Ул саҡтағы бала күңелем менән мин дә үҙемсә ҡабул иттем. Һигеҙ йыллыҡ ауыл мәктәбендә үткән осрашыуҙы тоноҡ ҡына хәтерләйем. Әммә ярһып-ярһып шиғыр уҡыған (үҙ шиғырҙарын бит әле!) Әсхәл Әхмәтҡужин хәтеремдә уйылып ҡалған һәм аңымда шағирҙар фәҡәт шундай булырға тейеш тигән стереотип нығынған. Бөгөн дә мин үҙ шиғырҙарын башҡаларға һеңдерерҙәй итеп уҡый алмаған шағирҙарға шикләнеңкерәп ҡарайым. Нисек инде улай, ташып торған хистәреңдән шиғыр һынлы илаһи бер әҫәр ижад ит тә, уны башҡаларға еткерә алма, имеш. Был бит йыр яҙып та, йырлай белмәгән кеүек тә баһа!**

**Бөгөн аңлайым: шиғырҙарын матур итеп уҡый белеү шағир өсөн төп шарт түгел, әлбиттә. Әммә стереотип тигән ҡәһәр ҡалып сайыр кеүек йәбешкәк бит ул, еңел генә ҡотолормон тимә. Стереотип тигәндән, һеҙҙең иғтибарға тәҡдим иткән әңгәмәлә шағир Әсхәл Әхмәт-Хужа шиғриәт тураһындағы күп кенә ҡалыптарҙан ситләшә, шәхсәнә үҙ фекерҙәрен еткерә. Уның һәр һүҙгә үтә лә талапсан булыуы хайран ҡалдыра. Шағирҙың ҡараламаларын күргәнем бар. Ҡайһы бер шиғырҙы ул бер нисә вариантта яҙған, ҡәнәғәтлек тойғоһо кисермәйенсә, донъяға сығарырға ашыҡмаған. Әсхәл ағай ғүмере буйы әҙәбиәттең тик шиғриәт жанрына ғына тоғролоҡ һаҡлай - был уның хайран иткән тағы бер яғы. Шағир менән фәҡәт шиғриәт тураһында һүҙ алып барҙыҡ. Рәхим итеп ҡабул ҡылығыҙ.**

### Ысын шиғыр

Тәржемәләрҙе күңел зауығына ҡарап башҡарам. Иң тәүҙә мине авторҙың ихласлығы арбай. Тәржемә итәсәк әҫәр ысын шиғриәт өлгөһө булыуы ла мотлаҡ. Ҡоро декларатив һүҙҙәрҙән торған шиғырҙарҙы өнәмәйем. Шиғыр төҙөлөшөн үҙемсәгә борам, әлбиттә, әммә автор һайлаған форманы ҡалдырырға тырышам. Һәр халыҡтың үҙ яуланышы, үҙ ҡаҙанышы бар, ләкин уларҙың араһында һәр береһе күңелде үртәй алмай. Шулай булырға тейеш, тегеләй ҙә былай, тип яҙыу шиғыр түгел, тик тере образдар ғына кешенең күңеленә һеңеп, уның уйын, фантазияһын тоҡандыра. Кеше үҙенең ташҡын хистәрен ана шундай шиғырҙарға ҡарап үҫтерә. Сит илдәрҙә, беҙҙәге кеүек, шиғыр үлсәменә бикләнә һалып бармайҙар, уларҙа күбеһенсә аҡ шиғырҙар өҫтөнлөк итә. Мине шиғыр формаһы ҡыҙыҡһындырмай, уның образлылығы хайран итә.

### Образлылыҡ

Шағир өсөн иң тәүҙә образ мөһим. Образ менән эш итә белергә кәрәк. Тикмәгә Ким Әхмәтйәнов беренсе китабыма уҡ: "Әсхәл образды тотоп ҡарарлыҡ дәрәжәгә еткереп деталләштереү оҫталығына эйә. Йәш иптәштең хатта дыуамалыраҡ образдары ла беҙгә яҡын", - тип нарыҡ бирмәгәндер (ул саҡта миңә 25 йәш ине). Минеңсә, образһыҙ яҙған шағир - шағир түгел. Был беренсенән булһа, икенсенән, образды үҙең уйлап тап, кешенән сәлдермә. Ул оғролоҡ була. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был алама күренеш әҙәбиәтебеҙҙә ҡурҡыныс, ҡот осҡос хәлгә әүерелеп бара. Ниңә урлашырға, образдарҙы бит үҙең дә бик күпләп таба алаһың. Образдар өр-яңы - уникаль, киң йә иһә традицион булыуы ихтимал. Хатта, ҡабатланған булып та, халыҡ ижадынан, тарих төпкөлөнән алына икән - рөхсәт. Ләкин поэтик образ үҙеңдең шәхсән индивидуаль характерыңды, индивидуаль почеркыңды, фәҡәт һинең генә йән ғазабыңды күрһәтмәй, асылыңды бирмәй икән, шулай уҡ фәтеүә юҡ.

Образлылыҡ шул хәтлем нескә һәм ҡәҙерле әйбер. Филология фәндәре докторы Суфиян Поварисов "Алтын тамыр" тигән китабыма бағышлап: "Шағир мең ҡат сәйнәлгән, тапталған, төҫө уңған сағыштырыуҙар менән мауыҡмай... Яңы образдарҙы ул үҙе уйлап таба. Тимәк, поэзияның ауыр ысулын һайлай. Был ысул уны һүҙ сәнғәте оҫтаһы дәрәжәһенә күтәрә", - тип яҙып сыҡҡайны. Рәхмәт уға!

### Индивидуаль стиль

Шағирға икенсе иң ҙур баһа - уның индивидуаль стиле бар, тигән һүҙ. Был баһа даһи, бөйөк, мәшһүр, күренекле, танылған, билдәле, популяр тигән эпитеттарҙан да юғарыраҡ. Авторы билдәһеҙ әҫәрҙе уҡып, уны кем яҙғанын индивидуаль стиле буйынса төҫмөрләп булһа, был шағир өсөн ҙур ҡаҙаныш. Индивидуаль стиль, поэтик характер төшөнсәләренең башҡортса тәржемәһе нисек яңғырарға тейештер, был турала уйлағаным юҡ. Һәр нәмәнең үҙ асылы була, был төшөнсәләрҙең дә, һис шикһеҙ, башҡортса атамаһы булырға тейеш. Индивидуаль стиль булмаһа, әҫәрҙәр, бер тараҡ менән таралғандай, бер төрлөгә әйләнә, утһыҙ, һутһыҙ килеп сыға. Ундай шиғриәтте шиғриәт тип атап булмай. Яңыраҡ бер ҡорҙаш шағирҙың китабын уҡып сыҡтым. Ике йөҙ илле битлек китапта рух һүҙе дүрт йөҙ тапҡыр ҡабатлана. Рух һүҙен сәйнәүҙән генә рух күтәрелмәй бит! Хәлүә тип мең тапҡыр ҡабатлауҙан ауыҙҙа уның тәме килмәй ҙә баһа. Рух тип ҡабатлауҙан ғына рух ҡабынмай! Был турала мин күптән уйланам.

### Минең остаздарым

Остаздарым бик шәп булды. Рәми Ғарипов, Рафаэль Сафин, аҙаҡҡараҡ Ким Әхмәтйәнов һәр шиғыр юлымды уҡып, йүнәлеш бирҙе. Мостай Кәрим, Назар Нәжми кеүек шиғриәттең титандары, һәр яҙған әйберемде ҡәләм тотоп анализлап бармаһалар ҙа, үҙ үрнәктәре, үҙ миҫалдары менән әсир итте. Бик талапсан ине улар. Шиғриәттең теоретигы булған Ким Әхмәтйәновтың һәр һүҙҙе тотоп алып үлсәп әйтеүе - үҙе бер мәктәп ине. Теоретик тигән төшөнсәнең дә башҡортса атамаһын белмәйем. Белгес тиһәң, кәмһетеү кеүек. Әле лә уның "Әҙәбиәт теорияһы" китабы дәрәжәһендәге фәнни эш юҡ. Уның, исемһеҙ шиғырҙар яҙма, тигәнен һәр саҡ иҫемдә тотам. Шиғыр башындағы өс йондоҙ ғына шиғырҙы йондоҙло итмәй, әлбиттә. Әҫәрҙең исеме менән уның эстәлеге араһында һәр саҡ яңы ассоциация тыуа. Шиғырға һәр бер өтөргә тиклем иғтибар итергә кәрәк, тигәнен дә иҫләйем. Ким ағайҙың, бер нисә строфанан ғына торған шиғырҙы төрлө үлсәм менән яҙырға ярамай, тигәнен дә онотмайым. Ни өсөн тигәндә, шиғыр техник йәһәттән калейдоскоп уйнатыуға оҡшап ҡала, өҫтәүенә, һис ни менән аҡланмаған шиғри үлсәмдәр килеп керһә, быныһы бигерәк тә насар. Хатта ҡыҫҡа лирик поэмаларҙа ла үлсәмдән үлсәмгә һикереүҙәрҙе хупламай торғайны Ким ағай. Бөгөн иһә наҙанлыҡ арҡаһында шиғырҙың техникаһын боҙоуҙарға юл ҡуйыла. Йәш ҡәләмдәштәрҙе ошо хәҡиҡәткә инандырыусы остаздар ҙа юҡ бөгөн. "Шоңҡар", "Ашҡаҙар" һәм башҡа шундай ижади берләшмәләрҙә, республикабыҙ буйынса күпләп асылған яҙыусылыр ойошмаларының поэзия секцияларында шиғыр техникаһын бөтөнләй өйрәтмәйҙәр, ахыры.

Рафаэль Сафин менән "Ағиҙел" журналында бергә эшләргә яҙҙы. Яңы шиғырымды күрһәтһәм, ул шым ғына уҡып сыға ла баһа бирергә ашыҡмай: "Бар, Рәмигә уҡы", - ти торғайны. Ә Рәми ағай "Совет Башҡортостаны" гәзитендә эшләй ине. Шота Руставелиҙың "Юлбарыҫ тиреһе кейгән батыр" поэмаһынан иң оҡшаған ике бүлекте тәржемә итеп, Рафаэль Сафинға уҡығайным, шул уҡ хәл ҡабатланды. Рәми ағай бер генә урында төҙәтмә индерҙе.

"Рифма ҡороп, бәғзе ахмаҡ
(Хәс тә баҡыраҡ һыйырмы ни!):
"Сәнғәт был!" - тип һөрән һала...
Ә һуң һөрән йырмы ни?" -

тигән урынға: "Ул ваҡытта рифма тигән һүҙ булмаған, ҡафиә тип үҙгәрт", - тине. Шул ваҡиғанан күп йылдар үткәс кенә ул: "Шота Руставели поэмаһы бүлектәрен һинең тәржемәлә уҡығас, ысын талант икәненә ышандым", - тип баһа бирҙе.

"Тәржемә хаҡында күптән айырым һүҙ алып барырға кәрәк ине лә, юҡ, тәржемә һаман беҙҙең иғтибарҙан ситтә ҡала килә. Тәржемә - ул үҙе ҙур бер сәнғәт икәнен онотабыҙ. Шуға күрә беҙҙә сәнғәт кимәлендәге тәржемә лә тәржемә, уртаҡул "тәржемә" лә тәржемә булып тик йөрөй. Башҡортостан китап нәшриәте тарафынан ун йыл элек баҫып сығарылған "Ебәккә ынйы теҙелде" исемле һайланма шиғырҙар китабы башҡорт әҙәбиәтендәге тәржемә хәле хаҡында ул ваҡытта уҡ айырым һүҙ алып барырға мөмкинлек бирә ине. Сөнки төрлө телдәрҙә ижад ителгән поэтик өлгөләрҙе башҡорт әҙәбиәтенең бер ҡаҙанышына әүерелдергән бындай тупламаның донъяға сығыуы - ул беренсе тапҡыр ине. Икеләнмәйенсә әйтергә була, Әсхәл юғары поэтик зауығы булған, телдең нескәлектәрен тоя белгән, башҡа халыҡтарҙың шиғриәтен башҡорт телендә тәбиғи аһәңе менән яңғыратыу оҫталығына ирешкән шағир. Уның тәржемәләрен тәржемә итеп түгел, ә башҡорт телендә яҙылған шиғыр итеп уҡыйһың". Былар - остазым Рафаэль Сафиндың һүҙҙәре.

Быларҙы мин үҙемде маҡтағандан әйтмәйем. Шиғриәттең асылы поэтик индивидуаллектә тигәнде иҫбатлар өсөн әйтәм. Үҙем ошо инаныуға, ҡағиҙәгә тәүге көндәрҙән тоғро ҡалырға тырышам һәм үҙемдең визит ҡағыҙым да - индивидуаллектә.

### Драматизм

Тормоштағы хәл-әхүәлде рифмаға һалып, бына был шиғыр тип әйтеү шағирлыҡты аңлатмай әле. Шиғырҙың тағы бер асылы - драматизм. Образлылыҡты индивидуаль стилдә, ваҡиғаларҙы уның драматизмында бирергә кәрәк. Был донъяла әҙәм балаһынан да фажиғәле йән эйәһе юҡ. Кеше генә үҙенең үләсәген белә. Тормош шул тиклем ҡот осҡос драматизмға ҡоролған: кеше йәшәй-йәшәй ҙә бер көн килеп фани донъя менән хушлаша. Ошо хәлде шул килеш яҙырға кәрәк тигәндән әйтмәйем быны. Шиғыр яҙғанда һәр ваҡытта ла драматизм булһын, эске көсөргәнеш, эске тойғолар үҫеше, динамика, бер кисерештән икенсе кисерешкә күсеү булһын, тим.

### Кәнфит тәнҡит

Шиғриәттең асылы хаҡында һөйләшкәндә мин үҙ ижадымдан миҫалдар килтермәйенсә һөйләй алмайым. Етмәһә, бәғзе берәүҙәрҙең шиғырҙарын анализлап ултырыу бөгөн ҡурҡыныс та. Күҫәк күтәреп дошманлашыу, кенә ҡыуыу, аяҡ салыу хәҙер ҡот осҡос күренешкә әйләнеп бара. Был бер шиғриәттә генә түгел, әҙәбиәттә лә, ғөмүмән, тормошта ла бар. Шуға күрә лә тәнҡит урынына инде кәнфит кенә ҡаптыралар. Эшкинмәгән кешегә, эшкинмәгән шағирға, ул күренекле шағир, шәп шағир, ул фәлән-төгән, ул - эпохаль шағир, тип индульгенция тараталар.

### Мин - библиофил

Мин - библиофил, "китап ауырыуы" менән ауырыйым. Үҙ ғүмеремдә бик уникаль, оригиналь китапхана булдырҙым. Белеүемсә, Әнүәр Бикчәнтәевтың китапханаһы бик елле, шәп булған. Рәшит Шәкүрҙең китапханаһы бай. Тик ул, әҙәби китаптарҙан тыш, публицистик, ғилми китаптар ҙа йыя. Сафуан Әлибаев китаптарҙы күп һатып ала торғайны.

Миндә иһә әҙәбиәт өлкәһендәге Нобель премияһы лауреаттарының бөтә китаптары бар. "Мастера современной прозы", "Сокровища лирической поэзии" циклына ингән китаптар тупланым. "Библиотека поэта" үҙе ике (өлкән һәм бәләкәй) сериянан тора. Ленин премияһы лауреаттарының китаптары ла айырым бүлекте тәшкил итә. Миндә "Всемирная литература для детей" һәм ике йөҙ том тәшкил иткән "Библиотека всемирной литературы" бар. СССР-ҙың Дәүләт премияһы, РСФСР-ҙың Горький исемендәге премия лауреаттарының әҫәрҙәрен йыйҙым. Балалар өсөн "Библиотечка школьника" тупланған. "Избранная зарубежная лирика" сериалы илле-алтмыш китаптан тора. Ки-

***✓ Бөгөн халыҡ китап уҡымай, гәзит алдырмай, тигән фекер һис ысынбарлыҡҡа тап килмәй. Киреһенсә, нәшер итеүселәр үҙҙәре беҙгә яҡын булыу өсөн бар мөмкинлектәрҙе лә ҡулланмай, тип һығымта яһарға мөмкин.***

# СЕРҘӘРЕНДЕ!

## ҡыҙығы ҡалырмы һуң шиғриәттең?

таптар менән күптән мауығам. Кәрәклеләрен генә эҙләп табып, үҙемдең мисәт менән тамғалап барам, шул китаптарҙы уҡып, фәһем алам.

Был минең йәш саҡтан уҡ килгән хыялым һәм шөғөлөм. Яҙыусылар союзында секретарь булып эшләгәнендә Вәзих Исхаҡовтан шул мисәтте нисек яһатыу тураһында һораштым. Ғәҙәттә, экслибристы ҡиммәт хаҡҡа почта маркаһы һымаҡ итеп эшләйҙәр: һәр китапҡа йәбештерәһең дә сығаһың. Ләкин быndай ләззәт беҙҙең һымаҡ фәҡир шағирҙар кеҫәһенә ныҡ һуға. Шуға ла мин мисәтте резинканан яһатырға булдым. Һорашып белештем. Баҡтиһәң, ундай әйберҙе КГБ-ның типографияһынан башҡа бер ҡайҙа ла эшләмәйҙәр икән. Был алтмышынсы йылдарҙың аҙағы ине. Вәзих ағай башта Яҙыусылар союзы исеменән, мине хәстәрләп, типографияға хат яҙҙы. Володя Рудаков исемле рәссам дуҫым тиҙ арала экслибрисымдың рәсемен төшөрөп бирҙе. "Һыбай сыҡтым" китабымдың тышындағы кеүек ат һүрәте аҫтына "Шағир Әсхәл китапханаһы" тип яҙҙы.

Был мисәтте күреп ҡалғас, Рафаэль Сафин: "Шағир тип әйтергә әле иртә, шағир - изге һүҙ, ниңә уны яҙҙырҙың?" - тип шелтәләне. Ағайҙар беҙҙе шулай тәрбиәләне.

### Илаһи китаптар

Минең китапханала дини китаптар айырым урын биләй. Әлбиттә, Аллаһы Тәғәләнең һүҙе булараҡ, Ҡөрьәнде тәржемә итеү тыйыла. Ләкин беҙ бөтәбеҙ ҙә ғәрәп телен белмәйбеҙ бит. Ҡөрьәндең мәғәнәһен аңлар өсөн ул башҡортсаға тәржемә ителде. Иң тәүҙә 1990 йылда "Ағиҙел" журналының ҡушымтаһы булараҡ башҡорт телендәге беренсе китап сыҡты. Төҙөүсеһе Әмир Әминев, тәржемәсеһе һәм мәҡәләләрҙең авторы Рауил Үтәбай-Кәрими. 50 мең тираж менән сыҡҡан был ҡушымтаны халыҡ шундуҡ һатып алып бөттө. Башҡорт телендә сыҡҡан беренсе Ҡөрьән булды ул. Рауил Үтәбәй-Кәрими бик ҙур фиҙаҡәрлек һәм батырлыҡ ҡылды. 1993 йылда ғәрәп телендәге Ҡөрьәндең фотокүсермәһе, транскрипцияһы һәм башҡортса тәржемәһе рәүешендә ул айырым китап итеп икенсе тапҡыр нәшер ителде. Тәржемәне был юлы Фәнил Байышев, Нурмөхәмәт Әлебай улы Сәйәрғолов, Дәүләткирәй Мәһәҙиевтар атҡарҙы.

Өсөнсөһөн, элекке йыл нәшер ителгәнен, Әкрәм Биишев тәржемәләне, транскрипцияһын Нурмөхәмәт Сөйәрғолов эшләне, Ғәлим Хисамов төҙөүсеһе булды.

Бынан тыш, китапханамда беҙҙең Башҡортостан кешеһе, Асҡын районының Асҡын ауылында тыуған Гордей Саблуков беренсе булып 1887 йылда русаға тәржемә иткән, Ҡаҙанда сыҡҡан Ҡөрьән китабы бар. Быны миңә Тәлғәт Тажетдин мөфтөй үҙе бүләк итте. Бүләк итеүенең сәбәбе шул: уның ике улын, Мөхәммәт менән Зөфәрҙе, минең ҡатыным Лүзә ханым Өфөләге 108-се мәктәптә уҡытты. Ваҡытында Өфөлә йәшәгәндә өй аша ғына йәнәш торҙоҡ һәм танышып, дуҫлашып киттек. Саблуков тәржемәһенең миндәге икенсе баҫмаһы 1894 йылда Ҡаҙанда донъя күргән.

Игнатий Юлианович Крачковский тәржемәһендәге Ҡөрьән дә бар миндә. Ул 1990 йылда Мәскәүҙә нәшер ителгән. Ҡәйнәмдең әсәһенең ҡулынан ҡалған Ҡөрьәнде лә ҡәҙерләп һаҡлайбыҙ. Ҡасан да булһа ейәнбүләләрем был китаптарҙы уҡып сығыр тигән өмөттәмен. Ғаиләнән-ғаиләгә, быуындан-быуынға йәшәһен был китаптар.

### Үҙешмәкәр һәм үҙнәшер

Бөгөн шағир тигән һүҙҙе күп ҡулланабыҙ, инфляция башланды. Элек дүрт башҡорт халыҡ шағиры бар ине, сәйәсәт үҙгәреү һөҙөмтәһендә Башҡортостандың халыҡ шағирҙары иҫәбе күпкә артты.

Төптән уйлаһаң, эш исемдә лә түгел - есемдә. Әммә шағир булыр өсөн шиғриәттең бөтөн нескәлектәренә тиклем өйрәнергә кәрәк, тик уны һуңғы нөктәһенә тиклем бер ваҡытта ла төшөнөп етеп булмай. Шиғриәт - ул серле донъя. Образлылыҡ шиғырҙың йәне лә, ҡаны ла, тәне лә, һөйәге лә, һөлдәһе лә икән, уны индивидуаль стилдә үҙеңсә генә үҫтерә белергә кәрәк. Драматизм, ҡабатланмаҫ булыу һәр беребеҙ өсөн мотлаҡ. Ошоларҙы аңлаған һәм хеҙмәте ҙур булғандарҙы, бәлки, шағир тип атарға мөмкиндер. Юғиһә, район гәзитендә бер нисә шиғыры баҫылған бәғзе берәүҙәр үҙен "шағир" һанай башлай. Дан артынан ҡыуып, үҙнәшер менән шөғөлләнеү инде - шиғриәтте макулатураға әйләндереүгә бәрәбәр. Аҡса кәрәкқәнлектән, нәшриәттәр китап сығарыу кәсебен кеҫә яғынан сығып ҡарай. Кеҫәһе ҡалындар аҡсаһын йәлләмәй икән, был тик нәшриәт файҙаһына, әҙәбиәт өсөн түгел. Дөрөҫөн әйткәндә, үҙешмәкәр шағирҙар һәм үҙнәшерҙәр ялҡытты.

### Матди баһа

"Ағиҙел" журналына эшкә килгәндә, 1965 йылда, айлыҡ хеҙмәт хаҡым ҡырҡ туғыҙ һум ине. Аҙаҡ етмеш биш, унан йөҙ унға күтәрелде. Вазифа күтәрелеү менән бергә эш хаҡы ла үҫә барҙы. Бүлек мөдире булғас, йөҙ егерме, яуаплы сәркәтиптеке тағы ҙурыраҡ ине. Баш мөхәррир урынбаҫары булғас, йәнә артты. Шул осорҙа бер шәлкем шиғырҙар баҫылһа, гонорары эш хаҡының яртыһына тиң була торғайны. Был беҙҙең өсөн ҙур терәк, ярҙам ине. Һикһәненсе йылда өс-дүрт табаҡлыҡ "Оран" тигән китабым сыҡҡас, шуның аҡсаһына баҡса һатып алдым.

Яңыраҡ айҙан ашыу эшләгән материалым өсөн почта аша бер кило колбасалыҡ гонорар килде. Ижадтың бөгөн матди яҡтан бер ниндәй баһаһы юҡ. Халҡыма хеҙмәт итәйем, тигән фанаттар ғына ижадҡа тоғро ҡала.

### Рухиәт йәннәте

Ованес Туманян - әрмәндең мәшһүр, бөйөк шағиры - дүрт юллыҡтар ҙа яҙған. Башҡорт теленә беренсе булып Туманянды мин тәржемә иттем. Башҡа уны беҙҙең телгә тәржемә итеүсе юҡ, шикелле. Әҫәрҙәрендә тәрән фәлсәфә, образлылыҡ ярылып ятыуы менән әсир итте мине был шағир. Бына уның бер быуат элек яҙылған шиғырҙарының береһе:

Беҙ бәндәгә аңлау ҡыйын Тәңре эшен,
Әҙәмдәргә ул дуҫ биргән, тапҡан ишен.
Ә йәшәүҙең асылына инһен өсөн,
Яңғыҙ иткән тик шағирҙы - үҙ тиңдәшен.

Был шиғырында автор шағирҙың эшмәкәрлегенә, ижадына бик юғары талап ҡуя. Шиғриәт - ул айырым донъя, шуға күрә, шиғырҙарҙың тәғәйенләнеше лә ижадсының асылынан килә. Аллаһы Тәғәлә Ерҙе матур, гүзәл итеп яралтҡан кеүек, шағир ҙа тормошто матур итеп һүрәтләргә, үҙенсә йәмләргә тейеш тип уйлайым. Шағир ерҙә рухи ожмах төҙөргә бурыслы. Ысын шиғыр доға кеүек. Ҡөрьән аяттарын уҡығанда кешенең күңеле тыныслана, хозур мәлгә тарый, йәшәүгә ынтылыш барлыҡҡа килә. Шиғыр ҙа шулай булырға тейеш. Һәр хәлдә, шиғырҙың асылы - матурлыҡтың асылы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Әңгәмәбеҙҙе "Ас, шиғриәт, серҙәренде!.." тип атап булалыр, моғайын. Инешһеҙ башланды ла йомғаҡлауһыҙ тамамланды ул. Ғөмүмән, шиғриәт даръяһын иңләп булмайҙыр ҙа. Уның бөтә серҙәренә төшөнһәк, ҡыҙығы ла ҡалмаҫ ине, шулай бит?**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН**
**яҙып алды.**

ҺӨЙЛӘҺӘҢ - ҺҮҘ...

# ХАЛЫҠ УҠЫМАЙМЫ, ӘЛЛӘ...
## уҡырға мөмкинлек тыуҙырылмаймы?

**Ни генә тиһәләр ҙә, беҙҙең халыҡта рухи аҙыҡҡа ихтыяж көслө ул. Ара-тирәмдә быға миҫалдар табылып ҡына тора. Мәҫәлән, беҙҙең ауыл китапханаһынан бер ҡасан да кеше өҙөлмәй. Йәше лә, ҡарты ла яңы гәзит-журналдарҙы, китаптарҙы ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡый.**

Әсәйемдең өҫтәлендә лә гел бер өйөм китап ята торған. Ялға ҡайтҡан һайын уларҙың алмашынғанын күрәм. Сыҙамай, "Ҡай арала уҡып өлгөрәһең барыһын да?" тип һорайым. Әсәйем баҫалҡы ғына: "Ҡыҙыҡ булһа, бер китапты берике көндә уҡып бөтәм мин",- тип яуап бирә. Быныһы - бер. Икенсенән, ауылдың икенсе осонда урынлашҡан китапханаға барырға нисек йыбанмайҙыр. Һаулығы бит шәптән дә түгел, бер нисә йыл элек инсульт һуғып, кәүҙәһенең ярты яғы йүнләп эшләмәй ҙә. Аптырайым да, һоҡланам да мин уның менән. Ғүмере буйы һауынсы булып эшләгән, колхоз аҙбарынан, һыйырҙарынан башҡа бер ни белмәгән ябай ауыл ҡатыны шул хәтлем китап уҡыуға әүҙем. Ә бит ауылда әсәйем кеүектәр байтаҡ. Китапхана мөдире лә ауыл халҡының уҡыуға әүәҫлеген телгә алғаны бар.Ә беҙ, халыҡ китап уҡымай, тибеҙ. Кем шулай тип әйтә, ул үҙе уҡымайҙыр ул. Һәм үҙен ниндәйҙер кимәлдә аҡлар өсөн шул фекерҙе таралыр.

Яңыраҡ бер еңгә менән әңгәмәләшеп ултырырға форсат тейгәйне. Ул иһә ҡалала башҡорт баҫмаларының, китаптарының һатыуҙа булмауына зарланып ултырғайны. Ысынлап та, юҡ бит улар. Гәзит һатҡан бер нисә нөктәне ҡарап сыҡтым, рус телендә ниндәй генә баҫмалар юҡ, араһында район гәзиттәренән башҡа башҡорт телендә бүтән баҫмаларҙы осратырмын тимә. Яҙҙырып алһын, тиер кемдер. Был да дөрөҫ. Әммә тормошта барыһына ла өлгөрөп булмай, төрлө саҡ була. Кешегә һайлау мөмкинлеге бирергә кәрәк. Теләһә, яҙҙырып алһын, теләһә, һатып алһын. Ана, әсәйем "Аҙна" гәзитен аҙна һайын һатып ала. Ә ниңә башҡа башҡорт баҫмаларын шулай һатыуға сығармаҫҡа? "Ағиҙел", "Шоңҡар", "Тамаша", Ватандаш", "Башҡортостан ҡыҙы" журналдары, "Йәшлек", "Башҡортостан", "Киске Өфө" гәзиттәре һ.б. һатыуҙа мотлаҡ булырға тейеш! Барыһына ла бер юлы яҙылыу ҡиммәткә төшә, шуға, ғәҙәттә, кеше берике гәзиткә яҙыла торған. Ә бит айырым дананы уның һатып алырға мөмкинлеге бар. Баҫмаларҙы нәшер итеүселәр быны иҫәпкә алырға тейеш, минеңсә.

Икенсе мине борсоған мәсьәлә, ул башҡортса сыҡҡан китаптарҙың республика ҡала-район үҙәктәрендә юҡ кимәлдә генә булыуы. Ишембай ҡалаһында, мәҫәлән, башҡортса китаптар һатылған бер генә нөктә лә тапманым. Бәлки, мин белмәгән шундай кибет барҙыр? Әммә мин белгән, бар заман талаптарына яуап биргән үҙе күркәм, үҙе ҙур магазин ҡала майҙаны эргәһендә урынлашҡан. Ундағы ассортименттың байлығына иҫ китерлек. Әммә бер генә башҡортса әҙәбиәт тә юҡ. Һатыусыларҙан, ниңә милли телдә әҙәбиәт юҡ, тип һорай ҡуйҙым. Был Мәскәү нәшриәте магазины, ул сығарған китаптар ғына һатыла, тинеләр миңә. Бына шул. Ә беҙҙең башҡорт уҡыусыһы туған телендә китаптарҙы һатып алыуҙан мәхрүм.Мәскәүҙәр асҡан икән магазинды, ниңә уларға "Бер мөйөшөгөҙҙә Башҡортостанда нәшер ителгән китаптар ҙа һатылһын", тигән талап ҡуймаҫҡа?

Тормош иптәшем Салауат районынан. Мин эшләп киткән "Йүрүҙән" редакцияһы бинаһында, мәҫәлән, "Китап" нәшриәтенең китаптары һатыла. Хаҡтары ла юғары түгел. Әле яңыраҡ шунда булғайным. Бер йәш ҡатындың авторҙарын маҡтай-маҡтай китап алғанына шаһит булдым. Һатыусы, балаларға матур китаптар бар, тигәс, ҡалған аҡсаһына улдарына башҡортса шиғырҙар йыйынтығы ла һатып алды. Хәҙер нәшриәтебеҙ китаптарҙы шул хәтлем матур, сағыу, юғары сифатлы итеп сығара. Халыҡ-ара күргәҙмәләрҙә улар лайыҡлы урындар яулай. Ә ниңә халыҡҡа барып етмәй һуң ул улар? Ни сәбәпле нәшриәт һәр районда үҙенең филиалдарын булдырмай, кәмендә эшҡыуарҙарҙы был эшкә йәлеп итмәй? Китап авторҙары менән осрашыуҙар, презентациялар үткәрелмәй? Бит күптәр авторҙың автографы менән китап һатып алыуға шат булыр ине. Халыҡ менән, китап уҡыусы менән шундай бәйләнеш мотлаҡ тергеҙелергә тейеш.

**Шулай итеп, бөгөн халыҡ китап уҡымай, гәзит алдырмай, тигән фекер һис ысынбарлыҡҡа тап килмәй икәнен раҫларға теләнем. Киреһенсә, нәшер итеүселәр үҙҙәре беҙгә яҡын булыу өсөн бар мөмкинлектәрҙе лә ҡулланмай, тип һығымта яһарға мөмкин. Ләкин киләсәктә был хәл үҙгәрер, тигән өмөттә ҡалам.**

**Гөлшат ХАЖИЕВА-НУРДӘҮЛӘТОВА.**
**Ишембай ҡалаһы.**

✓ *Хөрт әҫәр хаҡында бөтөнләй өндәшмәү, телгә алмау, күрмәү шулай уҡ баһа була алалыр. Матбуғат баҫмалары ла бындай сейле-бешле әҫәрҙәргә ҡарата талапсанлыҡты көсәйтһен ине.*



КИТАБЕННАС

# ӨС ЙӨҘ ҘӘ ӨС ХӘҘИС

**Рауил БИКБАЕВ,
Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

122
Мин батшаларҙың батшаһы
Тип лаф ора бер ҡуҡыр.
Аллаһ алдында бынан да
Меҫкенерәге юҡтыр.

123
Һаҡланығыҙ көнсөллөктән!
Унан да яманы юҡ.
Көнсөллөк ул, әйтерһең дә,
Донъяны ялмаған ут.

124
Хурламағыҙ мәрхүмдәрҙе,
Өндәре килмәҫ гүрҙән.
Алырын улар алғандар,
Күререн инде күргән.

125
Шәһиттең барса гонаһы бөтәләр,
Түләнмәгән бурысынан бүтәне.

126
Кескәй гонаһ ҡабатланһа туҡтамаҫтан,
Кескәйҙән ул әйләнәсәк ҙур гонаһҡа.

127
Бар яҡшылыҡ ерҙә
Саҙаҡа - хәйерҙән.

128
Сабыйҙы ҡыуандырғандың
Гонаһтары бөтәләр,
Әлләнисә аллаларға
Табынғандан бүтәне.

129
Иманында уҡ инсандың
Оялсанлыҡ.

130
Ояла белмәгән инана белмәй,
Иманы булмаған йөннәткә инмәй.

131
Дауаланмайынса ҡалмағыҙ,
Эй, әҙәм балалары!
Аллаһ ауырыуға ҡаршы
Яратҡан дауаларын.

132
Иртән төштәр күреп йоҡлау
Бик рәхәт тә! -
Тик ул рәхәт мәхрүм итер
Бәрәкәттән.

133
Ғилем - бикле хазиналыр.
Асҡысы бына ҡайҙа:
Иң дөрөҫ яуап табыуҙа
Иң ауыр һорауҙарға.

134
Өс бәләләр һәләкәткә һеҙҙе илтер:
Һаранлыҡтыр, мәкер менән мин-минлектер.

135
Кем дә кем асыулы һүҙен
Әйтмәйсә йота ала,
Шунан да затлы шәрбәтте
Эскәндәр юҡ донъяла.

136
Дошманыңды ҡырмыҫҡалай тимә,
Оло филгә тиңлә.

137
Хатта һыу ҙа серем итеп алыусан,
Тик дошманың серем итмәҫ һис ҡасан.

138
Кемдең ғүмере оҙондор,
Эштәре аламалыр,
Ул бәндә ил хәтерендә
Яманат менән ҡалыр.

139
Ярҙам иткәндең,
Биргәндең ҡулы
Алғандыҡынан
Юғары булыр.

**(Дауамы бар).**

ШАҢДАУ



# "НИ МӘҒӘНӘ ДӨРӨҪ ҺҮҘ ӘЙТЕҮҘӘН,

## дөрөҫ һүҙең әгәр һуңлаһа?"

### ВАҠЫТЛЫ ӘЙТЕЛГӘН ФЕКЕРҘӘР

**Күренекле яҙыусы Ғәлим Хисамов менән билдәле шағир, филология фәндәре докторы Фәнил Күзбәковтың "Киске Өфө" гәзитендәге әңгәмәһендә яңғыраған фекерҙәргә ҡарата мин дә үҙемдең дә ҡайһы бер уйҙарымды яҙып ебәрергә булдым. Әҙәбиәттең бөгөнгө торошо һәм киләсәк яҙмышы хаҡында ысын күңелдән тәрән борсолоу, йән һыҙланыуы менән һуғарылған был сығыш, моғайын, бер кемде лә битараф ҡалдырмағандыр.**

Әңгәмәлә "Кешене ылыҡтырырҙай, дәртләндерерҙәй ниндәйҙер идеяларҙың булыуы кәрәк. Әҙәбиәт ошондай идеяларҙы, ошондай рухты, үҙенең артынан башҡаларҙы әйҙәрҙәй шәхестәрҙе алғы планға сығарырға бурыслы" тигән фекер әйтелгән. Хаҡ һүҙҙәр. Әмин ниндәй рухи ҡиммәттәргә өҫтөнлөк бирелеүе әҙәбиәт, яҙыусылар тарафынан ғына түгел, ә тәү сиратта власть, дәүләт органдары тарафынан да эшләнергә, алғы планға сығарылырға тейеш, тигәндә өҫтәмәксемен. Мәҫәлән, һуғыштан һуңғы осорҙа "ил халҡын алға әйҙәрлек идея"ны шул ваҡыттағы власть, компартия байраҡ итеп күтәргән, шуны пропагандалауҙы әҙәбиәттән талап иткән, был, әлбиттә, ауырлыҡтарҙы еңеп сығыуҙа мөһим роль уйнаған.

Ә бөгөн нимә? Халыҡта өмөт уятырҙай, рухын тоҡандырырҙай, йәш быуындарҙы тәрбиәләрҙәй берҙәм милли сәйәсәт, идеология булмауының бәкәлгә һуғыуы хаҡында Үҙәк телевидение каналдарында Рәсәй яҙыусылары, кинорежиссерҙары һ.б. тарафынан әленән-әле әйтелә килә. Мәктәптәрҙә, вуздарҙа әҙәбиәт, тарих фәндәрен өйрәнеү өсөн бүленгән сәғәттәрҙең үтә ныҡ ҡыҫҡартылыуы хаҡында ла уҡытыусылар, мәғариф ветерандары, сәнғәт әһелдәре оло хәүеф белдерә. Сөнки ошоғаса нәҡ әҙәбиәт, тарих дәрестәре уҡыусыларҙы рухы бай шәхес, гражданин итеп тәрбиәләүҙә иң ҙур өлөш индереүсе булып һанала ине. Ә бөгөн иһә был фәндәрҙең бәҫе, ҡиммәте мәғариф буйынса яңы реформаларҙа һаңға һуғылмай. Ә бит совет осоронда мәктәп, вуздарҙа әҙәбиәт, тарих уҡытыуға бик ҙур әһәмиәт бирелде, сөнки был фәндәр берҙәм дәүләт идеологияһын пропагандалауҙа иҫ киткес ҙур роль уйнаны. Был хаҡта онотоп, бик ҙур хилафлыҡ эшләнә.

Әңгәмәлә ҡатнашыусыларҙың, бөгөнгө заманда әҙипмен тигән әҙип фәйләсүф-сәйәсмән булараҡ та сығыш яһарға тейеш, тигән фекерҙәрен дә хуплайым. 90-сы йылдар башында Динис Бүләков "Ғүмер бер генә", "Туҙҙырылған тамуҡ" романдарында нәҡ ана шул фәйләсүф-сәйәсмән булып сығыш яһағайны, шуға ла уның был романдары йәмғәтселектә иҫ киткес оло резонанс алғайны. Шунан һуң бушлыҡ барлыҡҡа килде. Бөгөнгө тормошобоҙҙа тулып ятҡан бихисап социаль, рухи-әхлаҡи проблемаларҙы яҙыусылар үҙ әҫәрҙәрендә яҡтырта торалар ул. Әммә йыш ҡына уларҙың геройҙары сәйәси тормош менән бик аҙ йәшәйҙәр, йә бөтөнләй йәшәмәйҙәр, бик тар мөхиттә генә хәрәкәт итәләр, уларҙы ауыҙ тултырып көрәшсе шәхестәр, өлгәлә замандаштар тип әйтеүе уңайһыҙ.

Тәнҡитте күтәрә алмау хаҡында ла әйтелә әлеге әңгәмәлә. Был йәмһеҙ күренеш көсәйгәндән-көсәйә бара. Хөрт әҫәр хаҡында бөтөнләй өндәшмәү, телгә алмау, күрмәү шулай уҡ баһа була алалыр. Матбуғат баҫмалары ла бындай сейле-бешле әҫәрҙәргә ҡарата талапсанлыҡты көсәйтһен ине. Ә инде теге йә был әҫәрҙе, яҙыусы ижадын самаһы онотоп, аштырып-шаштырып маҡтаған "тәнҡит" мәҡәләләренең бәҫе, ҡиммәте булмауы, авторына ҡарата йәмәғәтселектә билдәле ҡараш тыуыуы хаҡында әйтеп тормаҫҡа ла була.

**Гөлфирә ГӘРӘЕВА,
филология фәндәре кандидаты.**

### ӘҘӘБИӘТ РУХИ ҮҘӘКМЕ?

**Яҙыусылар Ғәлим Хисамов менән Фәнил Күзбәковтың әңгәмәһендә ҡуйылған "Ни өсөн милли әҙәбиәт милләттең төп рухи үҙәгенә әйләнә алмай, идеологик трибуна кимәленә күтәрелмәй?" тигән һорауға яуап эҙләп ҡарайыҡ.**

Ни өсөн тап әҙәбиәт беҙҙең рухи ҡәғбәбеҙ булырға тейеш әле, йәғни, артығырағын таптырмайбыҙмы унан? Дөрөҫ, әҙәбиәт дөйөм кешелек ҡиммәттәрен бар итеүсе образ төшөнсәһен булдырыуҙа беренсел булып тора, ни тиһәң дә, иң тәүҙә һүҙ булған бит. Әҙәби әҫәрҙәр, ниндәй генә рәүештә тыумаһын (ғибрәтле миҫалдарҙа ла тәрбиәләп була), ана шул үҫеш өсөн кәрәкле сифаттарҙы алдын итеп ҡуйыу мәҡсатын ҡыуа ла инде. Шуға ла был һорауҙы ҡайҙалыр юлға сыҡҡан сәфәрсенең: "Дөрөҫ бараммы әле?" - тип үҙ-үҙенә төбәшеүе тип аңларға кәрәктер. Сөнки төп йүнәлеште белә ул, ә янда һорашыр кеше юҡ. Булһа ла, үҙе лә шул сәфәрсе хәлендә. Заманында мин юлға сығырға торған кешенең уйланыуҙары рәүешендә "Юл" тигән уйҙырмамә яҙғайным. Юлға сығыр алдынан төйөнсөгөнә ниҙәр төйнәргә - йәйәүлегә янсыҡ та ауыр бит, тигән фәлсәфәгә ҡоролған ул.

Шунан сығып, әлеге һорау аҫтында ятҡан тағы бер һорау: әҙәбиәт шул юл өйрәтеүсе, күрһәтеүсе ҡәғбә-маяҡмы, әллә төйөнсөктә төйнәп, өгөт-нәсихәттәрен бирреп оҙатып ҡалыусымы? Әлбиттә, оҙатыусы! Тотош милләттең алда көтәсәктәрен бер кем дә күрәҙәләй алмай, төрлө осраҡтарҙа кәрәк буласаҡ сифаттар тәрбиәләү иһә - фарыз. Тик бөгөн йәшәгән кешегә һин иртәгә уны ни көтөүе тураһында нотоҡ уҡый башлаһаң, үҙең ахмаҡ буласаҡһың. Бәлки, әлеге ваҡытта аҡыллы баш һымаҡ та күренерһең, ул саҡта һине иртәгә алйотҡа сығарасаҡтар. Әкиәттәрҙе иҫләйек әле: "Уңға китһәң - уңырһың, һулға китһәң - туңырһың", тигән һайлау торғанда герой һулға борола лаһа. Тимәк, өйрәтеүгә барыбер ышанмай халыҡ, үҙ юлын ҡайыра.

Әҙәбиәттең үҙенең төп ҡоралы булған образды күҙ алдына килтереп ҡараһаҡ, уның бурысы - юлға йыйнау, оҙайлы сәфәр барышында оҙатып барыусы кәрәк-яраҡтар менән тәьмин итеү. Әммә ул бер нисек тә юл күрһәтеүсе ролен башҡара алмай. Халҡыбыҙ тарихында ундай "сусанин"дарҙы бихисап табырға мөмкин, юғиһә. Хәйер, алға барыу, юл образдары кешенең тәбиғәттән, тыумыштан гел хәрәкәтсән булыуы арҡаһында ингәнме беҙҙең йәшәйешкә? Бәлки, беҙҙең көнитмеште бер урында тороу тип алырға ла, башҡа бар булмыштың - ваҡыттың, яңылыҡтарҙың, ваҡиғаларҙың - унда инеп-сығып алмашынып ҡына тороуы тип ҡарарғалыр? Хәтерләйек әле Рәми Ғариповты:" Ҡолаҡ остарынан сай һыҙғырып, елдәй елеп үтә замандар..." Ул осраҡта юлбашсы-идеолог-маяҡтар ҙа кәрәкмәҫ ине, кеше психологияһын өйрәнгән әҙәбиәт ("кеше күңелдәренең инженерияһы") әлеге йәшәйештә беҙгә нисек үҙ-ара мөнәсәбәттәр ҡороу мәсьәләһе өҫтөндә баш ватыр ине. Ни генә тимә, беҙ идеологияны һәм трибунаны - алға ҡарау, киләсәккә юл күрһәтеү тип ҡабул итеп өйрәнгәнбеҙ. Тик шуныһы ла бар бит әле: юғары рухлы идеология әләмен күтәреп, киләсәкте ҡайғыртып ултырыуы шәп нәмә, әлбиттә, тик иртәгә шуның өсөн үҙендә килер быуын ҡәһәрләп, үҙенә һәм улар

өсөн үҙең (бөгөн!) ҡороп ҡуйған һәйкәлдәрҙе онтап ташламаҫ тимә.

Һорауға яуап биреп ҡарайыҡ. Әҙәбиәт рухи үҙәк була алмай, ул идеологик трибуна ла түгел. Ул кешене ғәләмәт ҙур йәмғиәттә йәшәргә өйрәтеүсе сараларҙың береһе генә. Шулай булмаһа, бөтөнләй уҡыу-яҙыуҙы ла, мәғрифәтте лә белмәгән йәмғиәттәр ошоғаса нисек йәшәгән булыр ине? Килешерһегеҙ: икенсе илде ҡол итергә тип һуғыш башлаған дәүләт тә үҙ эштәренә әллә ниндәй тәрән идеологик һылтанмалар таба ала. Һәм ул юлдарҙың береһе итеп ул мотлаҡ әҙәбиәтте лә һайлаясаҡ. Ана шул юлға баҫҡан яҙыусылар, шағирҙар барлыҡҡа килгәндә, әҙәбиәт халыҡтың, дәүләттең идеологик нигеҙен тәшкил итеүгә дәғүә итә башлай, һәм быны бер яҡшы яғы ла юҡ. Киләсәктә белә алмаһаҡ та, тарихты яҡшы беләбеҙ беҙ: уны байҡап ҡараһағыҙ, әҙәбиәтселәрҙе идеологик фронтта файҙаланыу (йәғни дәүләт сәйәсәте мәнфәғәтендә) миҫалдарын бихисап табырһығыҙ, тик уларҙың береһе лә әҙәбиәт (уның тура мәғәнәһендә) файҙаһына булмаған. Һис юғы, атылып йә дарҙа үлгәндәр, йә иһә "ни аллаға, ни муллаға" булып ҡалыуға дусар ителгәндәр.

**Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ.**

## МИЛЛӘТ ЙӨҘӨН АҒАРТЫУСЫ... ИЛАҺИӘТ УЛ ӘҘӘБИӘТ

**Күренекле яҙыусы Ғәлим Хисамов менән билдәле шағир, филология фәндәре докторы Фәнил Күзбәковтың "Киске Өфө"ләге әңгәмәһендә "Ни өсөн хәҙерге заманда милли әҙәбиәт милләттең төп идеологик трибунаһы кимәленә күтәрелә, рух үҙәгенә әүерелә алмай?" тигән һорау ҡуйыла. Ысынлап та, һорау бик үткер һәм киҫкен. Мине бигерәк тә "рухи үҙәк" тигән һүҙҙәр уйланырға мәжбүр итте.**

Рух - ғәрәп һүҙе. "Йән" тигән мәғәнәлә. Ер ҙә үҙ рухы менән яралған. Изге сәфәрен үҙ рухы менән ҡыла бирә. Кеше Ер тупрағына үҙ рухы менән баҫа, үҙ рухы менән мөкиббән китеп хәрәкәт итә. Бала үҙ заманына оҡшап тыуғандай, тәрлө тарихи осорҙа рух яңы зауыҡ, яңы зан, яңы рухиәт менән илаһилаштырыла. Ошо бай, матур, гүзәл, нәфис тәбиғәтле Башҡортостан ерендә тыуған мәшһүр яҙыусы Ғәлимйән Ибраһимов 1921 йылда (аслыҡ йылында) яҙған "Ҡыҙыл сәскәләр" повесын: "Иҫке Русия мәмләкәтендә, бөйөк Башҡортостан тупрағында..." тип башлай. Бөйөк Башҡортостан! Ниндәй аң-аҡыл, хис-тойғо доғаһы был? Ер шары мөхәббәт өрфиәһе менән генә түгел, сағыштырыу пәрҙәһе менән дә төрөнгән бит ул. Бөйөк яҙыусының аң-аҡылы ла, рухы ла, хис-тойғолары ла бөйөк була. Ғәлимйән Ибраһимов сағыштырыуҙар менән Аллаһы Тәғәлә ҡушҡанса оҫта эш итә белгән. Быға күп телдәрҙе өйрәнеү, күп мәмләкәттәрҙәге көнкүреш, йәшәйеш, үҫеште, уларҙың рухи хазиналарын, инсанлыҡ иманын, һулыш алыу һауаһын һәм башҡа ғүмер итеү ыныймәрйендәрен сағыштырып ҡарау ярҙам иткән.

Бөйөк яҙыусының рухи иманына мин дә йөрәк иманым менән ҡушыла алам. Бөйөк Ватан һуғышында миңә Украина, Молдавия, Польша, Румыния, Чехословакия, Венгрия, Германия ерҙәрен фашизм ҡоллоғонан азат итеү көрәшендә ҡатнашырға тура килде. Һуғыштан һуң да ике йыл буйы, төрлө хәрби вазифалар үтәй-үтәй, ул илдәрҙе ҡыҙырып йөрөлдө. Һәр ваҡыт ул илдәрҙе үҙ Башҡортостаным менән сағыштырып ҡарарға ғәҙәтләнеп киттем. Сағыштырыу хәҙер башҡа төҫ алды. Иманым камил, Башҡортостан "бөйөк" тигән данды яулаясаҡ. Сөнки быны өсөн уның бөтөн мөмкинлектәре бар. Ул мөмкинлектәр баҫылып сыҡҡан туғыҙ романымда, унлап повесымда, сәхнә әҫәрҙәремдә, публицистик, педагогик яҙмаларымда, фәнни хеҙмәттәремдә сағылдырыла. Башҡортостандың ер ҡуйынындағы, ер өҫтөндәге байлығын иҫкә алып, Хоҙай Тәғәлә уның бөйөклөгө өсөн изге доғаһын ҡылған. Хоҙай фарманын үтәмәү - ҙур гонаһ. Был гонаһ халыҡтың телен дә киҫә, бөтә ҡөҙрәт-шәфәғәтлелеген дә юҡҡа сығара. Уның шулай икәнлеген аңлау өсөн Помпей трагедияһын иҫкә алыу ҙа етә.

Аҡ менән ҡараның киҫкен көрәше осоронда йәшәйбеҙ. Аҡлыҡ еңергә тейеш. Бының өсөн аң-аҡыл, хис-тойғо рухындағы ҡаралыҡты нығ ҡаҡҡыларға кәрәк. Аҡ рух тантана итһен! Әҙәбиәт - милләт йөҙөн ағарта торған илаһиәт ул. Быны ни өсөн үҙәктә Алла рухы балҡырға тейеш. Бәғзе шағир, ҡоролоҡта көйгән үләндәй, ауырлыҡтан ҡурҡыпшөрләп биҙалана, илай, йәш түгә. Сәхнә сәнғәтенә халыҡтың һыуына башлауы ла күңелде ҡыра. Дөрөҫ, Н. Асанбаевтың Зәки Вәлиди тураһындағы әҫәре һыуынып барған театр сәнғәтенә, Хоҙайға шөкөр, яңы ялҡын өҫтәне.

Ҡайһы бер прозаик, сатнап торған ҡояшлы матур йәйге көндә бысраҡ әҙләгән алабарман малайҙай, әҫәре сюжетында бер-бер артлы ҡара бесәйҙәр йүгертергә тотона. Бындайҙар ғәскәре сафына, әлбиттә, теләһә кемде баҫтырырға ашыҡмайым. Осоробоҙҙоң күренекле прозаигы Әмир Әминевтың повесть, хикәйәләре миңә тормошсанлығы, тел оҫталығы, күңелдә яҡшы тәьҫир ҡалдыра алыу сифаты менән нығ оҡшай. "Койка" хикәйәһендәге Мәғәфүр, "Хөкөм" хикәйәһендәге Илгиз, "Танкист" повесындағы Тимерғәле образдары кешелеклелек, намыҫлылыҡ, башҡаларға ынғай йоғонто яһай торған ғәҙәттәре булыу яғынан йөрәктә матур хис-тойғо тоҡандыра. Был әҫәрҙәрҙе мәктәп программаһына индерергә кәрәк ине. Уҡыусыларҙың эстетик зауығын матурлауға нығ ярҙам итер ине улар.

Ике ҡәләм оҫтаһының "рух үҙәге" тураһында әңгәмәләшеүе бик урынлы һәм ваҡытлы булды. Шуға күрә ул яҡшы тәьҫир ҡалдыра. Әңгәмәләшеү үҙәгенә күп проблемалар килеп бәләмләнә. Уларҙың һәр береһенә ҡарата ниндәйҙер фекер әйтке килә. Ләкин "сама" тигән ғәҙеллек батшаһы ла бар бит әле. Ҡыҫҡартып, һүҙ аҙағында шуны ғына әйтәйем: аң-аҡыл, хис-тойғо рухы мәмләкәтебеҙҙең илаһиәте була алһын. Әйткәнем фәрештәнең "амин" тигән сағына тура килһен.

**Суфиян ПОВАРИСОВ, филология фәндәре докторы, профессор, яҙыусы.**

*ЗАУЫҠ*

*Тимер НИӘТШИН*

# Әсәлек

## (Поэма)

**Дала яна**

Ҡоро дала яна. Ут тулҡыны
Ялмап ала кипкән үләнде.
Туйыу белмәҫ ялҡын йота ғына
Тамыр йәйгән, шытҡан, үлгәнде.

Ул ялмаған дала геүләп тора,
Күҙҙе быуып төтөн тарала.
Эй, Хоҙайым, туҡтат был ялҡынды,
Далала бит тормош ярала.

Егерме көн элек моңға сумып,
Сикһеҙ иркенлектән ашҡынып,
Инә тартай (йәп-йәш бер буҙәнә)
Дала буйлап осто талпынып.

Төнгө күктә йондоҙ һанай-һанай
Көтөп алғас ете балаһын,
Тәүге тапҡыр әсә булған тартай
Моңға күмде йәшел далаһын.

Бөгөн килеп дала ут донъяһы,
Бөгөн дала үлем усағы.
Йәш буҙәнә балаларын ҡаплай
Тәне менән, йәйеп ҡосағын.

Тартай әсә тәүҙә үҙе яна,
Ҡанат йәйеп ята күмере.
Әсәлеккә һәйкәл булып ҡалҡа
Йәш тартайҙың ҡыҫҡа ғүмере.

**Бала табыу йорто**

Яҙғы таңды әсе тауыш өҙҙө,
Яңы тыуған сабый тауышы.
Ваҡыт бөгөн яңы һулыш алды,
Төн үҙәге таңға ауыша.

Кендек киҫек. Әсә ҡуйынына
Мышнай-мышнай сабый һыйынған.
Ғүмер тигән оло туйҙы ҡотлап
Фәрештәләр әллә йыйылған.

Фәрештәләр бар ҙа, ә атай юҡ,
Ғәмһеҙ атай эҙһеҙ юғалған.
Сабый бала һалҡын был донъяға
Бер яңғыҙы ғына юл алған.

Әсә ҡуйыны ла ҡайнар түгел,
Һалҡын бөгөн кеше ҡуйыны.
Йәш әсә лә ғәмһеҙ генә баҫа
Бөйөк сәхнә - тормош туйына.

Ут ялмаған дала иҫбат итә
Әсәлекте ҡошсоҡ тартайҙа.
Ә был әсә тәүге бала табып,
Әйтерһең дә, үлгән, ҡартайған.

Үлем төҫө ҡатҡан ҡарашында,
Боҙлоҡ иле һалҡын ҡосағы.
Булған микән уның бала сағы,
Булған микән хисле ҡыҙ сағы?

Атай ҙа юҡ етем сабый өсөн,
Әсәһе лә унан баш тарта.
Кешенән көл һин, буҙәнә, бөгөн,
Кешелектән алыҫ ҡас, тартай!

**Ҡала урамы**

Йондоҙло төн. Ҡала ҡайнап тора,
Төнгө тормош һуҙа үҙ көйөн.
Хистәр ташып торған был ғәләмәт
Башваҡыстай тығыҙ бер төйөн.

Урам киҫелеше: йәшел-ҡыҙыл
Алмашынып тора, ут яна.
Ҡыҙыл икән, туҡта, ҡабаланма,
Йәшел икән, ашыҡ, үт ана.

Утҡа осҡан төнгө күбәләктәй
Баҫып тора ҡупшы "түтәйҙәр".
Урам түгел, яҙмыш киҫелеше,
Ҡыҙыл утты урап үтмәйҙәр.

Йәшел утҡа әйҙәүселәр һирәк,
Ҡыҙыл утта дала төҫө юҡ.
Ҡупшы ҡыҙҙар һата Мөхәббәтен,
Әйтерһең дә, башҡа көсө юҡ.

Хаҡ Тәғәләм, ниңә күрмәйһең һуң
Яҙмыштары утта янғанын?
Ниңә тоймайҙар һуң йәшел дала
Сихри бала саҡта ҡалғанын?

Асфальт тишеп тамыр йәйеүҙәре
Үтә ауыр бөгөн ҡалала.
Әллә шуға әсә булыр ҡыҙҙар
Ҡыҙыл киҫелештә ҡалалар.

**Үтенес**

Гонаһ ҡылыу кеше есеме, тип
Самаларҙан сыҡма, Яңы йыл!
Гонаһ ҡылып кеше күптән туйған,
Кешелеккә кәрәк яңы юл.

Бишек йырын ғәзиз әсәй йырлай,
Йыназаһын уҡый муллалар.
Ғүмер тигән ошо арауыҡҡа
Үкенестәр ниңә тулалар?

Кеше күҙе ергә төбәлгән дә,
Баш ҡалҡытып күрмәй күктәрҙе.
Ниңә әле изге әсәлектән
Мәхрүм итә заман күптәрҙе?

Кем ҡурсалай бөгөн кешеләрҙе,
Кем ҡулында кеше асылы?
Ниңә әле сабыйҙарҙың теле
Уҫал һүҙҙәр менән асыла?

Йыл исеме, әйҙә, төрлө булһын,
Изге, ғәҙел булһын есеме.
Әсә ҡуйынында бала булһа,
Еңә алмай ваҡыт кешене.

**Мин ышанам**

Минең алда ятҡан ап-аҡ ҡағыҙ
Һүҙҙәр көрәшеүсе майҙандыр.
Был майҙанға ярһып, йөрәкһенеп
Килеп еткән һүҙҙәр ҡайҙандыр?

Береһе - һинеке, көтмәгәндә мине,
Мөхәббәтһеҙ, тинең асыуҙан.
Мөхәббәтем шуға майҙан тота,
Ул бит өҫтөн ҡурҡып ҡасыуҙан.

Был көрәштә ғәҙеллекте яҡлап
Хөкөм сығарыусы кем булыр?
Ҡайһы батыр еңеп өҫкә сығыр,
Еңелеү хурлығынан кем һулыр?

Мөхәббәт бит Йыһан төшөнсәһе,
Әсәлекте тоткан ҡояш ул.
Әммә Йыһан биргән ҙур бүләкте
Һәр кем үҙенсәрәк тоя шул.

Һиңә булған Мөхәббәтем бөгөн
Балаларҙа асыҡ сағыла.
Ейәнсәрҙәр бер йылмайҙы икән,
Ерҙә биҙәп нурҙар ағыла.

Мин ышанам, наҙлы, нурлы әсә
Мөхәббәткә һыуһап йәшәмәҫ.
Күк күкрәне икән, ямғыр яуыр,
Дым килтермәй йәшен йәшнәмәҫ.

Мин ышанам, бөгөн мин еңеүсе,
Мөхәббәтем тере, көслө лә.
Ул бит яҙҙар һайын беҙгә килгән
Шаян сабый - Тамсы төҫлө лә.

ИНТЕРНЕТТАН



# МУНСА... һағышыңды ла алып ҡала

■ Йәшелсә һәм емеш-еләкте күп ашаған үсмерҙәр араһында психик ауырыуҙар һирәгерәк осрай. Ә ит, тәм-том, аҡ икмәк ашаған, татлы газлы һыу эскән балалар араһында агрессия һәм депрессия билдәләре йышыраҡ күҙәтелә икән. 1985 йылдан алып дөрөҫ туҡланмау һөҙөмтәһендә артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусы балалар һәм үсмерҙәр һаны өс тапҡырға артҡан. Бынан тыш, пассив йәшәү рәүеше алып барған балалар һаны ла йылдан йыл арта бара. Дөрөҫ туҡланыу һәм йәшәү рәүеше алып барыу менән киләсәк быуындың физик ҡына түгел, ә психик һаулығы ла туранан-тура бәйле икәнен был тикшеренеүҙәр тағы ла бер ҡат раҫлай.

■ Борондан мунса таҙарыныу ғына түгел, ә ял итеү урыны ла һанала. Мунса арыуҙы ла, һағышты ла йыуып төшөрә. Иң мөһиме, мунса ингәндә ҡабаланмаҫҡа һәм кәрәгенсә тынысланып, тәнде йомшартып, проблемаларыңды онотоп торорға кәрәк. Шулай итмәһән, уның файҙаһы булмаясаҡ. Мунсала тән температураһы 38-39 градусҡа тиклем күтәрелә, һөҙөмтәлә әселәндереү процесы, матдәләр алышыныу көсәйә. Күпләп тир бүленеп сығыуы организмды шлактарҙан таҙарта, бөйөр эшен еңеләйтә. Юғары температура йоғонтоһонда тире капиллярҙары ҡан менән тула, был эске ағзаларҙа ҡан йөрөшө туктауын булдырмай һәм ҡан әйләнеше яҡшыра.

■ Табиптар асығып киткән саҡта шоколад йәиһә крекер ҡабып ҡуйыуҙан тыйылырға кәңәш итә, сөнки ябай углеводтар ҡандағы глюкоза кимәлен ҡапыл ғына күтәрә, әммә туйыу тойғоһо оҙаҡҡа бармаясаҡ. Шуға ла мизгелдәр алышынған мәлдә шыттырылған бойҙай, арпа, ҡуҙаҡлылар салаты ашау күпкә файҙалыраҡ. Әүҙем шытыу осоронда (был бер тәүлек самаһы дауам итә) уларҙа үҙенсәлекле фермент бүленеп сыға. Был фермент шытҡан бойҙай йәки арпа составында булған, мускулдарҙы нығытыусы, нервы һәм йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы эшен яйға һалыусы Е һәм В төркөмө витаминдарын, хром, литий һәм калийҙы яҡшыраҡ үҙләштерергә ярҙам итә.

■ Кеше ологайған һайын һөйәктәр кальций етешмәү арҡаһында муртҡа әйләнә, йомшара башлай. Күбеһенсә уның менән ҡатын-ҡыҙҙар яфалана, сөнки улар 35 йәштән һуң йылына һөйәк массаһының яҡынса 1 процентын юғалта. Шуға ла остеопороз кеүек мәкерле сир барлыҡҡа килмәһен өсөн һөт аҙыҡтарын йыш ҡулланырға кәрәк (татлы йогурттар һәм туңдырма һаналмай). Өлкән кешегә көнөнә 1,2 г тирәһе кальций талап ителә. Бер стакан һөт - был норманың дүрттән бер өлөшө, әгәр ҙә һөт яратмайһығыҙ икән, уны ҡатыҡ, сыр йәки эремсек менән алыштыра алаһығыҙ. Кальций сәтләүектәрҙә, кәнбағышта, минераль һыуҙа, балыҡта күп.

■ Британия социологтары, йылдан-йыл яңғыҙҙар һаны арта, тип борсола. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, яңғыҙлыҡ проблемаһы менән йәштәр һәм оло йәштәге кешеләр яфалана икән. Белгестәр әйтеүенсә, йәш саҡта кеше аҡса эшләү һәм башҡа матди байлыҡ туплауҙы ғаилә ҡороуҙан өҫтөн ҡуя һәм шуға ла үҙен яңғыҙ тоя. Шулай уҡ урта йәштәге парҙар араһында айырылышыуҙар ҙа арта бара, ти ғалимдар. Сағыштырмаса статистика күрһәтеүенсә, 40 йыл элек Британияла яңғыҙҙар һаны 125 мең тирәһе булһа, хәҙер был һан 400 меңгә еткән. Ошондай уҡ хәл үсешкән башҡа илдәрҙә лә күҙәтелә.

ӘЙТӘГҮР!

**"Кем иртәрәк ята һәм иртәрәк тора, шул сәләмәт, бай һәм аҡыллы булыр", - тигән ғалим, журналист Бенджамин Франклин. Мәҡәл-әйтемдәребеҙгә күҙ һалһаҡ, халҡыбыҙҙың да йоҡонан иртә тороуҙы хуплауын күрәбеҙ: "Иртә торһаң, ит бешә, һуң торһаң, бит бешә", "Иртә торған - уңған, һуң торған - бөлгән". Йоҡонан иртә тороусыларға беҙ, әлбиттә, һоҡланыу менән ҡарайбыҙ. Улар был матур ғәҙәткә күнекмәләр ярҙамында өйрәнгәнме? Әллә был кешегә тәбиғәттән һалынғанмы? Йоҡонан иртә тороуҙың ниндәй файҙаһы бар? Ошо турала йоҡонан иртә торорға ратыусыларҙың үҙҙәренән һорайыҡ.**

# ОҘАҠ ЙӘШӘГЕҢ КИЛҺӘ...

## иртәрәк уян

**Артур НИҒМӘТОВ:** Иртәне сәғәт 5-тәрҙә торорға күнекмәләр ярҙамында өйрәндем. Хәҙер был матур бер ғәҙәтемә әйләнеп китте. Үкенескә күрә, иртә тороуҙың һаулығым өсөн ниндәй файҙаһы барлығы тураһында әлегә миңә бер нәмә лә билдәле түгел. Ләкин иртә торорға бүтән төрлө бер нисә сәбәп бар. Миңә иртән уянып, яңы көндө сәләмләү оҡшай. Мине, мәҫәлән, Далай Ламаның шундай һүҙҙәре дәртләндерә: "Һәр иртән торғас та, уйланығыҙ - миңә бөгөн уяныу бәхете тейҙе, мин йәшәйем, минең ҡиммәтле кешелек ғүмерем бар һәм мин уны бушҡа уҙғарырға йыйынмайым. Мин энергиямды үҙемде үҫтерергә, кешеләр файҙаһына яҡшы эштәр башҡарыуға арнаясаҡмын. Мин башҡалар тураһында тик яҡшы уйлаясаҡмын, үҙемә асыуланырға йәки кем тураһындалыр насар уйларға юл ҡуймаясаҡмын, кешеләргә ҡулымдан килгәнсе файҙалы булырға тырышасаҡмын". Минең элек көнөм шулай башлана ине: һуң уянам, йыбанып ятам да, ырғып тороп, ҡоторонған кеше кеүек эшкә әҙерләнә башлайым. Уның араһында балаларҙы балалар баҡсаһына, мәктәпкә илтеп ҡуйырға кәрәк. Ә эштә хәлһеҙ, үле кеше кеүек йөрөйөм, һәр ваҡ-төйәккә йәнем көйә. Иртә торорға ғәҙәтләнгәс, бөтөн нәмәгә өлгөрә башланым: эшем дә гөрләй, кәйефем дә һәйбәт, ғаилә ағзалары ла ҡәнәғәт.

**Зилә МӨҒИНОВА:** Ауылға ҡайтһам, иртә торам, иртә менән тәбиғәттең иҫ киткес мөғжизәләрен, ҡояш ҡалҡҡанын күҙәтергә яратам. Көн яйлап яҡтыра бара, төндөң күкһел төҫө әкренләп юғала бара, ҡояштың алтын нурҙары күк йөҙөндә уйнай башлай, тәбиғәт нурға ҡойона. Тик бына ҡалала ниңәлер был ғәҙәттәремде режимда тота алмайым, бәлки, бейек йорттар араһынан иртәнге матурлыҡты күҙәтә алмағанға шулайҙыр?

**Миңлегөл ЗАҺИҘУЛЛИНА:** Иртә тороуҙы егәрләләр, үҙ ғүмеренең ҡәҙерен белгәндәр, өлгөрҙәр генә булдыра ала, тип уйлайым. Күп йоҡларға ратыусылар үҙҙәренең ғүмерен ҡыҫҡарта тигәндә лә ишеткәнем бар. Үҙем дә иртә торорға тырышам. Иртә торһаң, күп нәмәгә өлгөрәһең, ҡабаланмайһың. Яҡшы итеп тамаҡ ялғарға ла ваҡыт ҡала, ә был бик мөһим. Иртән ашамаһаң, организм арый, талсыға, төшкә тиклем саҡ түҙәһең. Иртән ашамай, төшкөһөн бер юлы күп итеп ашаһаң, һаулығыңа зыян килтереүең мөмкин. Йоҡонан иртә тороу кәйефкә лә яҡшы тәьҫир итә: һин үҙ-үҙеңдән ҡәнәғәтһең, эштәрең дә теүәл үтәлә, күп нәмәгә өлгөрәһең, ашыҡмайһың. Мин дә иртә торорға тырышам һәм ваҡытымды бушҡа уҙмаһын өсөн көнөмдө алдан планлаштырып ҡуям. Балаларға төшкө аш әҙерләйем, күнекмәләр менән шөғөлләнәм, китаптар уҡыйым. Төшкә тиклем мин күптәр көнө буйы эшләп бөтә алмаған эштәремде тамамлап та ҡуям.

**Шамил:** Ҡалала йәшәгән һәм үҙенең шәхси машинаһында йөрөгән һәр кемде юлдағы тығындар йонсота бит инде. Мин нәҡ шул тығындарға эләкмәҫ өсөн генә иртәрәк торам һәм урамда машиналар һирәк ваҡытта эшкә сығып та китәм. Шулай итеп үҙемдең күп ваҡытымды экономиялайым, тығындарҙа ултырып нервымды ла бөтөрмәйем. Эшкә иртәрәк килеп, алдан өлгөрмәгән эштәремде тамамлайым йәки яңыларына тотонам. Йоҡонан иртә торорға өйрәнергә мөмкин. Күптәр йәш ваҡытта йоҡлап ҡалырға кәрәк, тип, ҡояш төшлөккә еткәнсе йоҡлауҙы хуп күрә. Ләкин мин быны дөрөҫ түгел, тип һанайым. Минеңсә, йәш саҡта, киреһенсә, эшләп ҡалырға кәрәк. Иртә торам тиһәң, һуңға тиклем телевизор ҡарарға йә компьютер артында ултырырға кәрәкмәй инде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Өләсәй-олатайҙар беҙҙе: "Таң менән ҡояш бәхет өләшә. Шул ваҡытта йоҡлап ҡалмағыҙ", - тип өйрәтә торғайны. Бәлки, хәҡиҡәт барҙыр был һүҙҙәрҙә. Ләкаптар юктан ғына бар булмай бит...**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ФАТИХАЛЫ ҒАИЛӘ УСАҒЫ -

## Ерҙәге ожмах сағылышы ул



### Нәфис затҡа яҡшы мөнәсәбәт

**Ныҡлы ғаилә төҙөр өсөн йәштәр нимәгә иғтибар итергә тейеш? Милләт үҙенең ир-егеттәре менән сәскә ата, ә ҡатын-ҡыҙҙар уны камиллыҡҡа еткерә икәнен белеү мөһим. Көслө затһыҙ үҫеш булмаған кеүек, нәфис затһыҙ ҙа сәскә атыу булмаясаҡ. Шуға күрә беҙ, дәүләт ҡатын-ҡыҙҙың камиллашыуына ҡарап үҫешә, тип әйтә алабыҙ. Һәм, киреһенсә, усаҡ һаҡлаусыларҙың деградацияһы арҡаһында милләт үҙенең көсөн юғалта. Бына шуның өсөн дә ныҡлы ғаиләләр төҙөргә кәрәк. Кешелек тарихында быға миҫалдар күп.**

Ғаилә именлеген булдырыу өсөн тәҡүәлек мөһим фактор булып тора. Бында: "Аллаһы Тәғәләнән ҡурҡығыҙ", - тигән әйтем бик урынлы булыр. Ҡатын-ҡыҙға яҡшы мөнәсәбәт менән ҡарағанда был ерҙәң ожмахҡа, ә уларҙы ихтирам итмәһәң, тамуҡҡа әйләнеүенә Ер менән күк шаһит. Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙенең һуңғы хөтбәһендә ҡатын-ҡыҙ хоҡуктарына ҡарата түбәндәгеләрҙе әйтә: "Эй, кешеләр! Ҡатын-ҡыҙ хоҡуктарын хөрмәт итегеҙ! Уларға шәфҡәтлелек һәм мәрхәмәт күрһәтегеҙ! Ҡатын-ҡыҙға ҡағылған һәр нәмәлә Аллаһы Тәғәләнән ҡурҡығыҙ! Аллаһы Тәғәлә һеҙгә һеҙҙең ҡатындарығыҙҙы ышанып тапшырҙы, һәм һеҙ уларҙың намыҫын һәм сафлығын һаҡлағыҙ!" (Сахих Әл-Бухари).

Ошоға бәйле ҡатын-ҡыҙҙарҙы үҙҙәренең бөйөк тәғәйенләнешенән - кешелек нәҫеле лайыҡлы дауам итһен өсөн балалар тәрбиәләүҙән тайпылдырыуҙы логик яҡтан да, иман күҙлегенән дә аңлап булмай. Ир ҙә, ҡатын да үҙҙәренең бөтә һәләттәрен һәм сифаттарын тәғәйенләнеше буйынса файҙаланған осраҡта ғына ғаиләлә именлек һәм тыныслыҡ булаcаҡ.

Бына шуның өсөн дә Ислам ҡанундары буйынса әхлаҡ һәм матди яҡтан отошло булған никах уҡыталар ҙа инде. Шулай итеп, идеаль ғаилә төҙөр һәм уны һаҡлар өсөн бик иғтибарлы һәм етди булырға кәрәк. Югиһә, был никах күп осраҡта айырылышыу менән тамамланған ир менән ҡатындың ғәҙәти бәйләнешенән бер нәмәһе менән дә айырылмаясаҡ. Хәҡиҡәттә, үҙҙәренә ныҡлы дини һәм әхлаҡи нигеҙ булдырмаған ғаилә союздары айырылышыу менән бөтә йәки ҡәбергә тиклем һуҙылған ғазап сынйырҙары менән бәйләнә. Әлбиттә, бер кем дә үҙенә бындай яҙмыш теләмәҫ ине. Аллаһы Тәғәләнең тәхете һелкенеүе тураһында шундай хәҙис бар, унда айырылышҡан кешеләр тураһында иҫкә алына. Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Өйләнегеҙ, ләкин айырылышыуҙар менән үҙегеҙҙең ғаиләгеҙҙе емермәгеҙ! Айырылышыуҙарҙан Аллаһы Тәғәләнең тәхете һелкенә..." - тигән.

**Усман Нури ТОПБАШ.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Әммә шуныһы бер аҙ эсте бошора. Бал ҡорттарының уҫал булыуы кешегә нишләптер оҡшамай. Уның тарафынан был сифат һәр ваҡыт кире тип билдәләнә. Хатта ошо уҫаллыҡты бөтөрөү, кәметеү буйынса эштәр алып барыла.*



*ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ*

# МИЛЛИ БАЙЛЫҒЫБЫҘ -



## Бөрйән бал ҡорто һәм солоҡсолоҡ

### Дошманы бер айыу ғына түгел шул

Бөрйән солоҡ бал ҡорттары тураһында һөйләүҙе дауам итәбеҙ. Был юлы йәйрәп ятҡан Бөрйән урмандарында көн иткән солоҡ ҡорттарының тәбиғи дошмандарға ҡаршы тороу көсө тураһында һөйләшәйек.

Сағыштырыу өсөн: умарталыҡта "бикләнеп" йәшәп ятҡан бал ҡорттарының тормошо күпкә көйләү, сөнки уларҙың яҙмышы һәр ваҡыт ышаныслы ҡулдарҙа. Кеше, беҙҙең осраҡта ул умартасы була инде, уларҙы һәр ваҡыт ҡарап, ҡурсалап ҡына тора. Ә солоҡ ҡорто кеше ярҙамына бер нисек тә өмөт итә алмай. Шуға күрә солоҡ ҡорттарының хәле күпкә мөшкөл һымаҡ. Әммә бер ҙә улай түгел. Хатта - киреһенсә. Үҙ мөхитендә көн күргән солоҡ ҡорттарының йәшәйеше күпкә һәйбәтерәк. Беҙҙең, йәғни Шүлгән-Таш ҡурсаулығы ғилми хеҙмәткәрҙәренең, тикшеренеүҙәре раҫлай быны. Дошмандарға, тәбиғәт ҡырыҫлыҡтарына бирешмәй, меңәр йылдар буйына ошо тәбиғәт шарттарына яраҡлашып йәшәп ята улар.

Бына ошо урында бик мөһим бер мәлде асыҡлап үтеп китәйек әле. Дөйөм алғанда, бал ҡорттарының да, уның дошмандарының да көсө туранан-тура тәбиғәт шарттарына бәйле. Йылы яҡта дошмандар күберәк, әммә улар күпкә көсһөҙөрәк. Ә бына һыуыҡ төбәктә был хәлдең тап киреһе күҙәтелә. Күскә зыян килтереүселәр һаны әҙерәк, әммә улар күпкә көслөрәк. Әммә дошмандарҙың көсөнә ҡарап, бал ҡорттары ла үҙгәрә бит. Дошмандарҙың мөнәсәбәтенә яуап итеп, йылы яҡтан һыуыҡ яҡҡа күскән һайын бал ҡорттары уҫаллаша бара! Тереклек итеү өсөн башҡа сара ҡалмай шул уларға. Тормош ҡанундары аяуһыҙ бит: көслөнөкө замана. Шулай булғас, тип һығымта яһайбыҙ беҙ, Көньяҡ Уралда йәшәгән бал ҡорттары иң уҫалы булып сыға! Күстәрҙең күсеүе тап ошонда туҡтап ҡалыуы ошондай һығымта яһарға мөмкинселек бирә беҙгә. Бөгөн беҙҙең төбәктә йәшәгән Бөрйән солоҡ ҡорттары иң уҫалы, ә дошмандары иң көслөһө булып иҫәпләнә - быны берәү ҙә инҡар итмәй.

Әммә шуныһы бер аҙ эсте бошора. Бал ҡорттарының уҫал булыуы кешегә нишләптер оҡшамай. Уның тарафынан был сифат һәр ваҡыт кире тип билдәләнә. Оҡшамай ғына түгел, хатта ошо уҫаллыҡты бөтөрөү, һис юғында, кәметеү буйынса эштәр алып барыла. Төптәнерәк уйлап ҡарап, кәрәк микән бындай йүнәлештәге эш, тип уйлап та ҡуяһың ҡайһы ваҡыт. Бөтәбеҙ ҙә аңлап тора: кеше тәү сиратта үҙ файҙаһынан сығып эш итә бит. Йыуаш бал ҡорттары менән эшләүе күпкә еңелерәк шул уға. Ә был үҙгәреш бал ҡортона нисегерәк тәьҫир итеүе тураһында уйлап та ҡарамай. Артыҡ тәрәнгә төшмәй, быны бал ҡорто һәм уның дошмандары миҫалында тикшерәйек әле. Күҙ алдына килтерәйек, солоҡ ҡорттарының уҫаллығын кәметеүгә (Аллам һаҡлаһын инде) өлгәштек икән, тей. Хәҙер солоҡсоға эшләүе күпкә еңелерәк була инде. Әммә бал ҡорто йыуашайыу менән... уның төп дошмандары йыуашайып китмәйәсәк бит әле. Йыуаш булһаң, баҫырҙар, тигәндәй, ҡыҫҡа ваҡыт эсендә бал ҡорттарын туҙҙырып ташларҙар ине.

Бөрйән солоҡ ҡорттарының дошмандары, ысынлап та, бер ҙә көсһөҙ түгел. Иң көслөһөнән башлап уларҙы барлап китәйек. Күптәребеҙ һиҙеп тора, бал ҡортоноң төп дошманы булып боронборондан **айыу** иҫәпләнә. Әммә айыу аҙығында солоҡ балы төп урынды алып тормай. Урманда уға аҙыҡ етерлек. Ул күберәген үҫемлектәр менән туҡлана. Әммә шуныһы ғәжәп - бал төмен бер тапҡыр тәмләп ҡараған айыу был шөғөлөн ташлай алмай ҙа ҡуя. Солоҡсо ағас олонона ниндәй генә һаҡланыу сараһы ҡуймаһын, айыу барыбер ағасҡа менеп, күсте туҙҙырып, уның балын ашарға тырышып ҡына торасаҡ.

Айыу тураһында һүҙ сығыу менән таныштар, Бөрйәндең хужаһы айыу бит ул, тип төрттөрөп алырға ярата. Бушҡа ғына Бөрйән байрағында айыу төп урынды алып тормайҙыр әле, тип тә ебәрәләр. Айыу - көслө һәм аҡыллы хайуан. Уны һәр кем ихтирам итә. Һунарсылар ҙа уның көсөнә һәм аҡылына һәр ваҡыт һоҡланыу менән ҡарай. Айыу тәү ҡарауға ғына килбәтһеҙ һымаҡ бит ул. Ҙур кәүҙәле булыуға ҡарамаҫтан, ул бик һаҡ, әммә шул уҡ ваҡытта бик етеҙ. Әйтәйек, төндә урманда ҡыштырлап йөрөгән сыскан тауышын ишетеп була. Әммә ауырлығы ярты тоннаға еткән айыу эргәңә килеп баҫҡан хәлдә лә уны һиҙмәйәсәкһең. Нисек аяҡ аҫтына эләккән сатыр-соторҙо һындырмайҙыр ҙа нисек һине алдан күреп өлгөрәләр - һүҙ менән аңлатырлыҡ түгел. Шуныһы ҡыуандыра - ул тәү башлап үҙе һөжүм итмәй. Күп осраҡта кеше менән осрашҡанға ҡарағанда осрашмауҙы артыҡыраҡ күрә. Әгәр инде кеше үҙе лә һиҙмәҫтән уның йөрөгән еренә яҡынлаша башлаһа, айыу үҙенең барлығын алдан белгертә башлай. Шуныһы аптырамалы - айыу башҡа йәнлектәрҙең тауышын бик оҫта башҡара ала! Әйтәйек, бер тәбиғәт яратыусы урманда ҡапыл эт өрөүен ишетеп ҡалды, тей. Бынау төпкөлдә кемдең эте аҙашып торол ҡалды икән, тип уйлап алған булыр ул. Әммә барыбер юлын дауам итер. Билләһи, белмәгән-күрмәгән кеше айыуҙың эт булып өрә алыуын башына ла индереп сығармай. Ә тайыш табан "арҡыры ауыҙға" (айыу ҙа шаян икән, ҡалай кешегә йәтеш исем тапҡан) һаман үҙенең барлығын белгертергә тырышасаҡ әле. Сыҙамлығы етмәй, үкереп ебәреүе лә бик мөмкин. Әммә быны ла аңламаған "аҡыллы баш" һаман үҙ юлын дауам итә икән, айыу ажарланып уның өҫтөнә ташлана, шунан кешене ботарлап ырғыта, һыу эскеһеҙ итеп туҡмап ташлай, һис юғында баҫтырып ебәрә, тигәндәй ... төптә яныльша. Айыу... боҫоп ята ла ҡала. Бына ошондай аҡылға эйә урман хужаһы. Шулай ҙа әйтеп китеү кәрәктер - ҡыҫҡа араны айыу бик ҙур тиҙлектә югереп үтә ала. Ул 15 метр араны 1 секундта (!) югереп үтеү һәләтенә эйә. Шуға күрә ул үҙенән күпкә етеҙҙәрҙе лә (әйтәйек, ҡолондо) тота ала. Ә инде кешене... Ярай, ярай, тынысланығыҙ, алдан әйтеүемсә, айыу үҙе тәү башлап һөжүм итмәй бит!

Тәбиғәт "бүләк" иткән дошмандар араһында айыуҙан һуң икенсе урында **һыуһар** тора. Көслө тырнаҡтары менән бәләкәй генә тишекте лә ҙурайта ала ул. Солоҡ ағасын ныҡлап өйрәнгәндән һуң уның мөсһөҙ урынын билдәләргә һәләтле һыуһар. Солоҡ тапҡырындағы олон ныҡ булған саҡта ла яйын табырға тырышасаҡ ул. Ағастың үҙәге буйлап (йә өҫтән, йә аҫтан) бал ҡорто ояһына етеүе лә бик мөмкин. Һыуһар кәрәҙле балды бик ярата.

Ҡоштарҙан дошмандар исемлегенә **тумыртҡа** инә. Ул бал ҡорттарын ашай. Йәй көнөнә ҡарағанда, көҙгөһөн зыянды күберәк килтерә тумыртҡа. Ҡышҡа әҙерләнеп йөрөгән (йә әҙерләнеп бөткән) күс уның туҡылдауына оянан күпләп осоп сығырға мәжбүр. Бындай тауышҡа күс маҙаһыҙлана. Оянан осоп сыҡҡан бал ҡорттарының күбеһе йә тумыртҡаның аҙығына әйләнә, йә өшөп үлә. Яҙ-йәй көнө көслө сусҡышы менән олондо тишеп, оҙон теле менән бал ҡорттарын эләктереп алып, уларҙы суплай тумыртҡа. Шуныһы ҡыҙыҡлы: күп осраҡта һыуһар менән тумыртҡа "бергәләп" эшләйҙәр. Әгәр көндөҙ тумыртҡа ҡаты суҡышы менән тишек тишһә, төндә һыуһар килеп был тишекте үткер тырнаҡтары менән күмпегәләр ҙурайта. Бындай бергәләп эшләү ҡыҫҡа ваҡыт эсендә уларға ыңғай һөҙөмтә бирә. Бындай күстең үлемгә дусар ителгәне аңлашыла, сөнки ағас олоно барыбер дошмандар тарафынан тишеләсәк. Шунан һыуһар бал ашап кинәнә, тумыртҡа бал ҡорттарын суплай. Әммә парлашып эшләүҙең тумыртҡа өсөн кире яғы ла бар. Һыуһар, солоҡ эсендә көтөп ятып, кисәге "дуҫын" тотоп алып тамаҡлап ҡуйыуы ла бик мөмкин.

Солоҡ ҡорттарына һиҙелерлек зыянды **ҡырмыҫҡа** килтерә. Әгәр ҡырмыҫҡалар "баллап сәй эсергә ҡунаҡҡа" йөрөй башлаһа, уларҙы аҙаҡ бер нисек тә ҡыуып сығарып булмай. Берҙән, улар күмәк. Икенсенән, бал ҡорттары уларҙы саға алмай. Шуға күрә бал ҡорттарының һөжүме бер ниндәй ҙә һөҙөмтә бирмәй. Һөҙөмтәлә солоҡ ҡорттарына ояны ташлап китеүҙән башҡа сара ҡалмай. Күс өсөн был һаҡланыу сараһы булып тора.

Һирәкләп булһа ла **баҡса ҡомағы** һәм **ялмансыскан** солоҡ ҡортоноң үлеменә сәбәпсе була ала. Улар ағас олоно буйлап еңел үрмәләп йөрөй алалар. Әгәр инде осраҡлы рәүештә генә күс ояһына юлыҡһалар, улар кәрәҙле балды бик ятарып ашайҙар. Әммә бал ҡорттары уларҙы сағып үлтерә алырға һәләтле.

**Һағыҙаҡ** солоҡ ҡортона артыҡ зыян килтермәй. Бары улар солоҡҡа алдан оялап өлгөрһә, был ояны бал ҡорто күсенә бирмәүе бар. Шулай ҙа көслө күс уларҙы ҡыуып сығара ала. Ә бына **драж** (тыраж тип тә йөрөтәләр уны) һиҙелерлек зыян килтерә ала. Әгәр уның ояһы менән бал ҡорттары ояһы бик яҡында булһа, ошо солоҡ күсенең эшсе ҡорттарын драж йәй буйына күпләп тота алырға һәләтле.

Һуңғы йылдары солоҡ ҡортона һиҙелерлек зыянды **балауыҙ күбәләге** килтерә башланы. Исеме лә бушҡа бирелмәгән был ҡороҡҡосҡа. Был күбәләк үҙ ояһын балауыҙҙа төҙөй.

Бөрйән солоҡ ҡорттарының дошмандарын һанап бөттөк, буғай. Күреүегеҙсә, уларҙың һаны уңға ла етмәй. Әммә улар көслө. Ә шулай ҙа уларға бирешмәй бөгөн дә көн күрә солоҡ ҡорттары!

**Әғләм ШӘРИПОВ.**
**Бөрйән районы.**
**(Дауамы. Башы алдағы һандарҙа).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Маҡсат - аңдың иң юғары кимәленә күтәрелеү

Йыһанда ла аңлы тормош булыуҙың иң хаҡ билдәһе булып уның вәкилдәренең береһенең дә беҙҙең менән бәйләнешкә инергә тырышмауы тора, тиҙәр. Ысынлап та, үҙебеҙҙе рухи йән эйәләренә лайыҡлы тотоу өсөн оҙайлы юл үтергә кәрәк. Был йәһәттән ҡайһы бер боронғо мәҙәниәттәр беҙҙә уҙып киткән. Ошо юлдарҙы яҙырға ярҙам иткән үткәндәрҙең күтәренке рухлы кешеләре Юғары аң менән аңлы рәүештә бәйләнгәнлектең асыҡ миҫалы була ала.

Суфыйҙарҙың төп маҡсаты - кешенең камиллашыуы һәм Аллаһ менән берлеге була. Суфыйсылыҡтан Исламдың рухи бай һәм яҡшылыҡтың ҡәҙерен белгән варисҭары сыҡҡан. Улар һәр саҡ үҙҙәренә Аллаһ ихтыярына буйһоноу зарурлығына отчет биргән. Дәрүиштәр суфыйсылыҡта мистик туғанлыҡ ағзалары була. Уларҙың башлығы үҙенең тәрән эзотерик аҡылы менән башҡаларҙан айырылып торған шәйех була. Был белем уға ерҙәге сығанаҡтарҙан түгел, ә интуиция аша бирелгән. Ошо аҡылдың бер өлөшө булып ҡыуаныстың ни тиклем мөһим икәнлеген аңлау тора. Шуға ла дәрүиштәр күңелле бейеүҙәрҙе һәм йырҙарҙы яратҡан. Сит кешеләргә бик йыш улар гипноз йәки экстаз тәьҫирендә кеүек күренгән. Әммә был йыһандан килгән ҡыуаныс тулҡыны булған.

Быға тиклем яҙылғандар һеҙгә аңдың иң юғары кимәленә күтәрелергә ярҙам итеүгә арналғайны. Ғәмәлдә был Тәңрегә оҡшаш булыу, Аллаға яҡынайыуҙы аңлата. Әммә был, һеҙ диндар булып китәһегеҙ, тигәнде аңлатмай. Бәлки, кемдер шул юл менән диндар булып киттем, тиер. Нигеҙҙә һеҙ бары тик барлыҡ кинлекте тултырған ҙур аңдын өлөшө генә. Бына хәҙер ҙә беҙ һеҙҙе аңығыҙҙы хатта тын тотолоу кимәленә күтәреү серенә өйрәтәсәкбеҙ.

Ошо тәңгәлдә уңыш ҡаҙаныу өсөн мин һеҙҙе матди донъя тарафынан тыуҙырылған стресты еңергә өйрәттем. Кире артҡа аҙым яһамаҫ өсөн алға тағы бер аҙым яһарға кәрәк. Быны өсөн үҙегеҙҙә кире эмоциялар табыу менән уларҙы программағыҙҙан юйып, улар урынына ыңғайҙарын яҙырға кәрәк буласаҡ.

Сигенеүгә юлды ябабыҙ. Шулай итеп, тынысһыҙланыу, рух төшөнкөлөгө, көсһөҙлөк, саманан тыш арыу, пассивлыҡ, дөғүә белдереүгә әүәҫлек, тәнҡитләү, аралашмауса нлыҡ, түҙемһеҙлек кеүек сифаттарығыҙҙы ҡағыҙға яҙғандан һуң юйып ташлағыҙ ҙа, улар урынына ошо сифаттарҙы яҙып ҡуйығыҙ: ныҡлы ышаныс, күңел күрләгә, көс, юҡҡа-барға бошонмау, маҡсатҡа ынтылышлылыҡ, хеҙмәттәшлеккә әүәҫлек, түҙемлек, тирә-яҡтағыларға ихтирам, аралашыусанлыҡ һәм башҡалар.

Ҡыуанысҡа күрә, һеҙ асылышҡа, матур яңы тормошҡа кәртә ҡуйыусы сифаттарҙы үҙ программағыҙҙан юя алаһығыҙ. Быны өсөн һис бары өс көн дауамында бер минутҡа көсөргәнештән арынып, идара итеп булған өндәге төш сеансын үтергә генә кәрәк.

**Роберт СТОУН.**



## 11 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Женские мечты о дальних странах", 5-я серия. Сериал
22.30 "Открытый космос", 3-я и 4-я серии. Док. фильм
00.35 "Джуниор"
02.35, 03.05 "Грязное дело"
03.00 Новости
04.30 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Тайна гибели маршала Ахромеева"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 31-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 58-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 130-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Дорогой мой человек", 12-я, 13-я и 14-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Загадки природы. Гении". Док. фильм
01.00 "Профилактика"
02.15 "Запомните меня такой". Драма

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Новая жизнь сыщика Гурова. Продолжение". "Афера", 1-4-я серии. Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Наш космос". Док. цикл
01.15 "Футбольная ночь"
01.45 "Суд присяжных"
02.45 "Детектив Раш"
03.55 "До суда"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Забытые войны"**
**10.30 "Специальный репортаж"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Городок АЮЯ"**
**11.30 "Приключения мастера кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30, 23.30, 23.15 "Орнамент"**
**12.45, 00.30 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Антракт"**
**14.45 "Музыка на канале"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Песнь подснежника". Р. Гарипов**
**17.00 Концерт на стихи Р. Гарипова**
**17.15 "Тэмле"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Замандаштар"**
**19.15 "Пора разобраться"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Специальный репортаж"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30, 00.45 Новости (на башк. яз.)**
**23.30 "Петербургские тайны"**

## 12 АПРЕЛЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Первые в космосе"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Женские мечты о дальних странах", 6-я серия
22.30 "Первый отряд. Испытано на себе". Док. фильм
23.30 "Королев". Драма
01.50, 03.05 "Стальные магнолии"
03.00 Новости
04.10 "Детективы"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Пугачева, Распутина... Все звезды Дербенева". Док. фильм
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50, 04.45 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 32-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 59-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 131-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Дорогой мой человек", 15-я и 16-я, закл. серии
22.50 "Красная Мессалина. Декрет о сексе". Док. фильм
23.50 "Вести+"
00.10 "Увидеть Марс... и не сойти с ума"
01.00 "Профилактика"
02.10 "Горячая десятка"
03.20 "Закон и порядок"
04.10 "Городок"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Очная ставка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Новая жизнь сыщика Гурова. Продолжение". "Бриллиантовая нить", 1-4-я серии
23.15 "Сегодня"
23.35 "Наш космос"
01.25 Футбол. Лига чемпионов УЕФА. "Манчестер Юнайтед" (Англия) - "Челси" (Англия)
03.40 "Лига чемпионов УЕФА. Обзор"
03.55 "До суда"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Пора разобраться"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Царь горы"**
**11.30 "Приключения мастера кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30, 23.15 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Петербургские тайны"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 Концерт. Вахит Хызыров**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Криминальный спектр"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.15 "Башкорттар"**
**19.45 "Полезные новости"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Надо знать!"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.30 "Петербургские тайны"**
**00.45 Новости (на башк. яз.)**

## 13 АПРЕЛЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Женские мечты о дальних странах", 7-я серия
22.30 "Среда обитания"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Петр Мамонов. Черным по белому". Док. фильм
00.55 "Такси-блюз"
03.00 Новости
03.05 "Гангстерские войны"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Петр Вельяминов. Тени исчезают..."
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 33-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 60-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 132-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Манна небесная", 1-я, 2-я и 3-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Кронштадтский мятеж. Кто победил?" Док. фильм
01.00 "Профилактика"
02.15 "Честный детектив"
02.40 "Закон и порядок"
03.40 "Труффальдино из бергамо", 1-я серия

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "И снова здравствуйте!"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Внимание, розыск!" с Ириной Волк"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Новая жизнь сыщика Гурова. Продолжение". "Бесплатных пирожных не бывает", 1-4-я серии
23.15 "Сегодня"
23.35 "Наш космос"
01.25 "Главная дорога"
02.00 "Кулинарный поединок"
03.00 "Детектив Раш"
03.55 "До суда"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Головоломка"**
**10.30 "Специальный корреспондент"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Мастерская на колесах"**
**11.30 "Приключения мастера кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30, 23.15 "Орнамент"**
**12.45, 00.30 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Петербургские тайны"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Недра покоряются романтикам"**
**17.00 "Байык представляет…"**
**17.45 "Противостояние"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15, 20.45 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.15 "Историческая среда"**
**19.45 "Полезные новости"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Надо знать!"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.30 "Петербургские тайны"**
**00.45 Новости (на башк. яз.)**

## 14 АПРЕЛЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Женские мечты о дальних странах", 8-я серия
22.30 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Судите сами" с Максимом Шевченко"
00.45 "Рикки Бобби: король дороги"
02.45, 03.05 "Код убийства: охота на киллера"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "В огнедышащей лаве любви. Светлана Светличная"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 34-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 61-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 133-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Манна небесная", 4-я и 5-я серии
22.50 "Поединок"
23.50 "Вести+"
00.10 "Триумф силы. Василий Алексеев"
01.00 "Профилактика"
02.15 "Закон и порядок"
03.10 "Труффальдино из Бергамо"
04.25 "Городок"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Развод по-русски"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "В зоне особого риска"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Новая жизнь сыщика Гурова. Продолжение". "Шакалы",1-я серия
20.30 "Я покажу тебе Москву"
22.25 "Сегодня"
22.45 Футбол. Лига Европы УЕФА. "Спартак" (Россия) - "Порту" (Португалия). Ответный матч. Трансляция со стадиона "Лужники"
01.00 "Наш космос"
02.50 "Квартирный вопрос"
03.55 "Лига Европы УЕФА. Обзор"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Музыкальная шкатулка". Р. Тухватуллин**
**10.30, 20.45 "Специальный корреспондент"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Цирк в 13 метров"**
**11.30 "Приключения мастера кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30, 23.15 "Орнамент"**
**12.45, 00.30 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Петербургские тайны"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Автограф". Зухра Кутлугильдина**
**17.15 "Тэмле"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Замандаштар"**
**19.15 "Пора разобраться"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.30 "Петербургские тайны"**

## 15 АПРЕЛЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо"
16.50 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Достояние Республики"
00.30 "50 первых поцелуев". Комедия
02.20 "Филадельфия"
04.40 "Вспомни, что будет"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "С новым домом!"
10.10 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 " Вести-Башкортостан"
11.50 "Мой серебряный шар"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 35-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 62-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 134 и 135-я серии
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Фактор А". Музыкальный конкурс
22.30 Торжественный концерт, посвященный Дню Космонавтики
00.20 "Невеста на заказ". Мелодрама
02.30 "Стая"
04.30 "Городок"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "История всероссийского обмана. Выход есть!"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Суд присяжных: главное дело"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Новая жизнь сыщика Гурова. Продолжение". "Шакалы", 2-4-я серии
22.25 "НТВшники"
23.30 "Музыкальный ринг НТВ"
00.55 "Женский взгляд"
01.40 "Дачный ответ"
02.45 "Девушка из воды". Мистический триллер
04.50 "До суда"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Пора разобраться"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Книга сказок"**
**11.30 "Приключения мастера Кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00, 23.15 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30, 23.15 "Орнамент"**
**12.45, 00.30 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Петербургские тайны"**
**14.30 "Янгантау"**
**15.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и др.**
**16.15 Концерт. Зифа Нагаева**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Криминальный спектр"**
**19.15 "Йома"**
**19.45 "Полезные новости"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**23.30 "Петербургские тайны"**
**00.45 Новости (на башк. яз.)**

## 16 АПРЕЛЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.40, 06.10"Спирит: душа Прерий"
06.00 Новости
06.30" Заложница"
07.20 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.40 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак"
10.50 "Сергей Никоненко. Поздно, люблю другую"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Среда обитания"
13.20 "Новый "Ералаш"
13.30 "Синие ночи", 4-6 серии
16.30 "Новый "Ералаш"
16.50 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
17.50 "Общая терапия", 7-я и 8-я серии
19.50 "Фабрика звезд. Возвращение". Музыкальное шоу
21.00 "Время"
21.15 "Фабрика звезд. Возвращение". Продолжение
22.30 "Прожекторперисхилтон"
23.00 "Что? Где? Когда?"
00.10 "Воспоминания неудачника". Драма
02.20 "Сержант Билко"
04.10 "Вспомни, что будет"

### РОССИЯ 1
05.10 "Жизнь сначала"
06.45 "Вся Россия"
06.55 "Сельское утро"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.50 "Субботник"
09.30 "Городок"
10.05 "Качество жизни"
10.30 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.50 "Честный детектив"
12.20 "Кедр" пронзает небо". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Кедр" пронзает небо". Сериал. Продолжение
16.15 "Субботний вечер"
18.10 "Варенька". Мелодрама
20.00 "Вести в субботу"
20.40 "С днем рождения, Алла!"
01.00 "Девчата"
01.35 "Город ангелов". Мелодрама
03.50 "Комната смеха"

### НТВ
05.40 "Холм одного дерева"
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ"
08.45 "Живут же люди!"
09.20 "Внимание розыск!" с Ириной Волк"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Сеанс с Кашпировским. Тайны снов"
14.10 "Таинственная Россия"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Развод по-русски"
17.20 "Очная ставка"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа "Максимум"
21.00 "Русские сенсации"
21.55 "Ты не поверишь!"
22.50 "Последнее слово"
23.55 "Нереальная политика"
00.25 "Подмена". Триллер
03.10 "Бронко Билли". Вестерн

### БСТ
**07.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 "Международный фестиваль симфончиеской и хоровой музыки"**
**08.45 "Автограф". Римма Амангильдина**
**09.30 "Третий звонок". Т. Гарипова. "Песнь во сне". Спектакль Сибайского БГТД им. А. Мубарякова**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 22.00 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Весы"**
**13.30 "Семь жемчужин Башкортостана"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Надо знать!"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Замандаштар"**
**17.30 "Весело живем"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 "Судьбы радужные нити"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Музыкальная шкатулка". Г. Гайсина**
**19.45 "Весело живем"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Йома"**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.30 "Чаплин"**
**00.45 "Свидание с джазом"**

## 17 АПРЕЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.50 "Настя"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым"
10.30 "Пока все дома"
11.30 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Дело Румянцева". Детектив
14.10 "Храни меня, дождь". Мелодрама
16.10 "Алла Пугачева. Избранное". Концерт
17.40 "Алла Пугачева. Жизнь после шоу"
18.40 "Жестокие игры"
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Мульт личности"
22.30 "Yesterday Iive"
23.20 "Познер"
00.20 "Национальная безопасность"

### РОССИЯ 1
05.00 "Мачеха"
06.40 "Сам себе режиссер"
07.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна"
08.00 "Утренняя почта"
08.40 "Сто к одному"
09.25 "Города и Веси"
10.20 "Вести-Башкортостан". События недели"
10.40 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "С новым домом!"
11.25 "Кедр" пронзает небо"
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Кедр" пронзает небо". Продолжение
15.40 "Юбилейный вечер Олега Митяева"
17.30 "Танцы со звездами". Сезон-2011"
20.00 "Вести недели"
21.05 "Варенька. Испытание любви". Мелодрама
00.45 "Геннадий Хазанов. Повторение пройденного"
01.15 "Холостяк". Комедия
03.05 "Небеса Вегаса"

### НТВ
05.25 "Холм одного дерева"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
10.50 "Пир на весь мир"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Семин". "Охота на крота". Детективный сериал
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "История всероссийского обмана". "Выход есть"
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
22.00 "Глухарь в кино". Криминальная комедия
23.45 "Глухарь". "Сырное дело"
00.45 "Авиаторы"
01.15 "В зоне особого риска"
01.50 "Ричард львиное сердце". Приключения
04.10 "Ты не поверишь!"

### БСТ
**07.00 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Музыка на канале"**
**07.45 Ильшат Юмагулов. "Не хочу тебя терять". Спектакль Стерлитамакского ГБДТ**
**10.00 "Тамыр" представляет…"**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Весы"**
**13.30 "Дорога к храму"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Надо знать!"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Замандаштар"**
**17.30 "Весело живем"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 "Волшебный курай"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Байык представляет…"**
**19.30 "Любимое дело"**
**19.45 "Весело живем"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Забытые войны. События в Анголе"**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.15 "Специальный репортаж"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.00 "Башкорттар"**
**22.30 "Вечер.com"**
**23.15 Худ. фильм**

ГӘЗИТТӘН КҮСЕРЕП...

# ҮТКӘН ЗАМАН ТУРАҺЫНДА...

## яҙыусы һәм журналист уйланыуҙары

ЛИТЕРАТУРНАЯ ГАЗЕТА

**(Дауамы. Башы 3-сө биттә).**

Ул саҡта аҫаба халыҡтар, борон-ғо тарихҡа эйә булып, үҙҙәренең аҫаба ерҙәрендә йәшәүселәр тура-һында нимә тиергә? Ни өсөн улар беҙҙең экрандарҙа юҡ? Беҙҙә улар-ҙа дискриминация тойғоһо тыуы-уы борсомаймы? "Хәҙер нимә, те-левидение менән калькулятор то-топ идара итергәме инде?" - тип һорар шул уҡ Эрнст. Эйе, кәрәк икән калькулятор ҙа тотороһон, юҡ-һа, берҙәм Рәсәй ошо уҡ атамалы партияның һарғайып бөткән пла-каттарында ғына тороп ҡаласаҡ. Шуны аңлағыҙ, виртуаль ысын-барлыҡ күп осраҡта беҙгә ысын тормошто алмаштыра. Ҡасандыр, борон заманда, шулай булған. Ке-ше күрә: уның аҫаба ерендә аңлай-ышлы телдә һөйләшкән, ғәҙәти тышҡы ҡиәфәтле, ғәҙәти ғәҙәтле ҡәбиләләштәре аҙ ҡалған - һәм шунда уҡ этник һаҡланыу меха-низмдары эшләй башлай, ситтәргә шикләнеп ҡарау уяна, туған, мил-ли символдарға айырыуса йылы мөнәсәбәт, ниမәгәләр тыйыу, мәҫәлән, ҡатнаш никахтарға, бар-лыҡҡа килә (саманан тыш толе-рант Америкала раса-ара никахтар 3-5 процент ҡына тәшкил итә). Ксенофобия йәки ситтәрҙән ҡурҡ-ыу бары тик этник ҡаршылыҡтың тәбиғи эске процестарының осло, ҡурҡыныс, ҡайһы бер ваҡыт оятлы сағылышы ғына. Һәм ул тыумыш-тан бирелгән агрессия менән бәйле түгел, ә халыҡтың үҙ киләсәге өсөн хафаланыуынан барлыҡҡа килә. Ксеонофобияны тыйыу - парад ал-дынан Ҡыҙыл майҙан өҫтөнән бо-лоттарҙы ҡыуыу менән бер ул. Һуңынан барыбер ямғыр яуасаҡ, әммә ул көслөрәк буласаҡ һәм боҙ яуыуы ла ихтимал. Сәбәптәрҙе - эт-ник хәүеф сығанаҡтарын бөтөрөр-гә кәрәк.

Хәҙерге Рәсәй телевидениеһы ксенофобияны провокациялай, үҙе лә аңламаҫтан этник үҙһаҡла-ныуҙың төпкө анда яткан ин-стинкттарын уята, тип раҫлауҙан ҡурҡмайым. Экранға ҡарап һәм унда үҙ милли мәҙәниәтемдең бер ниндәй билдәләрен тапмайынса, бер ниндәй оҡшаш йөҙ күрмәйен-сә, йәки уларҙы гел кире-крими-наль контекста күреп, шул уҡ авар, чечен йәки башҡорт (ҡайһы берҙә урыҫ та) ата-олаталары сит ҡәби-ләләрҙең баҫҡынсылығы осоронда тойған этник хәүефте тоя. "Барыһ-ын да эфирға сығарыу мөмкин түгел!" - тип яр һалыр Эрнст. Барыһын да сығарыу кәрәкмәй. Элек бының өсөн милли мәҙәниәттәрҙ-ең билдәле фигуралары сығарыл-ды: Ғамзатов, Кулиев, Рытхэу, Мәхмүд Эсамбаев... Уларҙан һуң алмаш килмәне. Ни өсөн? Эконо-мия яһанылар...

Әйҙәгеҙ, үҙебеҙҙе, элек әйткәндә-ренсә, империяның милли сигенән килгән йәш кеше урынына ҡуйып ҡарайыҡ. Ул йыш ҡына беҙҙең ҡа-ланы дөйөм дәүләттең баш ҡалаһы тип түгел, ә уның теленә, мәҙәниә-тенә дошман булған, уның милли абруйына битараф сит көстәр үҙәге тип ҡабул итә. "Һеҙ беҙҙе белергә теләмәйһегеҙме? Яҙалау урынында лезгинка ҡарағыҙ улай булғас!"

Был беҙҙең пролетар интернаци-онализмды дөйөм кешелек ҡим-мәттәренә алмаштырып, милли проблеманы бөтөрҙөм тип уйлаған либераль зыялыларҙан башҡаларға аңлашыла. Юҡ, милли проблема бөтмәне. Эйе, үҙбилдәләнешен белмәгән йәки унан ҙур сер яһаған кешеләрҙең күңелен йәрәхәтләмәҫ өсөн паспорттан "милләт" графа-һын алып ташланылар. Шунан ни булды? Беләһегеҙме, беҙҙә үҙ ене-сен билдәләй алмаған йәки үҙенең енси йүнәлешен йәшереүселәр күпме? Ниңәләр паспортта "енес" графаһы ҡалдырылды...

**Юрий ПОЛЯКОВ.**
**"Литературная газета"ның баш мөхәррире.**

**(Ҡыҫҡартып алынды).**

ХОККЕЙ

# УРА! ЮЛАЕВСЫЛАР ФИНАЛДА!

САЛАВАТ ЮЛАЕВ хоккейный клуб

КХЛ

**Өфөнөң "Салауат Юлаев" һәм Магнитогорскиҙың "Металлург" хоккей командалары араһындағы уйындар көсөргәнешле һәм ҡыҙыу булды. Ете осрашыуҙан торған ярымфинал уйындары Континенталь хоккей лигаһының көнсығыш конференцияһында иң көслө команданы билдәләне. Шулай итеп, "Салауат Юлаев" командаһы үҙ тарихында беренсе тапҡыр Гагарин кубогы финалына сыҡты.**



Һуңғы уйынды юлаевсылар ҡыҙыу башланы һәм Магнитогорск уйынсыларын күп осраҡта ҡапҡасы Григорий Гелашвили ғына ҡотҡарып ҡалды. Ләкин "Металлург" хоккейсылары юлаевсылар тәҡдим иткән уйын стилен тиҙ генә аңлап алып, бер-нисә хәүефле контратака менән яуап бирҙе. Беренсе осорҙа ике команда ла бер ниндәй һөҙөмтәгә ирешә алманы. Икенсе осор ҙа юлаев-сыларҙың көслө һөжүме менән башланды, ләкин Игорь Григоренконың штрафсылар эскәмйәһенә ултырыуы Өфө командаһының ҡеүәтен бер аҙ һүрелтте. Күпселектән файҙаланып, "Металлург" хоккейсыһы Олег Кваша Эрик Эрсберг менән күҙмә-күҙ атакаға сыҡты, ләкин ныҡлы "швед сте-наһы"н үтә алманы. Ошондай уҡ аҙымды юлаевсы Игорь Григоренко ла башҡарҙы, ул ике һаҡсыны оҫта үтеп, контратакаға сыҡты, ләкин Георгий Ге-лашвили ҡапҡаһы "асылманы". Шулай уйындың ике осоро бер командаға ла иҫәп килтермәне.

Өсөнсө осорҙа хоккейсылар үтә һаҡлыҡ менән уйнауға күсте, сөнки бер генә яңылышлыҡ та бөтә һалынған тырышлыҡты һәм көстө юҡҡа сығарыуы мөмкин ине. Осор бөтөп барғанда тиерлек әлеге-шеп киткән Виталий Прошкин һәм Янне Нискала штрафсылар эскәмйәһенә оҙатыла. Улар штраф минуттарын һанағанда Владимир Антипов Кирилл Кольцов биргән шайбаны көслө һуғыу менән Георгий Гелашвилиҙың ҡапҡаһына оҙатты һәм... Гол! 1:0 иҫәбе менән Вячеслав Быков командаһы алға сыҡты.

Иҫәпте асыу юлаевсыларҙы ҡанатландырып ебәрҙе һәм контратакалар тағы ла көсәйҙе. Юлаев-сылар тыуҙырған бер-нисә ҡурҡыныс мәлдә "Ме-таллург"ты бары тик ҡапҡасылары ғына ҡотҡарып ҡалды. Уйын аҙағына Магнитогорск тренерҙары иҫәпте тигеҙләү өсөн барыһын да эшләне: ҡапҡа-сыларын алып, алтынсы уйынсы сығарҙы, уйынға бөтә төп көстәрен ташланы, ләкин юлаевсылар уларға гол индерергә бирмәне.

Шулай итеп, Өфөнөң "Салауат Юлаев" команда-һы финалда Мәскәү өлкәһенең "Атлант" команда-һы менән көс һынашасаҡ. Финалдың Мәскәү өлкәһендә үтәсәк өсөнсө һәм дүртенсе уйындары-на билеттарҙың бөгөн үк һатылып бөтөүе ярыш-тың сәмле, ҡыҙыу һәм көсөргәнешле буласағын билдәләй. Лиганың фавориты "Салауат Юлаев" һәм финалға сығыу кеүек юғары баҫҡысҡа тәүгә күтәрелгән "Атлант" командаларынан мауыҡтыр-ғыс уйындар көтөп ҡалабыҙ.

**Гөлназ САФУАНОВА.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



# СӘФӘРГӘ ЙЫЙЫНАЛАР

**Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры гастролдәрен Татарстан тамашасылары кө-топ ала. Күптән түгел театр тағы ла Ҡазан тарафтарында булып ҡайтты. Театр директоры Хөрмәтулла Үтәшев, баш режиссер Айрат Абушахманов һәм театр артистары ошо сәфәр тураһындағы тәьҫораттары менән уртаҡлашты.**

"Әхмәтзәки Вәлиди Туған" тарихи драмаһы, "Шәүрә-кәй" музыкаль комедияһы, "Минең ғаиләм" мелодрама-һы, "Яратыу гонаһмы?" драмаһы, "Хыялый" музыкаль-лирик комедияһы, "Балаҡайҙарым" драмаһы, "Хәйерле иртә, Энид!" тормош фокустары, "Ҡоҙаса" музыкаль ко-медияһы, балалар өсөн "Алтын асҡыс-Remake" музы-каль мажараһы һәм театрлаштырылған концерт про-граммаһы ҙур уңыштар менән үтте, - тип белдерҙе Хөр-мәтулла Үтәшев. Әйткәндәй, баш режиссер һәм театр ар-тистары Татарстан Республикаһының юғары дәүләт на-градаларына лайыҡ булды. Улар милли театр сәнғәтен үҫтереүгә һәм милләт-ара мәҙәни бәйләнештәрҙе нығы-тыуға ҙур өлөш индергәне өсөн миҙалдар, дипломдар һәм маҡтау грамоталары менән бүләкләнде.

Театр тағы ла алыҫ сәфәргә әҙерләнә: оҙаҡламай Төр-киәгә, "Мең һулыш һәм бер тауыш" исемле IV Халыҡ-ара төрки телле театрҙар фестиваленә юлланасаҡ. Фес-тиваль 14 апрелдән 25 апрелгә тиклем Конья ҡалаһында үтәсәк. Дүртенсе тапҡыр үткәрелгән был фестивалдә Башҡортостан Республикаһы театры 2009 йылда "Шәү-рәкәй" музыкаль комедияһы менән ҡатнашып, фести-валдең дипломанты булғайны. Быйыл театр Төркиәгә "Әхмәтзәки Вәлиди Туған" спектаклен алып бара. "Был осраҡлы түгел, сөнки атаҡлы ғалим һәм күренекле йәмә-ғәт эшмәкәре, тюрколог, мәшһүр тарихсы Әхмәтзәки Вәлиди Туған исеме төрки телле халыҡта киң танылыу яулаған, ә төрөк халҡы был шәхескә айырыуса ихтира-мын белдерә", - тине спектаклдең режиссеры Айрат Абушахманов.

Шулай уҡ май айында Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры Пенза ҡалаһын-да "Волга буйы - 2011" Беренсе театраль округ фестива-ленә Александр Гельмандың әҫәре буйынса ҡуйылған "Эскәмйә" спектаклен алып барасаҡ. Театрҙың йәш ар-тистары Артур Ҡунаҡбаев һәм Милена Сираева ҡатнаш-лығындағы был спектакль республика театр һөйөүсе-ләренең юғары баһаһын алырға өлгөргәйне лә инде.

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**12 апрель - "Туй"**, шаярыу, А.Чехов.
**13 апрель - "Һөйәм, һағынам..."**, комедия, М.Ғиләжев .
**16 апрель - "Әй әттәгенәһе, ирем ҡайтты!"**, комедия, Н.Ғәйетбаев.
**17 апрель - "Гипнотизер"**, комедия, В.Сигарев.

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**12 апрель "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим), драма
**13 апрель "Ғимаҙи мажаралары"** (А. Әхмәтов), әкиәт. Башлана 11.00
**13 апрель "Студенттар"** (Н. Ғәйетбай), комедия
**14 апрель "Йәнкиҫәккәйем"** (Т. Миңнуллин), комедия
**15 апрель "Париж егете Әлфәнис"** (Л. Вәлиев), комедия
**17 апрель "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), комедия. Башлана 18.00

## КОТЛАЙБЫҘ!

Баймаҡ районы Ишбирҙе ауылында йәшәүсе **Истәкова Миңсара Тәлғәт** ҡыҙын юбилейы менән ҡотлайбыҙ. Был матур көндә һиңә ныҡлы һаулыҡ, шатлыҡ-ҡыуаныстарға бай яҡты көндәр, йән-тән тыныслығы, ғаилә татыулығы, сәләмәтлек телә-йбеҙ. Изгелектәр күреп, тормошҡа һөйөнөп, тыныс тормошта имен-һау йәшәргә насип булһын. Балаларыңдың ҡәҙер-хөрмәтен күреп оҙон-оҙаҡ йәшәргә яҙһын. Киләсәктә лә киң күңелле, асыҡ йөҙлө, оло йөрәкле булып ҡал.

**Ҡотлау менән апайың Вәкилә һәм уның ҡыҙҙары.**

ҺӨЙӨНСӨ!

**Гәзит уҡыусыларыбыҙға тағы ла бер ҡыуаныслы яңылыҡ еткерәбеҙ. Хәтерегеҙҙәлер, 2010 йылдың яҙында баш ҡалабыҙ Өфөлә "Алтынай" студияһы ойошторған "Һаумы, һаумы, Әкиәт!" ҡала һәм республика конкурстары бер-бер артлы гөрләп үткәйне. Әле беренсе тапҡыр ғына уҙғарылыуына ҡарамаҫтан, ул балаларҙың, уҡытыусыларҙың, ата-әсәләрҙең ҙур һөйөүен, ихтирамын яулап өлгөргән был конкурс ысынлап та әкиәтселәр, сәсәндәр мәктәбен тергеҙеүгә һәм үҫтереүгә, башҡорт халыҡ ижадының иң яҡшы өлгөләрен таратыуға, йәш быуында башҡорт халҡының тарихына һәм мәҙәниәтенә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләүгә, уҡыусыларҙың шиғри, импровизаторлыҡ, фекерләү һәләтен үҫтереүгә тос өлөш индерә торған сара булды. Ә бына күптән түгел ошо конкурста ҡатнашып, ҙур сәхнәгә сығып әкиәт һөйләп еңеү яулаған кескәйҙәрҙең аудио-китабы донъя күрҙе. Ошо турала "Алтынай" студияһы директоры Алтынай Бурина үҙе һөйләй:**




# ӘКИӘТ ТЫҢЛАҺЫН БАЛА...

## аудиодиск аша булһа ла...

- Үҙем шул тиклем әкиәттәр яратам. Бәләкәй саҡта өләсәйем, әсәйем һөйләгән тылсымлы әкиәттәрҙе иләҫләнеп тыңлай, әкиәт геройҙары менән бергә янып-көйә, шатлана, хатта илай торғайным. Шундай әкиәт менән сорналған донъяла үҫкәнгә лә сабый күңеллемендер, күрәһең. Кескәйҙәрҙе бик яратам, уларҙың күңелен үҫтергем килә. Ә был маҡсатҡа нәҡ әкиәттәр аша өлгәшеп була икәнен беләм. Шуға күрә сабыйҙар өсөн әкиәттәр ярҙамында ниндәйҙер саралар уҙғарыу хыялы менән күптән яна инем. "Һаумы, һаумы, Әкиәт!" конкурсының тәүҙә ҡала, унан район, республика кимәлендә шундай ҙур масштабта үтеүе лә хыялымдың тормошҡа ашыуына ҙур аҙым булғандыр. Ғөмүмән, был конкурс тураһында күп һөйләргә була, сөнки балаларҙың һәләтен, фекерләү ҡеүәһен үҫтереүҙә, уларҙа лидерлыҡ, сәм, тырышлыҡ кеүек ыңғай сифаттар тәрбиәләүҙә "Һаумы, һаумы, Әкиәт!" конкурсының әһәмиәтен баһалап бөтөрөрлөк түгел. Бәләкәй саҡта һәр баланың йондоҙ булғыһы, үҙен башҡалар алдында танытҡыһы, һәләттәрен күрһәткеһе, сәхнәгә сыҡҡыһы килә. Әкиәт конкурсы уларға бына шул мөмкинлекте аса ла инде. Юғиһә, һәр бер бала йырлай йә бейей алмай, ә әкиәтте уларҙың барыһы ла һөйләй ала.

Башҡорт балалары өсөн туған телдә һөйләнгән әкиәттәрҙең аудио-китабын сығарыу ҙа минең күптәнге хыялым ине. Тәүге аудиокитаптар "...Тәгәрәп китте йомғағым...", "Борон-борон заманда.." тип аталды. Быға тиклем башҡорт әкиәттәренең аудиокитаптары сыҡҡаны булманы, шуға күрә беҙ был йүнәлештә тәүге тапҡыр эш башлаусылар. Беҙ "Һаумы, һаумы, Әкиәт!" конкурсының йомғаҡлау өлөшөндә төп приз итеп I республика һәм I ҡала конкурстары еңеүселәре башҡарыуында өсөнсө аудио-китапты сығарырға вәғәҙә иткәйнек. Ниһайәт, ошо диск бөгөн беҙҙең ҡулыбыҙҙа. Ул "Һаумы, һаумы, Әкиәт - 2010!" тип атала. Дискыла республикабыҙҙың иң шәп әкиәт һөйләүсе балалары башҡарған әкиәттәр тупланған.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әкиәт - ул бөтә нәмәнең башланғысы. Бөгөнгө көндә психологияла әкиәт-терапия тигән ғәҙәти булмаған йүнәлеш тә бар хатта. Сабый баланың башҡа бер нәмәне лә аңламауы мөмкин, ләкин әкиәтте ул аңлаясаҡ. "Алтынай" студияһы сығарған "Һаумы, һаумы, Әкиәт - 2010!" аудио-китабы кескәйҙәр өсөн ҙур ҡыуаныс булырына шик юҡ.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!

# СӘЙЛӘҮ ГӘБЕ - ТОРМОШ ҒӘМЕ

**Ҡышҡы оҙон төндәр - кис ултырыу, сәйләү гәбе мәле. Беҙ ҙә бәләкәй генә төркөмдәр яһап, йыйылып алабыҙ. Бына шунда уртаҡлашҡан ҡайһы бер кәңәштәрҙе яҙып үтәйем әле.**

### Йомортҡа һаҡлау

Ауылда өй һайын тауыҡ көтөлә. Йәй йомортҡа мул, ә ҡыш өңшәйеп кибеткә барабыҙ. Үҙ өйөңдәге йомортҡаны ла һаҡлап була. Йомортҡаларҙы һытып, һыйғансы ике ҡатланған полиэтилен тоҡсайға тултыраһың. Шунан тойсайҙың ауыҙын нығытып, түшәп кенә һыуытҡысҡа (ҡыш - тышҡа) ҡуяһың. Кәрәкһә, киҫәкләп ҡырҡып алаһың.

### Помидор, кишер, сөгөлдөр туңдырыу

Был йәшелсәләр баҡсала бик уңа. Уларҙы яңы уңышҡа тиклем һаҡларға теләһәгеҙ, түбәндәгесә эшләгеҙ. Бер тигеҙ помидорҙарҙы йыуып, полиэтилен тоҡсайҙарға тултырып, һалҡынға - ҡыш тышҡа, йәйгә табан һыуытҡысҡа ҡуяһың. Борщ, щи өсөн тәғәйенләнгәнен ваҡлап турап туңдыраһың.Кишер менән сөгөлдөрҙө йә сей көйө, йә бешереп, ҡырғыстан үткәреп туңдыраһың. Аш бешергән һайын сөптөрләтеп йыуып, ҡырып тормайһың.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

### Һөҙмә

Һөҙмәне айыртылмаған һөттән ойотолған ҡатыҡтан эшләйҙәр. Яңы һауылған һөттө 1-2 минут талғын ғына ҡайнатҡас, йылымыс хәлгә еткәнсе һыуытырға ла ойотҡос һалып (3-5 литрға 1 стакан тирәһе), өҫтөн ябып ҡуйырға. Бүлмә һалҡынса булһа, һөттө йылы итеп урап ҡуйығыҙ. Ҡатыҡ ойоп сыҡҡас та өҫтөн асып һыуытырға. Етен туҡыманан тегелгән моҡсайға ҡатыҡты һалып, һарҡытырға элергә. Үҙем тишекле ҙур сүмескә 3-4 ҡат марля түшәйем дә, шунда ҡатыҡты ҡойоп тиҙ генә һарҡытып алам. Һөҙмәне үҙен генә лә, бал, йөҙөм, сәтләүек ҡушып та ашарға була.

Һөҙмәлә еңел үҙләштерелә торған аҡһым һәм аппетитты баҫа торған аминокислота барлығын да иҫәпкә алһаҡ, был ризыҡ ябығырға теләүселәргә лә бик файҙалы.

Борон һөҙмә оҙағыраҡ һаҡланһын өсөн ҡатыҡты моҡсайға ҡойор алдынан тоҙлағандар һәм оҙағыраҡ (3-4 көн) һарҡытҡандар. Ул ҡаты һөҙмә тип аталған. Һары майға сейә ҡушып һаҡлаған кеүек, ҡаты һөҙмәгә лә сейә, талҡан, ҡурмас ҡушҡандар.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИМАНҺЫҘ ИЛДӘ...

## иманлы ҡанундар булмай

Азамат ирҙең билдәһе - аҙ һөйләр ҙә күп тыңлар.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Иманһыҙ илдә иманлы ҡанундар юҡҡа сыға.

**(Рәшит Шәкүр).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: Будда аҙыҡтан ағыуланып үлгән. Бына нисек була был хәл. Будданы ҡунаҡҡа саҡырыу мөмкинселеген бер ярлы кеше оҙаҡ көткән, ти. Һәм, ниһайәт, бер көн был фәҡир Будданы беренселәрҙән булып өйөнә саҡырыу өсөн ул йоҡлап ятҡан ағас төбөнә таң һарыһынан килеп баҫҡан ти. Будда күҙҙәрен асыу менән фәҡир кеше: "Минең саҡырыуымды ҡабул ит инде! Мин оҙаҡ йылдар һине үҙемдең ҡунағым итеп күрергә хыялландым һәм был көндө түҙемһеҙләнеп көттөм"- тигән. "Килермен! "- тип яуаплаған Будда. Тап ошо мәлдә ярандарын эйәртеп, урындағы батша килеп еткән һәм Буддаға: " Мин һине һарайыма ҡунаҡҡа саҡырам. Хөрмәт күрһәт миңә"- тигән. Әммә Будда: "Бөгөн килә алмайым. Һинең һарайыңа уҡыусыларым барыр, мин иртән иртүк бер фәҡиргә ҡунаҡҡа барырға вәғәҙә иттем",- тип яуап биргән. Будданы ҡунаҡҡа саҡырған был ярлы кеше нимә менән шөғөлләнгән һуң? Һиндостандың бөтә төбәктәрендә лә, шул иҫәптән Бохарала ла, яуындар осоронда кешеләр төрлө үләндәр йыя. Шул иҫәптән кукарmутта тип аталған бик һирәк бәшмәкте лә йыйып киптерәләр, һуңынан уны йыл дауамында йәшелсә кеүек ашайҙар. Әммә ҡайһы ваҡыт был бәшмәк ағыулыға әйләнергә мөмкин. Бахыр фәҡир быны белмәй һәм Будда өсөн ошо бәшмәкте йыйып бешерә. Будда ризыҡты тәмләп ҡарау менән әсе тәм тоя. Тик был бәшмәк табынға ҡуйылған берҙән-бер ризыҡ була, фәҡирҙең кәйефен төшөрмәҫ өсөн Будда ағыулы ашты ашай. Ярлының бәхетенең сиге булмай. Будда өйөнә ҡайта, ағыуҙың тәьҫире көсәйә барғанын тоя. Табиб килә һәм ағыуҙың ҡанға китеүен, Будданы ҡотҡарып ҡалып булмаясағын хәбәр итә. Будда уҡыусыларын йыйып ала ла: "Был фәҡир ябай шәхес түгел. Сөнки был донъяла тәүге ризыҡты миңә әсәйем бирҙе, ә һуңғыһын - ул. Әсәйем миңә был тормошҡа аяҡ баҫырға ярҙам итте, ә был кеше миңә теге донъяға күсергә ярҙамлашты. Һеҙ был фәҡиргә ихтирам менән бағырға тейешһегеҙ",- ти. Был һүҙҙәр уҡыусыларын бик тулҡынландыра, ә Ананда исемлеһе хатта: "Уға һинең әсәйеңде ихтирам иткән кеүек мөнәсәбәт күрһәтеү мөмкин түгел. Ул бит үлтереүсе! Уны яҙаға тарттырырға кәрәк!"- тип яуаплай. Был ваҡытта Будда тирәһендә тик иң яҡын уҡыусылары ғына ҡалған була, һәм Будда уларға: "Мин һеҙҙең был бахырҙы үлтерә алыуығыҙҙы беләм, әммә мин әйткәнсә эшләгеҙ. Был - бөйөк алхимия! Буддаға хатта ағыу биргән ваҡытта ла ул ағыуҙан мөхәббәт барлыҡҡа килергә тейеш!"**

1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 6206
Заказ 1313